

# ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘ



ББК 83.3 Баш
Х 22

**Авторҙар коллективы.**

Х 22 Халыҡ шағиры — халыҡ хәтерендә. — Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр, сығыштар, докладтар. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996. — 128 бит.

ISBN 5-295-01950-0

Был китапҡа башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына йөҙ йыл тулыу айҡанлы (1995 йылдың ғинуарында) уҙғарылған тантаналы кисәләге, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән Башҡортостан Яҙыусылар союзы үткәргән ғилми конференциялағы сығыштар, докладтар тупланды.

Х $\frac{4603020102 - 104}{М\ 121(03) - 96}$ 107—96 ББК 83.3 Баш

ISBN 5-295-01950-0 © Төҙөү-туплау Бикбаев Р., 1996

*Мостай Кәрим,*
Башҡортостандың халыҡ шағиры

## «АЛ ДА НУР СӘС ХАЛҠЫҢА!»

Донъя поэзияһында Шәйехзада Бабич фажиғәле һәм батыр яҙмышлы шағирҙарҙың береһе. Фажиғәләр төрлө, ә йәшәү асылдары оҡшаш. Уларҙың ғазаптары, рух юғарылығы, күңел балҡыштары тарихтың илаһи мөһөрө менән билдәләнгән. Был яҙмыштар унар, йөҙәр, меңәр йылдан һуң да кешеләр йөрәгендә һоҡланыу ҡатыш әрнеү уята, ғорурлыҡ һәм хөрмәт тыуҙыра. Минең күҙ алдыма бәғзеләре ап-асыҡ булып килеп баҫа: хакимдарға баш эймәгән өсөн боронғо Римдан мәңгегә һөрөлгән Овидий Назон, папа Бонифаций VIII-гә ҡаршы күтәрелгән өсөн тереләй яндырырға хөкөм ителгән, тик хоҙай һаҡлап тигәндәй, ҡотолоп ҡалған Алигьери Данте, намыҫын ғүмеренән өҫтөн ҡуйған Александр Пушкин, Гренада ситендәге әфлисун баҡсаһында фашист пуляһы күкрәген тишеп ауған Гарсиа Лорка, Моабит зинданында һулышы өҙөлгән Муса Йәлил... Тағы күптәр...

Шәйехзада... «Шәйех улы» тип ҡушҡандар. Һәр сабыйҙың исеме күктән әшкәртелә, тиҙәр. Раҫтырмы — уныһы беҙгә мәғлүм түгел. Әммә ул үҙе, егерме дүрт кенә йыл йәшәп, туғыҙ ғына йыл ижад итеп, башҡорт һәм татар шиғриәтенең, башҡорт рухи донъяһының бер шәйехенә әйләнде, ҡылған ғәмәлдәре, әйткән һүҙҙәре, фажиғәле яҙмышы менән ул мөҡәддәс заттар дәрәжәһенә күтәрелде.

Бабич... Ул беҙҙең йөрәктәрҙә һүнмәҫ яҡты сыраҡ та, уңалмаҫ яра ла булып йәшәй. Эйе, сыраҡ та, яра ла... Был аң, был тойғо, был нур, был әрнеү быуындан быуынға күсәсәк.

Шулай ҙа, шәхси тормоштары, яҙмыштары ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, Бабич ишеләрҙең донъяға килеүе милләт өсөн, ил өсөн, кешелек өсөн бүләк, хазина, һирәк осрай торған мөғжизә. Шәйехзада Бабичты мин ана шундай мөғжизәләрҙән һанайым.

Бабич... Бер төрлө шағирҙарҙың әҫәрҙәренә ҡарап, уларҙың ҡылыҡ-тороҡтарын, шәхес һыҙаттарын аҙ-маҙ самалап төшөнәһең. Ә икенселәрҙең бай, көслө шәхестәре аша ижадтарының төпкөлөнә төшәһең, иң тәрән серҙәренә юлығаһың, яңынан-яңы асыштар яһайһың. Шәйехзада Бабич ана шул икенселәр рәтендә. Хатта уның һәләкәте лә ижадын һәм тормошон аңлата, асыҡлай. Әжәл уға, былай ҡарағанда, аҙашып килгәнме, әллә гел аңдып йөрөгәнме — эш унда түгел. Хәҡиҡәт шунда: халыҡ тормошонда тәҡдирҙәр хәл ителгән дауыллы йылдарҙа ул ваҡиғалар артына боҫоп ҡалмаған, ә ғәрәсәттең эсенә, уртаһына ингән. Ундай хәтәр ерҙә, ундай хәтәр саҡта Ғазраил ҡайҙан, ҡасан килерен алдан хәбәр итмәй. Аяныслы юғалтыуҙарға ҡарата беҙ йыш ҡына: «Бәлки...», — тибеҙ. «Ихтимал...», — тибеҙ. Ошондай ялҡынлы шағирҙың, ошондай ир-егеттең майҙандан ҡасып, ышыҡта ҡалыуы ихтимал түгел ине. Шуға күрә «бәлки»ҙәрҙең мәғәнәһе юҡ. Уның йәшәүе, ижады, һәләкәте — тотош бер балҡыш, бер оран, бер моң һәм беҙ уны шулай ҡабул итәбеҙ ҙә. Әммә әҙәм яҙмышының серҙәрен асып бөтөрөү мөмкин түгел. Ундай һәләт беҙгә бирелмәгән. Тик самалап һиҙемләй генә алабыҙ. Әйтәйек, егерме бер йәшлек Бабичты «Йәш шағирҙың ҡәбер ташына» тигән шиғырын яҙырға ниндәй рухи талап, күңеленең ниндәй тулҡындары мәжбүр итте икән?

*Ваҡлығы менән йыһандың*
*ваҡһынаһым килмәне,*
*Ят үлемде ҡаршы алдым,*
*ятһынаһым килмәне. —*

тип башлана ул. Ошондай юлдар, матур теҙмә теҙеп, һүҙ сөйөү өсөн генә яҙылмайҙыр. Үтә етди нәмә. Бында шағирҙың үҙ тәҡдирен шәйләүе барҙыр, моғайын. Бер ни тиклем Туҡайға эйәреү тойола. Ләкин бит ерле юҡҡа ғына эйәрмәйҙәр. Уның да зарураты, эске сәбәбе була. Ул — һиҙенеү. Өс йыл алдан һиҙенгән булыр Шәйехзада.

Мөһәбәт тауҙар араһында, йәки шаулы даръялар

ярында, йәки икһеҙ-сикһеҙ ҡара урмандар эсендә тыуып үҫкән шағирҙарға ҡарата былай тибеҙ: «Уның ғорурлығы тауҙарҙан... Уның ярһыу йөрәге диңгеҙҙән... Уның серле, моңһоу күңеле урмандарҙан...» Ә бына Бабич тыуып үҫкән Дүртөйлө яҡтарында, Әсән тарафтарында тауҙар ҙа, диңгеҙ ҙә, шомло ҡара урмандар ҙа юҡ. Уйһыу ғына ерле бер төбәк ул. Ә тәбиғәт шағирға бөтәһен дә — хөр, азат рух та, ярһыу йөрәк тә, һағышлы күңел дә, зирәк аҡыл да биргән. Шуға күрә ул, шиғриәт хаятына ингәс үк, донъяға һоҡланып, ғәжәпләнеп тә, уның менән бәхәсләшеп, даулашып та йәшәй башлай. «Тәбиғәт ожмахы», «Йәмле көн», «Һабантуй һәм милли байрамдар», «Яҙғы байрам» кеүек шиғырҙарында сағылған тәбиғәттәге гармония, көйләнгәнлек йырсының күңелен иркәләһә, бәғзе әҫәрҙәрендә ул донъяны ялғанлыҡта, ғәриплектә ғәйепләй, уның ҡағиҙәләрен инҡар итеүгә барып етә, уға буй бирмәй, үҙ юҫығын раҫлай.

*Үҙ маяғымды*
*Үҙемсә ҡаҙап,*
*Үҙ һабағымды*
*Үҙемсә аңлап,*
*Юлдар яһармын,*
*Шулай йәшәрмен.*
*Иманым — үҙем!*
*Ҡөрьәндер һүҙем.*

«Яҡты нурлы көндәрҙең» килеүенә инанып, ул шәфҡәтһеҙ заңдарға, туҙған ҡанундарға ҡаршы үҙ ижадында яу асты. Бының өсөн күмәртә тәүәккәллек, ғәййәрлек кәрәк ине. Хәйер, ҡурҡаҡлыҡ, абайлылыҡ уға хас сифат түгел. Баяғы ҡатып ҡалған ҡанундарҙың, заңдарҙың һағында тороусы мулла-монтағайға ла ул етерлек ҡаныҡты. Үҙе мулла балаһы була тороп... Хәтәр ине уның заманында былдай ҡылыҡтар. Был һиңә хәҙерге көндә урам саты һайын — яза алмай, ҡаза күрмәй — президенттар һүгеү түгел.

Үҙе үк раҫлауынса ул — Ғабдулла Туҡай шәкерте. Шәкерт, ләкин эйәрсен, өйрәнсек түгел. Башҡорт һәм татар поэзияһының йәнле ағымына әле лә ҙур йоғонто яһаусы күренекле бер оҫта ул — Шәйехзада Бабич үҙе.

Беҙ хәҙер 75 йыл буйы йыйылып килгән маҡтау һәм хөрмәтләү, рәхмәт һәм ихтирам һүҙҙәребеҙҙе Бабичҡа тулайым әйтергә тырышабыҙ. Бурысыбыҙҙы тиҙе-

рәк түләргә ашығабыҙ. Баһаларыбыҙ ғәҙел һәм хаҡлы. Үҙе ишетмәһә лә уларҙы ил ишетә. Шул уҡ ваҡытта бер нәмәнән һағыраҡ булайыҡ. Уның тураһында эреһен эрегә, вағын ваҡҡа, алтынын алтынға, баҡырын баҡырға айырмай, бөтәһен дә бер өйөмгә өйөп һөйләү, бер көйгә көйләү шағирҙы монар аша төҫмөрләнгән шәүләгә, таушалған мифҡа әүерелдерерүгә килтерер ине. Уның мираҫы иһә тере инеш, шәхес — реаль, тарихи. Уның ҡыҫҡа ғына ижад ғүмерендә ғәжәйеп осоштар, йәғни күктәргә олғашыуҙар ҙа, түбәндәрәк кәйелеүҙәр ҙә булды. Уға әлбиттә, бөтәһенән әүәл «Халҡым өсөн», «Айға мендем», «Әллә Алла, әллә Иблес», «Кем өсөн?», «Ғазазил» ише әҫәрҙәр бейеклеге хас, һәм шундайҙар шағирҙың талант ҡеүәтен билдәләй ҙә. Ә инде ҡайһы бер ваҡ шаярыуҙар, ирмәк һүҙ уйнатыуҙар, телмәр йәки нотоҡҡа тартымыраҡ нәмәләр, айға менеүҙе, ҡояшҡа үрләүҙе дәғүә итмәй, үҙ урындарында ҡалырға һәм үҙ кимәлдәрендә баһаланырға тейеш. Уларҙа заман күренештәре. Ошо рәүешсә айырып ҡарау булғанда, «ап-аҡ алтын йырҙар» оторо сағыу балҡыясаҡ, оторо көслө яңғыраясаҡ. Был йәһәттән беҙҙең ғалимдарыбыҙ ентекле эшкә тотона ла инде.

Күңеленә тәбиғәтме, илаһи бер көсмө һалған йырҙарының бик аҙын йырларға, әйтер һүҙҙәренең бик аҙын ғына әйтергә өлгөрҙө ул. Ләкин йырланған йыры тынмаҫ, әйтелгән һүҙе һүнмәҫ. Сөнки иң кәрәк саҡта иң кәрәклеһен көйләне, иң кәрәклеһен һөйләне шағир. Донъяға үҙенең кәрәклеген белеп килде. Шуның менән дә бөйөк ул.

Шәйехзада Бабич... Уның бәлиғ ғүмере һил, имен йылдарға тура килмәне. Һуғыш, ҡан ҡойош, аҡылға һыймаҫ буталыштар. Үҙ осороноң балаһы булған шағир һәр йәһәттән халҡының яҙмышын уртаҡлашты.

*Йәш сағым, алтын сағым,*
*Ялҡын сағым булһын фиҙа*
*Халҡым алдында минең*
*Биргән таҙа антым өсөн...* —

тигәйне ун туғыҙ йәшендә. Антына тоғро ҡалды. Һәм шуға ла халыҡ уның йырҙарына, уның исеменә үҙ йөрәгенән мәңгелек төйәк бирҙе. Тимәк, халыҡтың Бабичы, Бабичтың халҡы үлемһеҙ.

## БАБИЧ ӨНӨ

Ай нурына манып, йырҙар теҙҙем.
Халҡым өсөн, тинем, яҙғаным.
Нур өләшеп ҡараңғыла ҡалдым,
Мин бисара — Шәйехзадамын.

Дан татыным. Уртаһында булдым
Ел-дауылдың, бәлә-ҡазаның.
Илем өсөн ҡаныма сәсәп ауҙым,
Үкенмәйем, Шәйехзадамын.

Заманымдың барлыҡ ҡылығына
Үҙем аҡлау, үҙем язамын.
Егерменсе ошо быуат мин ул:
Мин Бабичмын. Шәйехзадамын.

1995.

*Раuил Бикбаев,*
Башҡортостандың халыҡ шағиры

## ҠАНАТЛЫ БАБИЧ

Бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич тураһындағы һүҙемде барығыҙға ла билдәле ике ҡыуаныслы ваҡиғанан башлағым килә. Уларҙың береһе — шағирҙың тыуған тупрағы Әсәндә уға һәйкәл асыу тантанаһы. Икенсеһе — шағирҙың егерме дүрт йәшендә ғүмере өҙөлгән Йылайыр ерендә уға һәйкәл ҡуйыу байрамы.

Борон-борондан һәр халыҡ үҙенең шағирҙарын ололар, ҡәҙерләр булған. Ләкин бер үк шағирға бер үк ваҡытта бер юлы ике һәйкәл асҡандарын мин үҙебеҙҙә генә түгел, башҡа әҙәбиәттәр тарихында ла белмәйем.

Эш, әлбиттә, һәйкәлдәрҙә генә түгел. Илде ҡан илатҡан хакимдарҙың ил буйынса меңәрләп ҡалҡҡан тәкәббер һәйкәлдәренең бер заман селпәрәмә килеп ҡыйралғанын да күрҙек бит.

Ләкин шағирҙарҙың һәйкәле бөтөнләй башҡаса. Ғорур Пушкин бына нимә тигән:

*Я памятник себе воздвиг нерукотворный,*
*К нему не зарастет народная тропа.*

Һүҙ бында ниндәйҙер таш һын тураһында бармай. Һәр шағир үҙенең зирәк зиһене, ҡаһарман йөрәге, ҡайнар һөйөүе, ҡыйыу һүҙе менән тыуған ерендә, замандаштарының һәм килер быуындарҙың күңелендә һүнмәҫ яҡтылыҡ, нурлы һәйкәл ҡалдырып китә. Шәйехзада Бабич бына шундай шағирҙар сафынан, шундай изге шәхестәр затынан.

Уның ғүмере тарихи юлдарҙың үтә ҡатмарлы сағына тура килде. Шәйехзада Бабич башҡорт тарихындағы

иң бөйөк, шул уҡ ваҡытта иң ҡатмарлы, иң фажиғәле яҙмышлы шағирҙарҙың береһе.

* * *

1895 йыл Мөхәмәтзакир Бабичев мулланың йортонда ҡот-ҡыуаныс менән башланып китә: ғинуарҙың икеһендә был йортта ир бала донъяға килә. Йөҙлөк менән тыуа был сабый. Яҙмыш уға яҡты донъяла, әйтерһең дә, тәүге һулыш алыуынан уҡ аҡ бәхеттәр генә юрап тора. Бәхет билдәһе булған йөҙлөк менән тыуған был балаға Шәйехзада тип исем ҡушалар.

Халыҡ тормошондағы бәхетле мәлдәр, йөҙ йылдарға бер була торған илаһи сәғәттәр! Тыныс ҡына таң ҡаршылаған Әсән ауылы ла, ап-аҡ бәҫкә күмелгән туғайяландар ҙа, уйға сумған алыҫтағы Урал армыттары ла был илаһи таңда башҡорт еренә ниндәй оло бәхет килгәнен, милләтебеҙҙең күҙ ҡараһы, йөрәк парәһе, йәненең киҫәге буласаҡ аҫыл заттың тыуғанын белмәй әле.

Бынан нәҡ йөҙ йыл элек — 1895 йылдың икенсе ғинуарында Әсән ауылында донъяға килгән ошо изге йән — башҡорттоң буласаҡ атаҡлы шағиры Шәйехзада Бабич үҙе лә затлы нәҫелдән. Һүҙ бында ниндәйҙер байлыҡ йәки аҡһөйәклек тураһында бармай. Бабичтар ғүмер буйы тир түгеп, хәләл көс менән көн күргәндәр, илдерҙе ҡурсалап, быуын-быуын хәрби хеҙмәттә булғандар, дошманды ҡыуып, яуҙар сабып, Парижға ла барып еткәндәр. Ҡулына ҡылыс тотоп, ил һаҡлағандары ла, ҡулына ҡәләм алып, илгә ғилем таратҡандары ла күп булған уларҙың. Нисек кенә ғүмер кисермәһендәр, Бабичтар күңелдәрендә һәр саҡ иман нуры, мәғрифәт яҡтылығы балҡып торған, ҡараштарынан миһырбанлыҡ, мөрәүәт бөркөлөп торған затлы нәҫелдән. Был затлы нәҫелдең быуаттар төпкөлөнән башҡорт тупрағына тамырланып үҫкән шәжәрә ағасының бер тармағы Бәбес олатай — уның улы Мөхтәр — уның улы Ишбулды — уның улы Ғилуан — уның улы Мөхәмәтзакир буйлап Шәйехзадаға килеп тоташа. Бәбес олатаның улдары, ейәндәре, бүләрҙәре араһында есаулдар ҙа, сотник та, старшина ла, указлы муллалар ҙа булған. 1888 йылдан башлап Әсән ауылында икенсе мәхәлләлә мулла булып торған Мөхәмәтзакир Бабичевтың атай-олатайҙары төрлө ваҡытта Тартыш, Ҡыйғаҙытамаҡ, Шаҙы ауылдарында ғүмер һөргән.

Мөхәмәтзакир мулланың йортонда китап һәр саҡ иң ҡәҙерле байлыҡ булған, бында газета-журналдар даими килеп торған. Бәләкәстән үк уҡырға бик зирәк Шәйехзаданың күңелендә тәбиғәттән бирелгән ижад һәләте китап нуры төшкән был йортта бик иртә асылған.

Тарихта әллә ниндәй ғәжәп тап килеүҙәр бар. Бына шуларҙың береһе: Аҡмулланың үлгән йылы — Бабич тыуған йыл ине. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» тип оран һалған Аҡмулланың ярһыуҙары һәм өмөттәрс әйтерһең дә васыят—аманат булып Бабич яҙмышына килеп тоташты. Шул уҡ ваҡытта Ғабдулла Туҡай уның өсөн иң оло остаз булды. Туҡай мәктәбе Бабичҡа шиғри оҫталыҡтың серҙәрен генә түгел, иң мөһиме, ижадтың маҡсатын, шағир һәм халыҡ тигән бәйләнештең тәрән мәғәнәһен аңларға өйрәтте. Ғүмере буйы башҡорт йырҙарына, ҡобайырҙарына һоҡланып йәшәү уның ижадының мөһим тамырын билдәләне һәм уға үҙенсәлекле милли төҫ бирҙе.

Тәүге шиғырҙарында уҡ Шәйехзада Бабич: «Күңел һыҙлай, һыҙлай, һыҙлауыҡ бар, ҡара көстәр уны тотҡанға», — тип, был донъянан йәм таба алмай өҙгөләнде. 1910 йылда ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡытҡан — мулдәкәлек иткән сағында яҙылган шигырында йәш шағир былай тине:

*Ҡайҙа юғалды яҙыҡһыҙ аҡ сағым, моңһоҙ сағым?*
*Үтте ғүмеремдең хәҙер бер йөҙ ҙә туҡһан айҙары.*
*Буйға еткәс тә юғалттым мин ҡояшымды кинәт,*
*Тик был көндәрҙә түбәмдә тапҡа сумған ай йөрөй.*
*Ә хәҙер күңелем минең боҙҙай туңып, таштай ҡата,*
*Сөнки йөрөгән ерҙәрем тик ҡап-ҡара Турғай ере.*

Оло тормош юлына дәртләнеп аяҡ баҫҡан үҫмер кеше ҡояшын юғалта. Хатта уның урынына ҡалған ай ҙа тапланып, бысранып бөткән... Ҡояш эҙләүсе кеше... Ижад юлына Бабич бына шундай ынтылыштар менән аяҡ баҫты. Ләкин уның «боҙҙай туңып, таштай ҡатып» һыҙланыуҙары әле башлана ғына ине.

1911 йылдың көҙөндә Шәйехзада Бабич даны бөтә Рәсәй сиктәренән үткән «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инде. Бында ҡулъяҙма журнал сығарыуҙы, әҙәби-музыкаль концерттар ойоштороуҙы йор һүҙле, музыкаль һәләтле Шәйехзада һәр саҡ алдан башлап йөрөнө, тиҙ арала мәҙрәсәнең иң абруйлы шәкертенә әйләнде.



Ләкин бындағы тормош та уға тар тойолдо. Ғүмеренең үтә ҡыҫҡа булырын күңеле алдан һиҙгән кеүек Бабич һәр саҡ янып-талпынып йәшәне. Йәйге ял ваҡыттарында ла Әсәндә атаһы-әсәһе янында бер-ике көндән артыҡ торманы, әле Дүртөйлө, әле Бөрө яҡтарында халыҡ менән осрашып йөрөнө, әле яңынан ҡаҙаҡ далаларына сығып китте, әле Һаҡмар, Яйыҡ буйҙарына башҡорт йәйләүҙәренә юл тотто. Тормошонда ла, ижадында ла шул уҡ ашҡыныу, шул уҡ ярһыу.

Талантлы Бабич, ҡанатлы Бабич... Юҡҡамы ни уның мандолинаһын да ҡанатлы тип йөрөткәндәр. Мандолинала иҫ киткес оҫта уйнауы менән шағир барлыҡ замандаштарын хайран ҡалдырыр булған. «Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос!» — тип үрһәләнгән шағир. «Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут, берсә янды, берсә тунды, барыһы булды бер минут» — Бабичтың шиғри темпераментын ғына түгел, барлыҡ йәшәү рәүешен, холоҡ-фиғелен ошонан да тапҡырыраҡ асыусы һүҙҙәрҙе табыуы ҡыйын.

Шағирҙың ижади үҫеше тигән үтә ҡатмарлы күренеш бер ҡасан да тигеҙ генә юлдан бармай. Ләкин һәр оло талантттың ижадында уның яңы биттәрен асыусы айырыуса әһәмиәтле әҫәрҙәр була. 1914 йылда яҙылған «Халҡым өсөн» исемле шиғыр менән, Бабич ижадын өйрәнеүгә күп өлөш индергән күренекле ғалим Әхнәф Харисов әйтеүенсә, Бабич шиғриәтенең ысын өлгөрөп еткән осоро башланып китте.

*Йәш сағым, алтын сағым,*
*Ялҡын сағым булһын фиҙа,*
*Халҡым алдында минең*
*Биргән таҙа антым өсөн.*

Халыҡ Бабичтың ғүмер буйы табынасаҡ иң оло мөхәббәте булды һәм шағирҙың барлыҡ яҙмышын ошо инаныу билдәләне.

«Халҡым өсөн!» тигән принципты байраҡ итеп күтәргән Шәйехзада Бабич һымаҡ ғәжәп етеҙ үҫеш юлы үткән, үтә йәшләй гөлтләп ҡабынған, үтә йәшләй милләтенең ғорурлығына әйләнгән, балҡып янғанда ғүмерҙәре өҙөлгән шағирҙар донъя әҙәбиәтендә бик һирәк. Лермонтов, Петефи, Туҡай, Константин Иванов...

Бабич ижадындағы йылдар ваҡыт теҙмәһе генә түгел, улар шағир ҡарашының киңәйеүен, талантының нығыныуын раҫлаусы мәңгелек баҫҡыстар. 1914 йылды

шағир «Халҡым өсөн» тигән изге теләк менән башлап ебәрһә, 1915 йылда замандаштарына «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмеренде!» тип оран һалды, иҙелгән халҡын «Әйҙә, милләт!» тип алға саҡырҙы. 1916 йылда «Көтәм», «Кем өсөн?» кеүек классик шиғырҙарында уй-кисерештәр тағы ла тормошсаныраҡ, поэтик үткерерәк төҫ алды.

Туған халҡына мөхәббәте, уның киләсәгенә бағлаған өмөттәре Бабичтың 1916 йылда яҙылған «Көтәм» исемле шиғырындағы һәр юлға мөлдөрәмә тулған. Был әҫәр Бабич ижадында ғына түгел, барлыҡ башҡорт лирикаһындағы иң аҫыл гәүһәрҙәрҙең береһе.

Башҡорт туғайҙарын, Яйыҡ, Һаҡмар буйҙарын гиҙгәндә, ҡурай моңдарын тыңлағанда шағир күңеле әллә ҡайҙарға елкенә, ярлы ауылдарҙы күреп, бәғерҙәре өҙгөләнә.

Халҡыбыҙ берҙәмлегенең символына әйләнгән, ниндәй ауырлыҡтарҙа ла олпатлығын юғалтмаған изге Уралыбыҙға Бабич торған һайын нығыраҡ таянды. Ошондай бәйләнеш арҡаһында шиғыр киләсәккә ҙур ышаныс менән тамамланды:

*Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,*
*Урал ята әкрен, тын ғына.*
*Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,*
*Килә башлай йәмле уй ғына...*

*Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан*
*Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын,*
*Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,*
*Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.*

Был шиғырҙың башҡортса яҙылыуы ла уны милли әҙәбиәтебеҙҙең үҫеш юлында үҙенсә мөһим тарихи факт дәрәжәһенә күтәрә. Башҡорт телен танымаҫҡа тырышыусыларҙың тауышы әленән-әле ишетелеп торған саҡта уҡ Бабичтың туған телдә шиғыр яҙырға, уны матбуғатҡа тәҡдим итергә, башҡорт теленә тулы хоҡуҡ биреү өсөн тәүгеләрҙән булып эшкә тотонорға ҡыйыулығы етте.

Бабичтың «Үткән көндәр» исемле шиғырында башҡорт шиғриәтенең шул осорҙағы рухи һәләтен бик тапҡыр әйтеп биргән ошондай юлдар бар:

*Күңелем мең төрлөгә талпынғанда,*
*Көнөм бер төрлөгә янам мин.*

«Ăктыӻ зарым» шиғырындағы кисерештәргә иғтибар итәйек:
*Нишләйем һуң? Әйтсе, зинһар: сәнселәйемме, нишләйем?*
*Сәнселеп, сәсрәп сығайыммы? Нишләһәм дә эш ӻыйын.*
*Нишләйем һуң? Зәӻуумлы хәсрәттәр менән күңелем яна.*
*Нишләйем һуң? Мәлғүн иблестәр төкөргән донъяға!*

«Нишләйем һуң?» Шағир был һорау менән үҙен-үҙе генә йөҙәтмәй. Ошо һорау менән шағир замандаштарына, халӻына, хатта йылдар аша күҙебеҙгә ӻарап беҙгә өндәшкән кеүек. Нишләйем һуң? Нишләйек һуң?

Икенсе бер урында шағир «Пәйғәмбәрҙәр нәҫеле булған менән иблестән дә уҙған әҙәмдәр» тигәйне. Шуға ла ул байтаӻ әҫәрҙәрендә, тигеҙһеҙ тормошто ӻәһәрләп, ӻайҙалыр күктәргә, ғәрше әғләләргә уӻталды. Шағирҙың ошондай тынғыһыҙ уйланыуҙарында ӻатмарлы эҙләнеуҙәре үҙенсәлекле сағылыш тапты.

Бабичтың күккә талпыныуы ла ғәҙәттәге романтик талпыныуға ғына ӻайтып ӻалманы. Күптән хрестоматия әҫәренә әйләнгән, шиғриәтебеҙҙең аҫыл ташы булған «Ҡем өсөн?» исемле кескәй генә шиғырҙа Бабич романтизмының төп аҫылын күреп була. Бына ул шиғыр:

*Айға үрләп, нурҙа уйнап,*
*Күкрәгемде нурланым.*
*— Ит ғәфү әй, ай, тинем мин,*
*Нурҙарыңды урланым.*

*— Һис зарар юӻ, ал, тине ай,*
*Ал да нур сәс халӻыңа!*
*Мин дә бит төн хаӻына*
*Алдым ӻояштың нурҙарын.*

Ниндәйҙер «серле» ярһыуҙарҙан түгел, халӻы өсөн яӻтылыӻ эҙләп, шағир ай-йондоҙҙарға осто һәм унда ла үҙе өсөн иң изге һүҙҙәрҙе ишетте: «Ал да нур сәс халӻыңа!»

1916 йылдың 11 майында Мәскәүҙәге «Сүз» газетаһында Бабичтың «Ҡараңғылыӻта», 15 майҙа «Бәхетем» тигән шиғырҙары донъя күрә. Бер арала сыӻҡан әҫәрҙәрҙең исемдәре үк ӻапма-ӻаршы мәғәнәлә.

«Ҡараңғылыӻта» шиғырында шағир, яӻты эҙләп, күккә баға — унан яӻты нимәй, ергә баӻһаң — ер ҙә ӻараңғы. Үкһеп илаһаң да ӻараңғылыӻ таралмай.

«Бәхетем» шиғыры иһә ниндәй сағыу буяуҙар менән башланып китә:

*Зәңгәр күк — тажым, сыбар ер — тәхетем,*
*Үҙем — азат йән, аҡ ҡояш — бәхетем.*

Ошо киләнес мәлендә шағир донъяға һыймай ҡанатлана:

*Шашам, ашҡынам... Шатланам сикһеҙ.*
*Азат мин, азат! Бәхетем офоҡһоҙ!*

Бабич лирикаһында кеше күңеле ошондай киҫкен үҙгәрештәрҙә асыла. Моғайын, «бәхетем офоҡһоҙ!» тип ашҡыныуҙарҙан бигерәк Бабичҡа «офоғом бәхетһеҙ» тип йышыраҡ һыҙланырға тура килгәндер.

«Һалҡын аҡылың үҙеңә булһын!» — Бабичтың донъяға төбәп әйтелгән был һүҙе уның ижад тәбиғәтенә лә бик тап килә. Бабич ҡоро вәғәз йәки шау тойғо шағиры булманы. Кеше психологияһының төрлө хәлдәрен асыу оҫталығы, шәхестең күп яҡлы рухи донъяһын күрһәтеү һәләте буйынса Бабич шиғриәте башҡорт әҙәбиәтенә бик ҙур яңылыҡ алып килде.

Бабичтың «Себер сәхрәһендә ҡаҙаҡта уҙғарған көндәрем» исемле 1913 йылғы көндәлек яҙмаларында ошондай юлдар бар: «Уйымдың осо-ҡырыйы юҡ. Уйланған ваҡытта, хыял донъяһына сумған ваҡытта донъямды онотам. Күҙ алдым томалана, һаңғырау кеше кеүек, һүҙҙе ишетмәйем... Ауырыған ваҡытта күберәк ауырыуым башымда була».

Шәйехзада бәләкәстән үк бына шулай туҡтауһыҙ уйланыусан, донъяһын онотоп, хискә бирелеүсән шәхес булып үҫә. Шуға ла ул кескәй генә шиғырҙарында ла ғәжәп тәрән фәлсәфи ҡатламдарға үтеп инә алды. Мәҫәлән, ҡылған енәйәттәр һәм шуларға бәрәбәр ғәҙел хөкөм тураһында донъя әҙәбиәтендә кемдәр генә уйланмаған. Достоевскийҙың «Енәйәт һәм яза»һы үҙе генә лә ни тора! «Гонаһ, яза» исемле шиғырында Бабич ошо мәңгелек хәлдәрҙең үҙ яҙмышындағы бәрелешен бына нисек аса:

*Таяныып әйәккә,*
*Күҙ текәп йыраҡҡа,*
*Ултырам уйланып,*
*Бер үҙем бер яҡта.*

*Уйланам, уйланам,*
*Уй менән юғалам...*
*Бер ваҡыт кинәттән*
*Һиҫкәнеп уянам.*

*Уянам, ни күрәм:*
*Әйләнә һәр тирәм,*
*Уй тәрән һәм томан...*
*Шаҡ ҡатып тик торам.*

*Мин, имеш, аҙам,*
*Мин, имеш, туҙам,*
*Гонаһым — туҙан!*
*Тау кеүек язам.*

Туҙан хәтле гонаһы булмағанда ла Бабичҡа тау хәтле язаларҙы үткәрергә тура килде.

Бабичтың мөхәббәт лирикаһы башҡорт әҙәбиәтендә шулай уҡ өр-яңы күренеш. Ул ниндәйҙер яһалма, тойғоһоҙ һөйөүҙе кире ҡаҡты, мөхәббәттең тәбиғилеген, бөйөклөгөн данланы.

*Матур һындар, матур ҡыҙҙар, матурһыңдар,*
*Әйткән саҡта исемегеҙ ҙә матур сыңлар.*
*Һеҙҙе күреп, йәмгә сумып, киттем иреп,*
*Ғаҡылһыҙҙар: «Ғаҡылһыҙ!» — тип баҡырһындар.*
*Ике тәңре: әүәл—алла, икенсе—ҡыҙ! —*
*Тимәһәгеҙ, билләһи, кафырһыңдыр!*

Ҡыҙҙы алла менән тиңләү шаянлыҡ ҡына түгел, ул саҡта иң ҙур гөнаһтарҙан һанала ине һәм шағирҙың ҡанундарҙы ҡыйыу емереүе ине.

1914—1919 йылдарҙа Бабич үҙенсәлекле сатирик һәм юморист булараҡ та ҙур дан ҡаҙанды. Төрлө шиғырҙарын, «Ғазазил» исемле поэмаһын яттан һөйләп, Өфө, Ырымбур, Троицк, Бөрө, Темәс сәхнәләрен шаулатты, төрлө ауылдарҙа, йыйындарҙа ла кешеләр уны хайран ҡалып тыңланы. Асылда Бабич башҡорт һәм татар донъяһында шиғриәтте сәхнәгә шул дәрәжәгә күтәрә алды ки, ул бер үҙе тотош кисә тыуҙырыр көскә әйләнде. Был яҡтан уның эҙләнеүҙәре халыҡ менән аралашыуҙа сәсәндәр мәктәбенең поэтик һәм ораторлыҡ традицияларын дауам итте, бигерәк тә Аҡмулла шиғриәте менән ауаздаш булды. Айырма шунда: Аҡмулла дала-

ла, сәхрәлә даһи булһа, Бабич далала ла, ҡалала ла, сәхрәлә лә, сәхнәлә лә даһи ине.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһен 1916 йылда тамамлап сыҡҡандан һуң Бабич Троицкиҙа бер уҡыу йылы мөғәллимлек итте. 1917 йылдың авгусында «Ҡармаҡ» журналының саҡырыуы буйынса шағир Ырымбурға килде. Ләкин журналда Бабич оҙаҡ эшләмәне. Яңы тарихи ваҡиғалар бәрелешендә уның яҙмышы бөтөнләй икенсе йүнәлештә боролдо.

Батша тәхете ҡолатылыу менән Россияла милли хәрәкәт айырыуса көсәйеп китте. Башҡорттар араһында ла ер һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш киң йәйелде. Зәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт хәрәкәте Рәсәй империяһын дер һелкеткән милли ҡуҙғалыштарҙа иң ныҡ ойошҡан, авангардта барған көстәрҙең береһенә әйләнде.

Барлыҡ Башҡортостанды төньяҡта ғәйнә башҡорттарынан алып көньяҡта Туҡсоран яҡтарына тиклем, көнсығышта ялан ҡатайҙарҙан алып көнбайышта Һамар далаларына тиклем киң араларҙы иңләгән был милли хәрәкәттең үҙәге Ырымбурҙа тупланды.

Был ҡалала ноябрь урталарында башҡорт халыҡ йорто Ҡаруанһарай яҡынан ҡайтарып алынды, Башҡортостан мөстәҡиллеге иғлан ителде. Мәркәз шураның фармандары халыҡҡа таратылды. Башҡорт ғәскәре төҙөү буйынса эштәр башланды. 8—20 декабрҙә башҡорт ҡоролтайы ҙур күтәренкелек менән үтте.

Шәйехзада Бабич был тарихи ваҡиғаларҙың үҙәгендә булды. Башҡорт мәркәз шураһының сәркәтибе, «Башҡорт» газетаһын ойоштороусыларҙың береһе булараҡ яуаплы һәм тынғыһыҙ эштәр башҡарҙы. Ырымбурҙа башҡорт йәштәренең «Тулҡын» ойошмаһын төҙөүгә күп көс һалды. Атаҡлы шағир, күренекле дәүләт эшмәкәренә, башҡорт азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыларының береһенә әйләнде. 1918 йылда «Тулҡын» нәшриәтендә Бабичтың «Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар» исемле тәүге китабы донъя күрҙе.

Ошо китапҡа ингән «Тупраҡ» исемле шиғырында Бабич былай тип яҙғайны:

*Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,*
*Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.*

1917 йылда ойошҡан башҡорт милли хәрәкәтенең тамырҙары быуаттар дауамынан килгән күтәрелештәргә

барып тоташа ине һәм уларҙың барыһының төп талабы ер, Башҡортостандың азатлығы мәсьәләһе ине. Ерһеҙ азатлыҡ булмаған кеүек, тигеҙлек, ирек тураһында уйланыуҙарҙың Бабич шиғырҙарында ер образына килеп тоташыуы тәбиғи ине.

Эйе, Бабич йөҙ тапҡыр, мең тапҡыр хаҡлы булған: «Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ». Бөгөн ер һатыу тураһында тамаҡ ярып ҡысҡырыусыларға, бөгөн башҡорт ерен таларға хыялланыусыларға ҡаршы төбәлгән кеүек Бабичтың был зирәк һүҙҙәре.

Милләттең йәшәү нигеҙе булған ошо ғәзиз ерҙе һаҡлап ҡалыу өсөн көрәштә шағир Шәйехзада Бабич иңенә яугирлыҡ бурысы ла өҫтәлде һәм ҡанлы яуҙарҙа, утлы алыштарҙа ул бик күпте кисерҙе. Шағир һәм яугир булыу беҙҙең халыҡта борондан килә. Һәр хәлдә беҙ белгәндәре Салауаттарҙан алып — Мостай Кәримдәргә килеп етә. Зәки Вәлиди ҙә ғалим һәм яугир.

Шулай ҙа башҡорт халҡы — яугир халыҡ тип йыш ҡына ғорурланып әйтелгән һүҙҙәр йөрәкте сәнсеп тә ҡуя. Башҡорт ҡулы ҡысытҡандан ҡылысҡа тотонмаған, ә илен һаҡлап ҡорал алған. Ләкин уға ҡайһы саҡта үҙе теләмәгән яуҙарға ла ат эйәрләргә тура килгән.

Бабичтың шағирлығы хоҙай тарафынан бирелһә, яугирлығы заруратттан килде. Милли күтәрелеш ваҡытында шағир үҙендә тағы ла ҙурыраҡ яуаплылыҡ тойҙо, шиғырҙары кешеләрҙе рухландырыусы оран булды. «Йәш Башҡортостан» китабына «Ҡурайҡайға», «Башҡортостан», «Салауат батыр», «Ҡөтмәҫтән» кеүек һәр юлынан тыуған ер рухы бөркөп торған шиғырҙар тупланғайны.

Башҡорт шиғриәтендә Башҡортостан образы үҙ исеме менән тәү башлап Шәйехзада Бабич шиғырҙарында кәүҙәләнде. Әлбиттә, ут эсендә йөрөгәндә шағир гелән генә «Башҡортостан — гөлбостан» тип кенә йөрөмәгәндер, ләкин уның иң ауыр саҡтарҙа ла маҡсаттарына шикләнеп ҡарағаны булманы, һәләкәттәр эсендә лә ул кешеләрҙә киләсәккә өмөт уятырға тырышты.

«Күҙеңде ас» — был шиғырҙың исеме үк уяулыҡҡа саҡырып тора:

*Күҙеңде ас, егет, бул ҡаһарман,*
*Зәһәр сәсеп ажғыр, ҡәһәрлән.*
*Кұр, илеңде ялмап һәр яғынан,*
*Дөрләп янып килә йәһәннәм...*

*Һис ҡайғырма, шатлан әүәлгесә,*
*Бәхет еңер әле, иншалла.*
*Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса,*
*Ожмах табырбыҙ тип ышанма!*

Күпме йәһәннәмдәр аша үткән башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 февралендә ҡыҙылдар яғына сыҡты. Ошо ваҡытта Бабич «Большевиктар менән килешеү тураһы башҡорт халҡына көйлө хитап» тигән мәшһүр шиғри өндәмәһен яҙҙы. Листовка рәүешендә баҫылып, ғәскәрҙәргә, ауылдарға таратылған был хитап шул осорҙағы политик хәлдәрҙе аңлатыу, Зәки Вәлидигә тағылған төрлө ялған ғәйептәрҙе фашлау менән бергә башҡорт азатлыҡ хәрәкәтенең бороңдан килгән тамырҙарын барлау һәм милләттең бөгөнгө көрәш дәртен данлау яғынан да бик әһәмиәтле булды.

Зәки Вәлиди менән Шәйехзада Бабич араһындағы бәйләнеш тураһында мин айырым мәҡәлә яҙғайным инде. Бында тағы ла бер момент хаҡында өҫтәп әйтергә кәрәк. Шағирҙың башҡорт милли-азатлыҡ эшенә ҡатнашып китеүен кемдеңдер политик йоғонтоһо менән аңлатырға, әҫәрҙәрен туранан-тура күрһәтмә буйынса яҙылған тип иҫбатларға тырышыусылар булды һәм әле лә бар. Бындай уйҙырмалар — шағирҙы махсус рәүештә рухи тамырҙарынан йолҡоп алырға, тыуған ерлегенән аҡтарырға, туған милләтенән көсләп ситләштерергә тырышыу ул.

Туған халҡының азатлыҡ хәрәкәтенә Бабич барлыҡ ышаныстары һәм өмөттәре, күңелендә сабый саҡтан йыйылып килгән ғорурланыу һәм һыҙланыу ҡушылды.

Фронттың бер яғынан икенсе яғына сығып ҡына башҡорт ғәскәре тыныс тормош таба алманы. Бер йәһәннәмдән ҡотолдом тигәндә башҡортҡа яңы тамуҡтың уты үрләне, ҡыҙыл суҡмар киҙәнә башланы. Бабич бына ошо тамуҡ эсендә һәләк булды. Башҡорт ҡанын көҫәгән йыртҡыс ҡыҙыл командирҙар тарафынан йөҙәрләгән башҡорт ирҙәре менән бергә Йылайырҙың таш майҙанында егерме дүрт йәшлек бөйөк шағирыбыҙ вәхшиҙәрсә язалап үлтерелде.

«Гонаһым — туҙан, тау кеүек язам» — был һүҙҙәрҙе шағирҙың үҙе генә түгел, шул осорҙа бер гонаһһыҙға һәләк ителгән күпме меңдәрсә милләттәштәребеҙ ҡабатлай алыр ине.

Тереләр үлгәндәрҙең күҙен яба, үлгәндәр тереләрҙең күҙен асып китә. Башҡорт халҡы үҙенең һәләк булған һөйөклө шағирының күҙҙәрен ябып, уны тәрбиәләп ҡуя алманы. Уны залимдар ҡылыс менән тураҡлап яҙаланы.

Башҡорт халҡының быуат башында, революция һәм граждандар һуғышы йылдарындағы эҙләнеүҙәре Бабич ижадында үҙенсәлекле сағылыш тапты. Ул туған халҡының уянып яуға күтәрелеүен һәм шул ҡуҙғалыш ваҡытындағы фажиғәләрен һәм тантаналарын дөйөмләштерҙе.

Халҡыбыҙҙың художество үҫешендә оло бер этапты йомғаҡлаған Бабичтың шиғриәтебеҙҙе байытыуҙа, әҙәби телде үҫтереүҙә хеҙмәте айырыуса ҙур.

Тереләр үлгәндәрҙең күҙен яба, үлгәндәр тереләрҙең күҙен асып китә. Был боронғо хәҡиҡәтте һәр мәрхүмгә ҡарата әйтеп булмай.

Бабич иһә үҙенең янып йәшәүе менән генә түгел, азатлыҡ яулау юлында һәләк булыуы менән дә күптәрҙең күҙен асып китте, көрәштең еңел булмаясағын, мәкерҙең, яуызлыҡтың, хыянаттың аҙым һайын аңдып торасағы тураһында иҫкәртеп китте, беҙҙең барыбыҙҙы ла уяулыҡҡа, берҙәмлеккә саҡырып китте.

Ошондай ауыр юғалтыуҙарҙан, ҡаты һабаҡтарҙан һуң күҙҙәре ныҡыраҡ асылған, күп нәмәне яңыса күрергә өйрәнгән милләтебеҙҙең күҙен тағы ла ябырға, уны һуҡырайтырға, телһеҙ, моңһоҙ ҡалдырырға тырыштылар.

Бабич ғүмере буйы туған халҡы менән ныҡыраҡ ҡушыла барҙы, уның ҡыуанысына һәм йыуанысына, шатлығына һәм һыҙланыуына әйләнде. Уның яҙмышында милләттең ғорур һәм аяныслы яҙмышы сағылды. Уның янып йәшәүҙәре лә, кисергән фажиғәләре лә осраҡлы түгел. Улар халҡыбыҙ кисергәндәрҙең бер нөктәгә килеп тупланыуы, ут йомғағына әйләнеүе ул.

Йәне фәрештәләр янына осоп киткәндән һуң да Бабичҡа тынғы булманы. Ил күңеленең иң түрендә һис бер ел-дауыл тейҙермәй, бөртөк саң ҡундырмай ҡәҙерләп һаҡланырға тейешле изге исеменә күпме тапҡырҙар ҡара яғылды, яҡты рухы күпме рәнйетелде. Йылайыр ерендә һәләк булған Шәйехзада артабан да нахаҡ яҙаларға дусар ителде. Шағирҙы бер генә түгел, күп тапҡырҙар атырға, бер генә түгел, күп тапҡырҙар аҫырға, бер генә түгел, күп тапҡырҙар ҡылыстан үткәрергә, үҙен генә түгел, ижадын, халыҡ күңелендәге рухын юҡ итергә тырыштылар.

Бәхет билдәһе булған йөҙлөк менән тыуған Шәйехзада Бабичтың яҙмышы фажиғәле булды, ләкин бәхетһеҙ булманы. Яҙмышы тарихи юлдарҙың ни сана, ни арба сағына тура килде, әммә шағир ташҡында боҙҙан боҙға һикереп булһа ла алға барыуынан туҡталманы. Темеҫкенеп, быҫҡып, ярты-йорто тойғолар менән көн күрмәне, йөҙ йылдарға бер килә торған яҙмыш менән балҡып йәшәп китте.

Әйтерһең дә, халҡыбыҙҙың яҡты өмөттәрен, зиһененең, рухының тынғыһыҙ эҙләнеүҙәрен, дәртен һәм илһамын, талантын һәм йомартлығын, азатлыҡ һөйөүсән ғорур холоҡ-тәбиғәтен үҙенең аҫыл шиғриәтендә мәңгеләштереп ҡалдырыр өсөн килгән был яҡты донъяларға һөйөклө шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич!

Әйтерһең дә, халҡыбыҙҙың тарихи юлдарҙағы ҡаҙаныштарын һәм ҡыйралыштарын, юғалтыуҙарын һәм тантаналарын, ниндәй мәкерле ҡамауҙар, көнсөл ҡоршауҙар эсендә милләтебеҙҙең өҙгөләнеүҙәрен, бөгөн дә уңдан да, һулдан да ниндәй ғәҙелһеҙлектәргә, күпме ҡаршылыҡтарға килеп бәрелеүен үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, үҙ йәнен фиҙа ҡылып киләсәк быуындарға аңлатып бирер өсөн килгән был яҡты донъяларға бөйөк шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич!

Ғорур Бабич, ҡаһарман Бабич, ҡанатлы Бабич!

Ғорур халҡыбыҙ, ҡаһарман халҡыбыҙ, ҡанатлы халҡыбыҙ!

*Әнүәр Әсфәндиәров,*
Башҡорт дәүләт университеты
профессоры

## ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧТЫҢ НӘҪЕЛ-НӘСӘБЕ

Мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 1995 йылдың 2 ғинуарында 100 йыл тула. Ошо уңай менән гәзит-журналдарҙа уның ижады һәм көрәше хаҡында мәҡәләләр, иҫтәлектәр күренә башланы. Был, әлбиттә, ҡыуаныс хәл. Ләкин был яҙмаларҙа Бабичты берәүҙәр татар-башҡорт, икенселәре башҡорт, өсөнсөләре («Ҡыҙыл таң» гәзите) татар шағиры тип атай. Яр Саллы ҡалаһында сыҡҡан «Арғамаҡ» журналында берәү бик күп ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы «һатлыҡ йәндәр», «милләтселәр» тип, эт урынына һүгә килеп. ахмаҡлана барып, былай ти: «Так называемая башкирская литература вовсе не башкирская, а татаро-башкирская. Самым беспардонным образом немало татарских писателей и поэтов были превращены в башкир. В башкир превратились Ш. Бабич, Г. Чокрый». (Ғәли Соҡоройҙың һәм уның улы Ғарифулланың үҙ милли сығышы тураһында «Беҙ урман башҡорто» йә «Беҙҙең башҡорт тоҡомо» тип яҙғандарын был әҙәм беләме икән?).

Ә хәҙер ошо раҫлауҙарҙың ҡайһыһы дөрөҫлөккә яҡын икәнен Бабичтарҙың шәжәрәһенән, шағирҙың үҙен ниндәй милләттән һанағанлығынан, уның яҡындарының был мәсьәләгә ҡарашынан, Шәйехзада ижадында үҙ халҡына ҡарата мөнәсәбәтенән сығып хәл итеп ҡарайыҡ.

## 1. БАБИЧЕВТАРҘЫҢ ТЫУҒАН ТӨЙӘГЕ

Һүҙҙе Бабичтың тыуған төйәгенән башлап, уның Йәлдәк волосына ҡараған Әсән ауылында тыуыуын беләбеҙ. Был башҡорт ауылы Өфө провинциаль канцелярияһының 1735 йылдың 24 май указы нигеҙендә типтәрҙәр төйәгенә әүерелгән. 1834 йылда бында 476 типтәр йәшәгән (уларҙың этник сығышы билдәһеҙ, ә шулай ҙа уларҙың күпселеге татар крәҫтиәндәренән булыуын фараз итергә мөмкин). Башҡорттар мишәрҙәрҙе лә үҙ ауылына ҡабул иткән. Шулай итеп, 1920 йылға халыҡтың күпселеге типтәрҙәр яғында булып, улар 1590 кешене тәшкил иткән. Ошо типтәр-мишәр-башҡорт ауылына Шәйехзаданың атаһы Мөхәмәтзакир мулла итеп саҡырылған. Әсәндә төҙөлөп ятҡан 2-се мәсеттең эшен Өфө губернаторы туҡтатҡан. Ләкин ауыл халҡының юллауы буйынса Сенат 1887 йылдың 29 ғинуарында губернаторҙың ҡарарын юҡҡа сығарған. Бер йылдан һуң ул төҙөлөп тә бөткән. 41 йәшлек Мөхәмәтзакир Бабичев икенсе мәхәлләнең мәсетенә 1888 йылда имам-хәҙрәт итеп билдәләнгән.

Ошонан сығып, Әсән ауылы Бабичевтарҙың тыуған төйәге булмағанын беләбеҙ. Улар Ҡаңлы ырыуынан сыҡҡан аҫаба башҡорттар булып, Дыуанай волосында урынлашҡан Тартыш ауылында көн иткәндәр.

Яңыраҡ табылған документтар раҫлауынса, Тартыш ауылы Ҡаңлы волосы башҡорттарының аҫаба ер биләмәһенең дыуанайҙарға ҡаҙна тарафынан киҫеп бирелгән бер өлөшөндә урынлашҡан булған. Ауыл административ яҡтан Ҡаңлы волосына түгел, ә Дыуанай волосына ҡараған. Ошонда башҡорттар, мишәрҙәр, дәүләт крәҫтиәндәре йәшәгән.

1832 йылда ер тураһында батша законы сыҡҡан. Бының нигеҙендә аҫаба башҡорттарҙың һәр бер ир-затына 40 дисәтинә ер бирелеү ҡаралһа, мишәрҙәргә хәрби ҡатламда тороу сәбәпле йән башына 30, ә типтәрҙәргә һәм татарҙарға — 15 дисәтинә ер бүлеү күҙҙә тотолған.

Тартыш ауылының төрлө милләт халҡына уның тирәһендәге ер шул иҫәп буйынса бүлеү өсөн күпкә етмәгән. Шуның өсөн Бабичевтар, аҫаба булараҡ, үҙ ерҙәренең икенсе өлөшөнә күсеп, яңы ауыл нигеҙләү өсөн ғаризнамә яҙғандар.

Ҡаңлы волосы Ҡөйөк (русса — Куюк) түбәһе тураһында рәсми мәғлүмәттәр һаҡланған. Уның ер биләмәһе

Бөрө өйәҙендә урынлашҡан, ә ер хужалары — аҫаба башҡорттар — Бөрө (10-сы башҡорт кантонының Тартыш ауылы), Өфө (8-се башҡорт кантонына ингән Мәүлит, Байталлы ауылдары) һәм Бәләбәй (12-се башҡорт кантонының Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә, Рапат ауылдары) өйәҙҙәрендә йәшәгән. Ошо өс өйәҙҙә көн күргән аҫаба башҡорттар 1816 йылда ни бары 68, 1834 йылда 80 ир-затын тәшкил иткән. Ҡанлы волосы Ҡөйөк түбәһе аҫабалары үҙ еренә XVIII быуаттың башында уҡ мари крәҫтиәндәрен ҡабул иткән. 1816 йылда был түбәлә 463 мари иҫәпләнгән. Мариҙар типтәр ҡатламына күсеп, хәҙерге Мишкә районына ҡараған Мишкә, Сабыҡ, Үрге һәм Түбәнге Һайыҫҡан, Шигәмән, Ирсай, Митрәй, Васькино ауылдарында йәшәгән һәм хәҙер ҙә шунда донъя көтәләр.

Ҡөйөк түбәһенең 1798 йылдағы генераль межалау буйынса 23686 дисәтинә ер биләмәһе булған. Был ер күләме мари типтәрҙәренә һәм аҫаба башҡорттарға 1832 йылғы закон буйынса бүлеп биреү өсөн артығы менән еткән.

Ләкин мариҙар зауряд-сотник Ғәйнулла Мөхтәр улы, урядник Ғирфан Идекәй улы һәм ябай («рядовой») башҡорт Тәғип (Тайүп) Ишкилде улы Бабичевтарҙың 1849 йылда яҙылган үҙ аҫаба ер биләмәһенә ҡайтарыуҙы һораған ғаризаһын белеп, улар уйына ҡаршы төшкәндәр. Был ғаризнәмә Бабичевтарҙың 24 ир-заты исеменән яҙылған: Бына унан бер өҙөк: «Мы прежде в 1834 году входили прошением к его высокопревосходительству (губернатору) о дозволении нам в числе 24 душ переселиться на жалованную предкам нашим землю, состоящую в Бирском же уезде Кальнинской (т. е. Канлинской) волости Куюковой тюбы, число коей обозначаются по генеральному межеванию 23686 десятин, на кое имеют жительство из черемис тептяри деревень до семи... Покорнейше просим из-за малочисленности земли при деревне Тартышевой дозволить переселиться на упомянутую жалованную предкам нашим землю и приказать наделить из одной положенную пропорциею земли...»

Мари крәҫтиәндәре Бабичевтарҙың аҫаба еренә әйләнеп ҡайтыуына ҡаршы сыҡҡас, хәрби губернатор ҡушыуы буйынса аҫаба башҡорттар һәм мари типтәрҙәре тураһында төрлө мәғлүмәттәр йыйылған. Бына уларҙың һөҙөмтәһе: «По собранным сведениям оказалось,

что дача Куюковой тюбы по межевым документам принадлежит башкирам Тартышевой, тептяри же проживают тут на праве припущенников».

Башҡорт-мишәр ғәскәре башлығы Ырымбур хәрби губернаторы В. А. Перовский менән кәңәшләшеп, Бабичевтарҙың Ҡаңлы волосы Көйөк түбәһенең Ҡыйғаҙы йылғаһының тамағында ауыл булып ултырыуына ризалыҡ белдергән. Был ауыл Ҡыйғаҙытамаҡ тип атала. Ошо урынға Бабичевтар 1852 йылдан башлап күсенә башлаған һәм дүрт йылдан һуң ауылдың йәшәп ятыуын властар рәсми рәүештә танығаи. 24 ир-затының һәр береһенә 40-ар дисәтинә ер бүленгән. Шунан һуң да һәм мари крәҫтиәндәрен ер менән тәьмин иткәс тә аҫабалар ер биләмәһе артып ҡалған. Шуға күрә Бабичевтар ҡаңлы ырыуынан үҙ ҡәрҙәштәрен ауылдарына саҡырғандар.

1865 йылда Байталлы, Мәүлит (Кушнаренко районы) Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә (Ғабдрафиҡ Тайсинлов, Кейекбай Әбделмоталипов һәм башҡалар), Рапат (Саҡмағош районы) ауылдарынан Дыуанай һәм Шәмшәде волостарында килмешәк хәлендә йәшәүсе ҡаңлы башҡорттары (27 ир-ат) Ҡыйғаҙытамаҡҡа килеп урынлашҡан.

Шулай итеп, яңы материалдар нигеҙендә элек яҙған раҫлауҙарыма төҙәтмә индереп, Бабичтар Ҡыйғаҙытамаҡҡа хәрби властар тарафынан күсерелмәгәнлеген, ә шуларҙың рөхсәтенән сығып үҙ аҫаба ер биләмәһендә ауылға нигеҙ һалыуҙарын ныҡлап әйтеп була. Ҡыйғаҙытамаҡ, Тартыш кеүек, Бабичевтарҙың аҫабалыҡ төйәгенә әйләнә.

## 2. БАБИЧТЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕ

Шәйехзада Бабичтың шәжәрәһе киң ҡатлам уҡыусыларына билдәһеҙ. Шуға күрә хәҙер һүҙ шул турала барасаҡ. Шәжәрә һәр береһенең улдары менән бөтәһе биш быуынды берләштерә — Шәйехзада, уның атаһы Мөхәмәтзакир, ҡартатаһы Ғилуан, уның атаһы Ишбулды, уның атаһы Мөхтәр Бабичев. Шәжәрәнең мәғлүмәттәрен ревизия-перепись материалдары менән сағыштырыу унда күрһәтелгән шәхестәрҙең һәр береһенең тип әйтерлек ҡасан йәшәүен күрһәтеп кенә ҡалмайынса, уға өҫтәлмәләр һәм төҙәтмәләр индереүен күрәбеҙ.

Мөхтәр Бабичев тураһында шәжәрәлә йәнәһе «Ҡазан яғынан килгән, фабрик тотҡан» тип, яҙылған. Күренеүенсә, был легенда бик һуң яҙылған. «Фабрика» үткән быуаттың икенсе яртыһында — XX быуаттың башында ғына тыуған һәм ҡулланыла башлаған. XVIII быуат уны әлегә белмәгән. Шуға күрә легенданың был өлөшө дөрөҫлөктә сағылдырылмай. Мөхтәрҙең Ҡазан яғынан килеүе тураһында һүҙ бара икән, Ҡазан юлы (Башҡортостан 4 юлға — даруғаға бүленгән), Бәләбәй өйәҙендәге ҡаңлыларға ҡараған Ҡалмашбаш, Иҫке Биккинә, Рапат ауылдарының йә Өфө өйәҙе Байталлы, Мәүлет ауылдарынан Тартышҡа күсеүен аңларға мөмкин. Аҫабаның бер урындан икенсеһенә күсеп ултырыуы тик үҙ волосының эсендә генә мөмкин булған. Икенсе волосҡа күскән кеше сит ерҙә аҫаба хоҡуғынан мәхрүм ителгән һәм ул килмешәк-припущенниккә әйләнгән. Ә Мөхтәр Бабичев — аҫаба. Ғәҙәттә тарих фәне тирәһендә уралған һәм Башҡортостан тарихын, уның үҙенсәлектәрен белмәүселәр башҡорт булмаған припущенникты бик тиҙ һәм анһат ҡына аҫаба яһап ҡуялар. Был, ҡағыҙҙа булараҡ, тормошта мөмкин булмаған хәл. Ергә аҫаба хоҡуғын төрлө сәбәптәр арҡаһында юғалтҡан башҡорт ҡына ҡайһы бер осраҡтарҙа киренән шул хоҡуҡты ҡайтара алған. Башҡаларга былдай юл ябыҡ булған.

1816, 1834 йылдарҙағы ревизия ҡағыҙҙары Мөхтәр Бабичевтың оҙон ғүмерле булыуын һәм 1742—1822 йылдарҙа йәшәүен күрһәткән. Өс йәшкә кесе Гөлгенә исемле ҡатынынан Мөхтәрҙең биш улы билдәле. Улар Илекәй (шәжәрәлә яңылыш Илкәй), Ишбулды, Ишалы (шәжәрәлә — Ишалды), Ишкилде, Ғәйнулла.

Илекәй Мөхтәров тураһында легендала 1812 йылғы Ватан һуғышында полковник дәрәжәһендә ҡатнашыуы, уның Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында йәшәүе һәм шул тирәләге ерҙе батшанан бүләккә алыуы тураһында әйтелә. Илекәй 1772—1820 йылдарҙа йәшәгән. 1816 йылда уның полковник түгел, ә поход старшинаһы тигән казачий чины булған. Тимәк, йәшенә һәм чинына ҡарағанда Илекәй һуғышта ҡатнашыуы ихтимал. Ләкин шунын өсөн батшанан ер алыуы һәм шул ауылда йәшәүе — уйҙырма, һуғышта ҡатнашҡан 28 башҡорт полктарындағы 840 эре һәм ваҡ чиновник-офицерҙың береһе лә ер алмаған. Ул ваҡытта ундай ер таратыуҙар башҡорттар ара-

һында булмаған хәл. Етмәһә, Илекәй ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем тик Тартыш ауылында ғына йәшәгән.

Илекәйҙең 1781 йылғы Сәйбә һәм 1796 йылғы Әсҡәпямал ҡатындарынан шәжәрәлә күрһәтелмәгән 6 улы ҡалған. 1802 йылғы өлкән улы Ғайнан зауряд-хорунжа булып хеҙмәт иткән. Хәрби хеҙмәттән башҡа икенсе һалымдарҙан ул азат ителгән. Улдары Ғилман, Аллаяр. Илекәйҙең икенсе улы 1804 йылғы урядник Ғирфан үҙенең Әйүп, Ярулла, Муллаяр улдары менән донъя көткән. Өсөнсө улы 1806 йылғы мулла Раян (уның улдары — Сәйетгәрәй, Дәүләтгәрәй). 1810 йылғы улы Мәрүән (улы Мәргән). Мәрүән сәсәккә ҡаршы прививка яһаусы. Һайраҡ исемле улы Мәрүән менән йәштәш. Иң кесеһе Сәрүән 1923—1843 йылдарҙа йәшәгән. Был ағалы-ҡустылылар бер ҙур ғаилә булып донъя көткәндәр.

Мөхтәрҙең өсөнсө улы Ишалы. Ул 1780 йылғы. Шәжәрәләге кеүек старшина түгел, ә зауряд-ясауыл булып хеҙмәт иткән. 1847 йылдан алып башҡа һалымдарҙы түләүҙән азат ителгән. Уның шәжәрәгә билдәһеҙ Биктимер, Мирхәйҙәр, Мирсаяф һәм Мәһәҙи исемле улдары билдәле.

Указлы мулла һәм мөғәллим Ишкилде (1782—1845) Мөхтәрҙең 4-се улы. Шәжәрәлә уның тоҡомо күрһәтелмәгән. Ревизия ҡағыҙҙары уның Тайуп (Тәғип), Таһир, Мирғаязитдин, Ниғмәтйән улдарын күрһәткән.

Зауряд-сотник Ғәйнулла — Мөхтәрҙең бишенсе улы. 1789 йылғы. Ул да хәрби хеҙмәттән тыш башҡа төрлө һалымдарҙан азат ителгән. 1812—1814 йылдарҙа 10-сы башҡорт һыбайлылар полкы менән Наполеонға ҡаршы һуғышҡан. Шәжәрәлә күрһәтелмәгән Сәйфулла, Төдәкҡабул, Дәүләткилде, Насибулла исемле улдары ревизия ҡағыҙҙары теркәгән.

Мөхтәрҙең икенсе улы Ишбулды 1778—1841 йылдарҙа ғүмер иткән. Шәжәрәлә әйтелһә лә Ишбулды мулла вазифаһын үтәмәгән. Ул — поход ясауылы. Үҙ кантонынан командаларҙы хеҙмәт урынына алып барыу һәм уны алып ҡайтыу — уның бурысы. Ишбулды уландарға бай кеше. Был турала 1850 йылда үҙғарылған 9-сы ревизия мәғлүмәттәре һөйләй. Иң оло улы Ризуан. 1809 йылғы. Икенсеһе — ике йәшкә кесе Ғилуан. Ул ике ҡатынлы. 1820 йылғы Мирвафа Ҡаһарманова һәм 1826 йылғы Мәғрифә Шәһиәхмәтованан 4 йәшлек Ғәҙиә, 3 йәштәге Мөхәмәтзакариә (ревизия ҡағыҙҙары Мөхәмәтзакирҙы шулай яҙғандар), 2 йәшлек Мәрилә, 6 айлыҡ Нурисафа.

Ғилуан Шәйехзада Бабичтың олатаһы, ә Мөхәмәтзакир уның атаһы. Шәжәрә Ғилуандың Ҡыйғаҙытамаҡта, ә Мөхәмәтзакир Юғары Шаҙы ауылында тыуыуҙары тураһында яңылыш күрһәткән. Үткән быуаттың тәүге яртыһында Мөхтәр Бабичтың үҙе, уның улдары, ейәндәре, бүләләре Тартыш ауылында тыуғандар, йәшәгәндәр һәм ҡайһылары шунда донъя ҡуйған.

1850 йылғы ревизия буйынса, Тартышта бөтәһе 13 йортта 77 ир-ат йәшәгән. Бабичевтар 3 йортта донъя көткән. Улар 38 ир-затын тәшкил иткән. Тимәк, ауыл халҡының яртыһы Бабичевтарҙан торған. Илекәй Мөхтәр улының 6 улы ағалы-ҡустылы ғаилә булып, Ишалы Мөхтәр улы үҙенең уландары һәм өйләнгән ҡустылары Ишкилде, Ғәйнулла менән ағалы-ҡустылы ғаилә ҡороп бергә йәшәгәндәр.

Күренеүенсә, Мөхтәр Бабичевтың ирҙәр тоҡомо XIX быуаттың тәүге яртыһында Бөрө өйәҙендә урынлашҡан 10-сы башҡорт кантонында төрлө чиндарҙа (поход ясауылы һәм старшинаһы, зауряд-сотник һәм зауряд-ясауылы дәрәжәһендә) хәрби хеҙмәт үтәгән. Шуларҙан Ишкилде Мөхтәров һәм Ғилуан Ишбулдин указлы мулла вазифаһын башҡарған.

Шулай итеп, аҫаба башҡорттар Бабичевтарҙың шәжәрәһен ревизия мәғлүмәттәре иҫбатлай, тулыландыра һәм төҙәтмәләр индерә.

Ә хәҙер шағирҙың фамилияһының яҙылышы хаҡында бер-ике һүҙ.

Шәйехзаданың фамилияһы тураһында Яр Саллыла сыҡҡан, үрҙә иҫкә алған журналда шул уҡ автор «...так у них (башкирских националистов) почему-то Ш. Бабич не стал Ш. Бабис», хотя в башкирском языке нет буквы «ч» тип яҙһа ла, уның иронияһы урынһыҙ. Сөнки XIX быуат башында Бабичевтар ысынлап та Бабисовтар булып билдәле. Мәҫәлән, Мөхтәрҙе бер документта Стәрлетамак өйәҙе Яуыш ауылы татар кенәзе Өмәр Йосоп улы Дашков өс тапҡыр «Бабисов» тип яҙған («живущий в деревне Тартышевой из числа отписной Кальнинской (Канлинской) земли лесными угодьями... пользуется башкирец Мухтар Бабисов с товарищами; бирский купец, заимствуясь у Бабисова, пользуется бортными ухожиями. 1813 г.»).

Шулай итеп, был исем-фамилия тәүҙә Бәбес-Бабис-Бабисов булыуы асыҡ күренеп тора.

Ошо урында шағирҙың әсәһе тураһында әйтеп үтеү

урынлы булыр. Бабичевтарҙың һәм башҡаларҙың иҫтәлегендә уның әсәһен Сажиҙә (Фәтхелҡадир Бабичев), Баби Сажиҙә (Фәсәхәт Бабичева), йә Бабисажизәбаныу (Ғәлимйән Ибраһимов) тип атап, уның атаһын йә Хөсәйен, йә Мөхәмәтһаҙый, тиҙәр.

1896 һәм 1897 йылдарҙағы ике метрика буйынса Бабичевтарҙың Рәхилә һәм Ғәбделәхәт исемле балалары тыуыу уңайы менән уларҙың атаһы һәм әсәһе лә исемләгән. Һәм шунда түбәндәге яҙыу бар: «Атасы имамхатип Мөхәмәтзәкир ибне мулла Ғилүен Бабичев, анасы — Сажидәбанат, мулла Мөхәмәтхадый ибне мулла Шиһабетдин». Сажидәбанаттың атаһы хәзрәт Мөхәмәтһаҙый Шиһабетдиновтың 1897 йылдың 8 июлендә вафаты ла теркәлгән.

Сажидәбанаттың типтәр ғаиләһенән сығыуын билдәләп, Бабичты татар шағиры тип әйтеүселәр ҙә бар. Был урында ныҡлап шуны әйтергә кәрәк. Бөйөк татар шағиры Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе Мәмдүҙәнең Ғәйнә ырыуы Барҙы (Ҡажмаҡты) ауылы (Пермь өлкәһе) аҫаба башҡорто Зинәтулла Зәйнүлбәшәр улы Әмировтың ҡыҙы икәнен «Ҡазан утлары», «Ағиҙел» журналдары документтарға нигеҙләнеп яҙғандарын күп уҡыусылар беләләр! Ләкин ошонан сығып, бер кемдең дә уны башҡорт шағиры тип әйтергә баҙнат итмәҫ, теле бармаҫ.

## 3. ҮҘЕНЕҢ МИЛЛИ СЫҒЫШЫН ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ НИСЕК БИЛДӘЛӘГӘН?

Яңы ғына Өфөлә баҫылып сыҡҡан «Шәйехзада Бабич хаҡында иҫтәлектәр»ҙән күренеүенсә, татар яҙыусыһы Зариф Бәшәр 1916 йылдың йәйендә «Тормош» гәзите редакцияһында шағирҙы осратҡан. Шуға бәйле үҙенең иҫтәлегендә беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәттәр бирә. Бына улар: «Гәзит редакцияһында Бабич шиғырын тыңларға булдылар. Ул үҙенең «Ҡөтәм» тигән шиғырын алып килгән икән. Бабичтың шиғырын уҡыр алдынан әйткән ошо һүҙҙәре бөгөнгөләй хәтеремдә ҡалған:

— Алдан уҡ әйтеп ҡуяйым: шиғырымдың ике сәйер яғы бар. Берҙән, ул шаҡтай ҡыйыу мәсләкле (йәғни — идеялы), икенсенән — шиғыр башҡорт телендә яҙылған. Сөнки башҡорттың бөгөнгө гүрстандай ауыр тормошо хаҡында уның өмөт иткән яҡты истиҡбалы (йәғни—киләсәге) хаҡында милләте башҡорт булған шағир үҙ ши-

ғырын башҡортса яҙмай булдыра алманы. Һәм мин уның газетала башҡортса баҫылыуын теләр инем.

Шунан Бабич шиғырын уҡыны. Беҙгә ул бик ныҡ тәьҫир итте. Бер аҙ ваҡыт бер кем дә бер ни әйтә алмай торҙо. Шағирҙың ысын күңеленән сыҡҡан, әйтерһең, уның йөрәк ҡаны менән яҙылған шиғыр ине ул.

Бынан һуң ҡырҡ бер йыл үтте инде, ә мин ул шиғырҙы һаман әле яттан беләм.

Бабичтың был «Көтәм» тигән шиғыры миңә лә, башҡаларға ла бик оҡшаны. Шулай ҙа уны «Тормош»тоң редакторы Закир Ҡадири хупламаны.

— Мин был шиғырҙы, — тине ул, — Бабич үҙе әйткән сәйер яҡтарын алып ташлағанда ғына баҫып сығара алам, ә был көйө юҡ. Бындай хөкөмдө ишеткәс, Бабич шиғырын ҡуйын кеҫәһенә тыҡты ла урынынан торҙо һәм Закир Ҡадириға:

— Беҙҙең халыҡҡа ирекле көндәр килмәйенсә, был шиғыр донъя күрә алмаҫ, ахрыһы. Ә мин ул көндө көтәм! — тине лә редактор бүлмәһен ташлап сығып китте.

Бабич бына шунан һуң бер ваҡытта ла «Тормош» редакцияһына аяҡ баҫманы.

Бабичтың яҡын таныштарынан Ғариф Ҡитабов үҙенең иҫтәлектәрендә шағирҙың милләте тураһында уның үҙ һүҙҙәрен килтерә:

«Бабич, Ырымбурға килеп күп тә тормаҫтан, «Башҡортостан хөкүмәте»нә яҡынлашты. Ул үҙенең сығыштарында: «Беҙ, башҡорттар, Рәсәйҙең артта ҡалған, хоҡуҡһыҙ халҡы. Беҙҙең ерҙәребеҙҙе көпә-көндөҙ талап алдылар. Башҡорт халҡын ирекле тормошҡа сығарыу өсөн «Башҡортостан хөкүмәте» төҙөлдө», — тип, һөйләй ине.

Бабич, «Башҡортостан хөкүмәте» менән бергә йөрөп, Дутов һәм Ҡолчак тарафынан туған халҡына эшләгән төрлө йәбер-золомдарҙы, хаҡһыҙлыҡтарҙы үҙ күҙе менән күреп, эсенән илап, һыҡранып йөрөнө».

Ырымбурҙа саҡта Бабичтың яҡын дуҫы һаналған Төхвәт Ченәкәй иҫтәлегенән:

«Бабич йырҙы, шиғырҙы бик тиҙ сығара ине. Ул мандолинала уйнап бара, ә шуның артынса үҙе сығарған йыр ағылып бара ине. Был йәһәттән ул башҡорттоң ысын сәсәне, ҡаҙаҡтың аҡыны ине...

Бабич мандолинала ғәҙәттән тыш оҫта уйнаусы кеше ине. Ул бигерәк тә «Ирәндек», «Ҡаҙ ҡанаты», «Байыҡ»,

«Зарифа», «Ете ҡыҙ», «Ҡом бураны» көйҙәрен яратып уйнай торғайны.

«Мин бер ярлы башҡорт муллаһының ярлы балаһы инем,— тип һөйләп алып китте Бабич. — «Ғәлиә»лә уҡыу миңә ауыр булды. Атай миңә күп ярҙам итә алманы. Беренсе йылдарҙа өйҙән ашарға күмәс, бауырһаҡ, май, ҡорот, бешкән ит, ҡайһы ваҡыт бешкән тауыҡ килтереп торҙо».

Бабичтың һүҙҙәрен рәсми ҡағыҙҙар ҙа раҫлай. 1917 йылда 7 балалы (ике улы, шуларҙың береһенә 22 йәш — ул шағир, икенсеһенә 25 йәш һәм 5 ҡыҙ — улар 3, 7, 9, 12, 16 йәштәрҙә) 70 йәшлек Мөхәмәтзәкирҙең 9 кешегә (ҡатынына 58 йәш) бер һауын һыйыры, өс бәрәсле 7 һарыҡ-кәзәһе генә булған һәм 12 сутый ергә бәрәңге, 0,5 дисәтинәгә тары, 1,5 дисәтинәгә һоло, 2 дисәтинәгә арыш сәскәнлеге билдәләнгән.

## 4. БАБИЧТЫҢ ЯҠЫН ТУҒАНДАРЫ ҮҘҘӘРЕНЕҢ МИЛЛӘТЕ ТУРАҺЫНДА

Шәйехзаданың 1890 йылғы ағаһы (әсәләре башҡа) Фәтхелҡадир Бабичтың иҫтәлегенән:

«Беҙҙең ата, Мөхәмәтзәкир Ғилуан улы Бабич, асылда, Башҡортостандың хәҙерге Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылы башҡорто ине. Был ауыл башҡорттарының күбеһе Бабич тигән фамилия менән йөрөйҙәр».

Шәйехзаданың һеңлеһе Фәсәхәт Бабичева Ғилуан олатаһы (Мөхәмәтзәкирҙең атаһы) тураһында: «Юғары Шаҙы ауылында ул үҙе кеүек үк башҡорт ҡыҙына өйләнгән».

Ағаһы тураһында Фәсәхәт Бабичева шиғри юлдар менән бына нәмәләр яҙған:

*Ғинуар айы. Ауыл тын ғына.*
*Күктә аяҙ, баҡса тын ғына.*
*Ҡапыл көслө тауыш! Өй йәмләнә —*
*Бер ир бала килә донъяға.*
*Бала тыуа шәйлә йөҙлөк менән;*
*Һирәк осраҡ. Ғәжәп ғәләмәт.*

*Кендекәйгә шатлыҡ, күлдәк менән*
*Йортҡа юрау дәүләт — ғәзәмәт.*
*Ата-әсәһенә — ғәзиз бәпәй.*
*Һиртмәләнгән бәлләү — бишеге.*

*Тәкбир әйтеп, уға Әхмәт бабай* *
*Шәйехзада ҡуша исемен.*
*Бабай уны, башҡортом, тип һөйә.*
*Намыҫ, бәхет теләй, изгелек.*
*Илгә, йортҡа, ата-әсәһенә*
*Күрһәтһен, ти, яҡты игелек.*

Рабиға (Рафиға) Бабичева — шағирҙың һеңлеһе иҫтәлегенән:

«Үҙем саф башҡорт ҡыҙы. Шәйехзада Бабич минең бик яҡын ағайым».

Әхсән Ҡараретдин улы Бабичев:

«Беҙ затлы башҡорттар нәҫеленән бик күптән татарҙар менән аралашып һәм туғанлашып бөткәнбеҙ».

## 5. БАБИЧТЫҢ МИЛЛӘТЕ ТУРАҺЫНДА ЯҘЫУСЫЛАР ҺӘМ СӘЙӘСМӘНДӘР

Күренекле татар яҙыусыһы яҡташыбыҙ Ғәлимйән Ибраһимов (хәҙерге Ауырғазы районы мишәрҙәр нигеҙләгән Солтанморат ауылынан) 1922 йылда уҡ шағир тураһында түбәндәгеләрҙе яҙған:

«Бабичтың нәҫел шәжәрәһенән күренеүенсә, ул атаһы яғынан башҡортҡа барып тоташа: Шәйехзада — Мөхәмәтзакир—Ғилуан—Ишбулды—Мөхтәр—Бабич. Әсәһе типтәр (Бибисажиҙәбаныу типтәр Мөхәмәтһаҙый ҡыҙы)»

Ғәлимйән Ибраһимов Бабичта дөйөм төркилектән айырылып, милли үҙаңдың нығына барыуын үҙенсә аңлатырға тырышҡан:

«Бабич башта татарса, мазлум татар өсөн яныусы, татарҙың дошмандары менән һуғышыусы ине. Унан һуң татарға арҡаһын борҙо, башҡортҡа ҡул һуҙҙы. Салауат балаларын күккә күтәреп, татарға үпкә менән ҡарай башланы».

Билдәле татар ғалимы Ғабдрахман Сәғди:

«Бабич татар шағиры булыу менән бергә башҡорт шағиры ине. Ул яңы башҡорт әҙәбиәтенең беренсе төҙөүселәренән булды. Ул башҡорт телендә лә байтаҡ шиғырҙар яҙҙы. Ахыр ғүмерендә башҡорт азатлығы юлында ҡорбан булды».

Күренекле башҡорт яҙыусыһы Имай Насыри:

«Бабич башҡорт ғаиләһенән сығып, башҡорттар ара-

---

* Әхмәт Йомағолов Мөхәмәтзакирҙең әсәһе яғынан ағаһы.

һында үҫеп, башҡорт халҡының моң-зарын йырлаған һәм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры ине».

Башҡорт халҡының милли азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы Зәки Вәлиди Туған Шәйехзада Бабичты «милли шағирыбыҙ» тип атаны.

«Ғәлиә» мәҙрәсәһендә Бабич менән бер үк осорҙа уҡыған, аҙаҡтан ҡаҙаҡ журналисы булып танылған Абдрахман Мостафин шағир тураһында былай тигән:

«Был егет — башҡорт халҡының йәш, ләкин даны таралып өлгөргән аҡыны — Шәйехзада Бабич ине».

### 6. БАБИЧ ИЖАДЫНДА УНЫҢ БАШҠОРТЛОҒО НИСЕК САҒЫЛА?

Бабичты үҙ милләтенең яҙмышы күптән борсоған. Ул халҡына «аҡ көн» килеүенә өмөтләнгән. Уның яҡты киләсәге тураһында уйланыуҙары 1914—1916 йылдарҙағы ижадында уҡ асыҡ күренә. Үрҙә иҫкә алынған «Ҡөтәм» (1916 йыл) исемле шиғырында үҙ башҡорт халҡының шул саҡтағы ауыр яҙмышын күҙ алдына баҫтыра һәм шул уҡ ваҡытта милләтенең киләсәгенә оло өмөт бағлай.

*Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын,*
*Йәнем әллә ҡайҙа елкенә:*
*Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын.*
*Йөрәгемә моңдар бөркөлә.*
*Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,*
*Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан.*
*Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,*
*Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.*
*Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа*
*Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,*
*Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,*
*Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.*
*Янып көйөп, бәғерем өҙгәләнеп,*
*Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,*
*«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип,*
*Уралҡайға ҡарап илайым.*
*Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан*
*Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;*
*Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,*
*Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.*

Ике йыл элек яҙылған «Халҡым өсөн» шиғырын үрҙәге юлдар менән сағыштырып ҡарау, ике шиғырҙа ла туған башҡорт халҡы өсөн бер үк уй-тойғолар менән йәшәүен күрәбеҙ. Һуңғыһының дүрт кенә юлын уҡып ҡарайыҡ әле:

*Иламайым мин көндәрем*
*Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн:*
*Илайым тик ярлы, меҫкен,*
*Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.*

1917 йылда яҙылған «Тупраҡ» исемле шиғырында башҡорт аҫабаларының ер мәсьәләһенә етди ҡарау кәрәклеген белдерә, ерҙе ҡулдан ысҡындырмауҙы, ерҙең башҡорттоң байлығы, киләсәге икәненә баҫым яһала.

## ТУПРАҠ

*Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,*
*Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.*
*Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!*
*Күкрәктәге санабыҙ.*
*Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,*
*Беҙ тупраҡҡа ятабыҙ.*
*Тупраҡ ҡәҙерен аңламау*
*Беҙҙең өлкән хатабыҙ.*
*Тупраҡ башҡорт бәхетелер,*
*Бәхетенең тәхетелер.*
*Тупраҡ ҡалһа истиҡбал* — (йәғни — киләсәк)
*Нурлы, раушан, яҡтылыр.*
*Тулыр илгә батырҙар,*
*Аҡ шоңҡарҙай аҡындар:*
*Арыҫландай айҙарҙар*
*Әйләнеп үк ҡайтырҙар.*
*Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,*
*Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.*
*Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,*
*Өҙөлмәктер самабыҙ.*

Ошондай уй-фекерҙәре Бабичты үҙ туған халҡының азатлыҡ хәрәкәтенә алып килгән дә инде.

1918 йылда яугир-шағир үҙенең атаҡлы шиғырҙарын ижад иткән. Бына улар: «Беҙ», «Башҡортостан», «Ҡурайҡайға», «Салауат батыр», «Башҡорт халҡына көйлө хитап» һ. б. Тыңлап ҡарайыҡ әле ҡайһы берҙәрен.

БЕҘ

*Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар,*
*Күп ырыуға баш йорттар.*
*Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,*
*Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.*

*Беҙҙә ҡалын урмандар,*
*Беҙҙә данлы Урал бар;*
*Урал аҫты алтындыр,*
*Өҫтә — шәфәҡ балҡыйҙыр.*

*Һиҙен, башҡорт, бәхетеңде,*
*Төшөн, башҡорт, артыңды,*
*Күрер өсөн тәхетеңде*
*Истиҡбалың (йәғни — киләсәгең) алтынлы.*

Ә бына «Ҡурайға» шиғырынан өҙөктәр:

*Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,*
*Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;*
*Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,*
*Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.*

*Һөйлә, тарихыңдан, яуҙарыңдан,*
*Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;*
*Һөйлә олатайҙар хәлдәренән,*
*Йөрөш, торош, зәңын, йолаһын...*

*Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан*
*Һуғарылды ҡара ҡан менән;*
*Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,*
*Һуғарылһын инде йәм менән!*

Үҙ туған халҡына һәм Ватанына гимн булып яңғырай уның «Башҡортостан» исемле шиғыры.

*Арыҫландар үҙ ерен*
*Залимдарҙан таптатмаҫ,*
*Таптаймын тип атлаһа,*
*Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.*
*Ил өҫтөнә сапҡан яу*
*Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,*
*Бысраҡ табан аҫтында*
*Башҡорт намыҫы ятмаҫ.*

*Башҡортостан — гөлбостан,*
*Сөмбөлөстан, нурбостан,*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт атлы арыҫлан.*

Ватаны — республикаһының именлеген, азатлығын тәьмин итеүҙә көрәштәштәрен уяулыҡҡа саҡырған шағир.

*Алданма, ах күңел башҡортом,*
*Юлатма йыланды ҡуйыныңа,*
*Һарылып мәлғүндәр муйыныңа,*
*Башыңды мөнйөрҙәр аҡыртып.*

Күренеүенсә, Шәйехзада Бабичтың ижадына уның башҡортлоғо халыҡтың милли азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылғанға тиклем үк бик асыҡ күренә, ә шағир яугир юлын һайлағас, үҙ халҡының киләсәге өсөн көрәштә, антына тоғоролоҡ һаҡлап, ҡорбан булды.

*Намыҫ өсөн, тәңрем, йәндән кисәм,*
*Килтер вәғәҙә... Ҡөҙрәт ҡулың бир!*
*Башҡортостан иҫән ҡала тиһәң,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир!*

Шулай итеп, төрлө сығанаҡтар Шәйехзада Бабичтың башҡорт халҡының вәкиле һәм үҙ халҡының яугир — шағиры булыуын раҫлайҙар.

*М. М. Ҡолшәрипов,*
Башҡорт дәүләт университеты доценты

## ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧТЫҢ ИЖАДЫНДА БАШҠОРТ ТАРИХЫНЫҢ САҒЫЛЫШЫ

Шәйехзада Бабич. Был беҙҙең өсөн изге һәм бөйөк исем башҡорт халҡының тарихы, барлыҡ булмышы һәм яҙмышы менән туранан-тура бәйле.

Бөйөк шағирыбыҙҙың ижады һәм тормошо ифрат ҡатмарлы осорға — XX быуат башына тура килде. Ошо быуаттың ни бары егерме йылы эсендә бөтә донъяны тетрәткән хәл һәм ваҡиғалар булып үтте: рус-япон һуғышы, беренсе рус революцияһы, беренсе бөтә донъя һуғышы, февраль буржуаз-демократик революцияһы, Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы. XX быуат башы ғүмер буйы милли һәм колониаль иҙеүгә дусар ителгән рус булмаған халыҡтарҙың уяныуы, улар араһында милли азатлыҡ көрәшенең көсәйеүе менән дә айырылып тора. Был тарихи ваҡиғалар Бабич ижадына ҙур йоғонто яһаны һәм үҙенсәлекле сағылыш тапты.

Туған халҡының яҙмышы өсөн тәрән борсолған шағир һүҙ менән генә түгел, ә теүәл эш менән башҡорт милли-азатлыҡ көрәшенә ҡушылып китте, дөрөҫөн әйткәндә уны ойоштороусыларҙың береһе булды. Шундай ауыр һәм ҡатмарлы йылдарҙа еренә, халҡына изге мөхәббәт һаҡлаусы, уның яҡты киләсәгенә өмөт бағлаусы, иленә азатлыҡ яулау юлында ҡорбан булып ҡалған ялҡынлы шағир ижады башҡорт шиғриәтенең иң юғары ҡаҙаныштарының береһе булып балҡыны, ел-дауылдар аша үтеп туған халҡына килеп етте.

Бөйөк Бабичтың һүҙе менән эше, эше менән яҙмышы, яҙмышы менән башҡорт халҡының тарихы бер бөтөн булып ялғанды. Бындай берлек XVIII быуатта Салауат

Юлаев өсөн хас ине. Ә инде донъя әҙәбиәтенә килгәндә, Бабич һымаҡ талантлы шағир һәм бер үк ваҡытта яугир, халыҡ бәхете өсөн ҡорал тотоп көрәшеүсе әҙиптәр донъя тарихында һирәк осрай торған күренеш.

Салауат, Бабичтарҙың шағир һәм яугир булыуҙары бер ҙә осраҡлы хәл булманы. Ни өсөн тигәндә башҡорт халҡы быуаттар дауамында азатлыҡ һәм үҙаллылыҡ, ер һәм ирек өсөн тиңдәшһеҙ көрәш алып барыуы тәбиғи рәүештә яугир шағирҙарҙы, яҡтыға әйҙәгән сәсәндәрҙе тыуҙырҙы.

Шәйехзада Бабич XX быуат башындағы башҡорт тарихының, халыҡ тормошоноң, хыялдарының асыҡ көҙгөһө булды тип әйтергә мөмкин. Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың был турала: «Башҡорт халҡының быуат башында, революция һәм граждандар һуғышы йылдарында әҙләнеүҙәре Бабич ижадында үҙенсәлекле сағылыш тапты», — тип яҙыуы бик дөрөҫ.

Ш. Бабич ижадының юғары нөктәһе Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы, Башҡорт автономияһы өсөн көрәш йылдарына тура килде. Ошо дауыллы йылдарҙа Ш. Бабич үҙ ижадында башҡорт халҡы өсөн ифрат сетерекле һәм халыҡ тормошо тыуҙырған көнүҙәк мәсьәләләрҙе юғары кимәлгә күтәреп сағылдырҙы. Улар араһында ер, йәғни Бабич яҙғанса тупраҡ, ерле йәғни тупраҡлы автономия, милли үҙаң, башҡорт халҡы һәм автономия дошмандарына ҡаршы көрәш һ. б. күрһәтергә мөмкин.

Бигерәк тә был тарихи боролош йылдарында ер мәсьәләһенең Ш. Бабич ижадында туған тупраҡ төшөнсәһендә кәүҙәләнеүе үҙ эсенә тәрән, күп ҡырлы мәғәнә тупланы. Ғөмүмән XX быуат башында ер мәсьәләһе бөтә Рәсәйҙә лә иң ҡырҡыу мәсьәләләрҙең береһенә әйләнгәйне. Башҡорт халҡы өсөн был проблема бер нисә быуат буйына ҡырҡыулаша торғас, XX быуат башында булыу-булмау, йәшәү-йәшәмәү мәсьәләһенә әйләнде. Был ҙур хәҡиҡәт, сөнки башҡорт халҡының тарихы бик борондан уҡ гүзәл Урал менән, унда ныҡлап тамыр ебәреүҙән, уны һаҡлау өсөн көрәшеүҙән ғибәрәт булды. Башҡорттоң аҫыл еренә кем генә ҡаныҡманы! Шуға күрә 1917 йылда дәррәү күтәрелгән башҡорт милли-азатлыҡ көрәшендә лә ер мәсьәләһе үҙәк урын алып торҙо. Юҡҡа ғына 1917 йылғы башҡорт ҡоролтайҙарында хатта яуыз Иван Грозный «башҡорттарҙың изге милеге итеп таныған» ер тураһында һүҙ барҙы. Уны ша-

ғир башҡорт халҡының яҙмышы менән туранан-тура бәйләне: «Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ». Ерҙе һаҡлау тураһындағы шағирҙың уйланыуҙары уның «Тупраҡ» исемле шиғырында асыҡ сағылыш тапты:

*Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,*
*Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.*
*Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!*
*Күкрәктәге сәнабыҙ, —*

тип белдерҙе Бабич. Ер тураһында ошондай уҡ уйҙар Башҡортостан ерҙәрен күрәләтә баҫып алыуға борсолоу шағирҙың «Беренсе садә», «Список номер 9» тигән шиғырҙарында ла төп урын биләй. (Бабичтың «Список номер 9» исемле шиғырына аңлатма биреп китергә кәрәктер. Был шиғыр Учредительный собраниеға һайлауҙар уңайы менән яҙылған. (1917 йыл). Буласаҡ Учредительный собраниеға тәҡдим ителгән башҡорт кандидатуралары 9-сы һанлы исемлеккә теркәлә. Әйтергә кәрәк, был исемлеккә башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов һ. б. инәләр. Әлбиттә, улар үҙҙәренең һайлау алды платформаһына иң башта ер мәсьәләһен ҡуялар).

*Ҡитһә ерҙәр, бел шуны: мәсет китер, мәктәп китер.*
*Йәмле башҡорт ерҙәрен сирмеш, урыҫ ҡаплап китер.*
*Ер һиңә, тик ер: донъяң да — ер, Ғиҡбаң да — ер,*
*Ерҙән айырылһаң, һине һәр кем иҙеп, тапап китер.*
*Эй, туған башҡорт, әгәр булмаҫҡа булһаң бәдбәхет,*
*Ерҙе һаҡла, ер ҡосаҡла, ер һиңә алтын тәхет!*

Бабичтың был шиғри юлдары башҡорт милли хәрәкәтенең ер мәсьәләһенең халыҡ аңына еткереү өсөн һис шикһеҙ ыңғай йоғонто яһаған.

1917 йылдың 8 декабрендә асылған Бөтә башҡорт ойоштороу ҡоролтайы башҡорт ерҙәренә хосуси милек хоҡуғын таратыуға ҡырҡа ҡаршы сыҡты һәм Башҡортостанға XIX быуат аҙағы — XX быуат башында килеп ултырған күскенселәр (төрки булмағандар) үҙ ерҙәрен ситтә йәшәгән башҡорттар менән алмаштырыу зарурлығы тураһында ҡарар ҡабул итә. Ҡоролтайҙа ер тураһында бындай ҡарар ҡабул ителеүе батша хөкүмәтенең башҡорт ерҙәрен талауға йүнәлтелгән ер сәйәсәте менән туранан-тура бәйле. Әйтәйек, тик XIX быуаттың 70—90-сы йылдарында ғына ошо батша хөкүмәтенең ер талау сәйәсәте арҡаһында башҡорттар үҙҙәренең 2 млн. ярым десятинәнән ашыу ерҙәрен юғалта. Ә инде был күренеш башҡорт халҡының иҡтисади хәлен ныҡ ҡаҡ-

шата, ерҙе һаҡлау өсөн көрәште ифрат сетерекләндерә. Шуға күрә башҡорт халҡының тормош һәм булмышын үҙ күҙе менән күреп һәм үҙ елкәһендә татып үҫкән Ш. Бабич ер мәсьәләһенең асылын юғары поэтик алымдар менән һүрәтләүе һис тә осраҡлы күренеш түгел.

Ошо уңай менән шуға ла иғтибар итергә кәрәктер: хәҙерге көндә лә башҡорт халҡы һәм башҡа бәләкәй ерле халыҡтар өсөн ер проблемаһы бик киҫкен төҫ алды. Әгәр ҙә Рәсәй властары үткәргән ер сәйәсәте милли республикаларҙа тормошҡа ашырылһа, урындағы төп халыҡтар өсөн был оло фажиғә буласаҡ. Ни өсөн тигәндә Үҙәк ергә хосуси милек хоҡуғын индереү идеяһын тормошҡа нисек тә булһа ашырырға тырыша. Был ҡурҡыныс сәйәсәттең нигеҙендә республикаларҙағы рус булмаған төп халыҡтарҙы туған еренән, тупрағынан айырыу ынтылышы ята. Ергә хосуси милек хоҡуғы индерелһә, ул алыш-биреш объектына әйләнәсәк һәм бөтә ер һәр төрлө юл менән кеҫәләрен ҡалынайтҡан килмешәк эшҡыуарҙар ҡулына күсәсәк. Ә был инде рус булмаған халыҡтарҙың киләсәгенә ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра. Ошо хәҡиҡәтте, күреүебеҙсә, Ш. Бабич 22 йәшендә үк бик яҡшы аңлаған, шуға ла уның ер тураһындағы шиғырҙары хәҙер ҙә актуаль яңғырай.

XX быуат башында ер мәсьәләһе халыҡтың азатлыҡ, ерле мөхтәриәт йәғни ерле автономиялы республика булдырыу өсөн көрәш менән бергә бәйләнеп барҙы. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте үҙенең төп бурыстарының береһе итеп автономия, милли мөхтәриәт өсөн көрәште ҡуйҙы. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан Ш. Бабич ижадында азат Башҡортостан, милли мөхтәриәт өсөн көрәш 1917 йылдан алып үҙәк урын ала тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Ш. Бабич башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең етәксе органы булған Үҙәк шураның секретары (сәркәтибе — М. К.) вазифаһын үтәй. Һәр төрлө ҡарар һәм резолюциялар, фармандар яҙыуҙа, уларҙы тормошҡа ашырыуға ул ҙур өлөш индерә.

Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырыу юлындағы милли хәрәкәттең һәр аҙымын Бабич юғары рух күтәренкелеге, ҙур шатлыҡ, ҡыуаныс менән ҡабул итте һәм шиғри юлдарға һалды. 1917 йылдың 15 ноябрендә Башҡорт автономиялы республикаһын иғлан итеү уңайы менән бөйөк шағирыбыҙ «Олуғ шатлыҡ» (Башҡортостан мөхтәриәте иғлан ителеү һәм Ҡаруанһарай ҡулға алыныу илә) шиғыры менән сығыш яһаны. Бабич:

*Ябраил — мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,*
*Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.*
*Хәбәр бирһен, дәйен: булдың азат,*
*Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға, —*

тип автономияһын ҡотланы, был күренеште үҙенең иң изге теләктәренең тормошҡа ашыуы итеп күрһәтте һәм хатта үлһәм дә үкенмәйем тип белдерҙе:

*Үләм... Ташам... Тормайым, ашам күккә...*
*Үкенмәйем инде үлһәм дә.*
*Үкенмәйем инде тыуған йортҡа;*
*Күкдин ҡарап көлөп торһам да.*

Тыуған иленә булған көслө мөхәббәт, уның өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер тороуын белдерҙе:

*Намыҫ өсөн, тәңрем, йәндән кисәм,*
*Килтер вәғәҙә... Ҡөҙрәт ҡулың бир!*
*— Башҡортостан иҫән ҡала, — тиһәң,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир!*

Эйе, ысынбарлыҡта бөйөк шағирыбыҙ автономия яулау юлында миллион ғазаптар кисереп фажиғәле рәүештә һәләк булды...

Билдәле булыуынса, Башҡорт ерле мөхтәриәтен төҙөү ҡаты ҡаршылыҡтарға осраны. Шуларҙың береһе: татар шовинистарының Башҡорт автономияһын төҙөүгә ныҡ аяҡ салыуы, дөйөм Татар-Башҡорт автономияһы өсөн сығыш яһауы булды. Бабич, Башҡорт автономияһы иғлан ителгәс, уны танырға теләмәүселәрҙе фашланы һәм ҡәһәрләп сыҡты. Шундай шиғырҙарының береһе «Ҡазан платформаһы мөридтәренә (эйәреүселәренә)» тип аталыу осраҡлы хәл түгел. Милли мәсьәлә буйынса Ҡазан платформаһында тороусылар Урал-Иҙел штатын булдырыу өсөн сығыш яһаны, айырым Башҡорт автономияһын танырға теләмәне, хатта башҡорттарҙың айырым милләт булыуын инҡар итергә тырышты. Уларҙы Бабич былай тип фашланы:

*Һеҙ үгәйһеткәс, үгәйһендек, ләкин тарһынманыҡ,*
*Өрҙөгөҙ — һис һүнмәнек беҙ, орҙоғоҙ — һис һынманыҡ.*
*Һеҙ үсекләп: «Кит!» — тигәндә, беҙ сөсөкләп: «Кил!» — тинек,*
*Сөнки беҙ киң күңелле, мөъмин күңелле ил инек.*

*Һеҙ тызылдап сыҡтығыҙ, һай-һай хыял тип, һеҙҙеке.*
*Беҙ ҙә сыҡтыҡ, «һеҙҙеке ваҡ йәнле, тар һөмһөҙҙеке».*
*Ҡилде көндәр... «Буш хыялдар» сыҡты алға бар булып,*
*Әл дә булһа күңелегеҙ ҡалды ҡәберҙән тар булып.*

«Башҡортостан мөхтәриәтенә кире татарға» исемле шиғырында Ш. Бабич татар шовинистарын йәшел сапан кейгән хәйләкәр төлкө менән сағыштырҙы һәм былай тип белдерҙе:

*Намыҫ менән уйнап уңа алмаҫһың,*
*Бикәр китер һинең талашың;*
*Еңә алмаҫһың, мәңге тыя алмаҫһың*
*Ирек һөйгән Урал балаһын!..*
*Һеҙҙән түгел, башҡорт урыҫтан да,*
*Етер инде, байтаҡ ҡыҫылған.*

Шағир татар милләтселәрен иблисләнеүҙә, тарланыуҙа ғәйепләне:

*Алданырға башҡорт ҡурсаҡ түгел,*
*Тешең етмәҫ инде терһәккә!*
*Беҙҙә намыҫ, ялҡын һәм дә аҡ күңел,*
*Мыҫҡыл итмә беҙҙе, ярһытма!..*

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, татар шовинистары бөгөнгө көндә лә иблисләнеүҙәрен, башҡортҡа һәр яҡлап һөжүм итеүҙәрен, уны йоторға ынтылыуҙарын ташламаны. Шуға күрә Бабичтың татар милләтселәренә ҡаршы йүнәлтелгән шиғырҙары бөгөн дә бик урынлы яңғырай.

Бәғзе бер хәҙерге татар эшмәкәрҙәре Бабичты татар шағиры итергә тырышып, уның Башҡортостан мөхтәриәте, татар шовинистарына ҡаршы йүнәлтелгән шиғырҙарын, имеш, тик Башҡорт хөкүмәте бойороғо буйынса яҙған тип бара. Шағирҙың ижады менән танышыу был фекерҙең ялған һәм күрәләтә уйҙырма икәнен күрһәтә. Башҡортостан һәм тыуған халҡы өсөн күккә ашырға, йәненә миллион үлем алырға әҙер торған патриот шағирҙы кемдеңдер заказын үтәүсе итеп күрһәтергә аҙапланыу — уның ижади ҡеүәһен, әхлаҡи йөҙөн кәмһетергә тырышыуҙы аңлата.

Ш. Бабич ижадында үҙаллылыҡ өсөн көрәштең ауыр һәм һикәлтәле юлдары, хәл һәм ваҡиғалары бермә-бер теркәлгән һәм үҙ баһаһын алған. Башҡорт хөкүмәте 1917 йылдың 15 ноябрендә иғлан иткән Башҡортостан

автономияһын үҙ ваҡытында большевиктар танырға теләмәне, ә урындағы партия һәм совет эшмәкәрҙәре башҡорттарҙың үҙбилдәләнеш хоҡуғын ҡәтғи рәүештә кире ҡаҡты. Был йүнәлештә һәр төрлө татар шовинистары ла хәрәкәт итте. Шул арҡала эш хатта Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡулға алыуға барып етте. (17 февраль 1918 йыл.) Шуға күрә граждандар һуғышы башланғас, Башҡорт хөкүмәте, үҙ милли ғәскәрҙәрен төҙөп, большевиктарға ҡаршы көрәш иғлан итергә мәжбүр булды. Милли башҡорт полк һәм дивизияларын төҙөү эшендә Ш. Бабич туранан-тура ҡатнашты, башҡорт яугирҙарын изге яуға саҡырып, патриотик шиғырҙар яҙҙы. Был шиғырҙар үҙҙәре бер цикл тәшкил итә: «Ғәскәр маршы», «Дошмандар», «Күҙеңде ас», «Ғәскәр доғаһы», «Ҡорбан байрамы мөнәсәбәте менән» һ. б. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был патриотик рухтағы, халыҡтың хәрби традициялары, ирек һөйөү хистәре менән һуғарылған шиғырҙарҙың күбеһе киң ҡатлам уҡыусыларға билдәле түгел. «Ғәскәр доғаһы» шиғырында шағир башҡорт яугирына ныҡлыҡ һәм ғәйрәт һорап Аллаһы тәғәләгә генә түгел, хатта башҡорт халҡының боронғо мәжүси тәңреләренә лә мөрәжәғәт итте:

*«Тау эйәһе» тәңрем, таштарыңдан*
*Беләгемә ҡаты ныҡлыҡ һал!*
*«Ут эйәһе» тәңрем, уттарыңдан*
*Йөрәгемә һүнмәҫ утлыҡ һал!..*
*Диңгеҙҙәрҙе сайҡап тулҡынлатҡан,*
*Эй, ҡөҙрәтле «диңгеҙ батшаһы!» —*
*Тулҡынланып, мин дә дәрт ғәйрәттән*
*Диңгеҙ кеүек күкрәк ҡаҡһамсы!*

Шул уҡ ваҡытта Бабич тыуған еренә, Башҡортостанына һыйына, уның өҫтөнән ҡан болоттары китеүен теләй:

*Раббым, һиңә һығынам Башҡортостан,*
*Ишет мазлум башҡорт аһтарын.*
*Ҡан болото китһен ине өҫтән,*
*Һалсы рәхмәтеңде, ғаффарым!*

«Ғәскәр маршы» шиғыры марш ритмында, тантаналы, юғары ғәскәри рухта яҙылған. Уны уҡыған башҡорт яугирында милли-патриотик тойғолар уянмай ҡалмауы мөмкин түгел:

*Беҙ йөрөйбөҙ илде һаҡлайбыҙ тип,*
*Һаҡларбыҙ һәм Башҡортостанды;*
*Тураҡларбыҙ, илде таптайбыҙ тип*
*Ҡаршы килгән яуыз дошманды!*
*Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр,*
*Ҡупһын шәһит рухтар талына;*
*Хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар,*
*Бабайҙарҙың ҡаны янына.*
*Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә алға, марш!*
*Тетрәп торһон ер-күк асманы.*
*Беҙ арыҫлан, беҙ бит һәм юлбарыҫ,*
*Яңы Башҡортостан ғәскәре.*

Бабичтың был патриотик шиғырҙары башҡорт ғәскәрҙәрен ил өсөн изге яуға өндәп, һәр яугирға көс һәм ғәйрәт биргән. Юҡҡа ғына башҡорт ғәскәрҙәренең иҫ китмәле батырлығын, юғары тәртиплелеген аҡ генералдар ҙа танырға мәжбүр булған. Мәҫәлән, аҡ чех ғәскәрҙәре төркөмөнөң командующийы С. Чечек былай тип яҙа: «Һуңғы алыштарҙа башҡорттар үҙҙәрен бик ғәйрәтле тоттолар һәм башҡорт һалдаттары оло ышанысҡа һәм маҡтауға лайыҡ».

Ләкин 1918 йылдың аҙағында Башҡортостандағы хәл-ваҡиғалар ныҡ үҙгәрә. Себер хөкүмәте 1918 йылдың 18 ноябрендә «Дәүләт түңкәрелеше» үткәреп, Колчакты Рәсәйҙең «юғары хакиме» итеп иғлан итә. Рәсәйҙә хәрәкәт иткән һәр төрлө демократик партиялар тарафынан төҙөлгән хөкүмәт етәкселәре ҡулға алына йәки уларға ышанмаусанлыҡ белдерелә. Шул уҡ ваҡытта Колчак Рәсәйҙе «берҙәм һәм бүленмәҫ» дәүләт итеп иғлан итә һәм халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә булған хоҡуғын танымауын белдерә. Был сәйәсәт, әлбиттә, З. Вәлиди етәкләгән Башҡорт хөкүмәтенә, башҡорт ғәскәрҙәренә лә ҡарата үткәрелә. Ошо ауыр шарттарҙа Башҡорт хөкүмәте ике хәрби яҡтың — аҡтарҙың һәм ҡыҙылдарҙың — көслө ҡыҫымы аҫтында ҡала һәм автономия яулау ниәте менән Совет власы яғына сығыу юлдарын эҙләй башлай. Был хәл-ваҡиғалар 1918 йылдың аҙағында — 1919 йылдың башында була. Ниһәйәт, 1919 йылдың 18 февралендә Темәс ауылы тирәһенә тупланған Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы, ҡыҙылдар яғына үҙ ирке менән сығыуы тураһында белдерә. Бындай боролоштоң сәбәптәрен һәм асылын халыҡҡа аңлатыу эшен Башҡорт шураһы ағзаһы Ш. Ба-

бич үҙ өҫтөнә ала һәм шул көндәрҙә уның мәшһүр «Башҡорт халҡына көйлө хитабы» донъя күрҙе. Шуны ла әйтергә кәрәк: ошо ауыр осорҙа ике яҡтан да башҡорт милли-азатлыҡ етәксеһе З. Вәлидигә ҡаршы көслө өгөт-нәсихәт һәм ҡотҡо таратыу эше башлана. Бер яҡтан Колчак һәм Дутов ярандары З. Вәлиди ҡыҙылдар яғына сығып, башҡорт халҡын һатты, ул һатлыҡ йән тип яҙылған листовкалар тараттылар. Икенсе яҡтан милли мәнфәғәтте аңламаған башҡорт большевиктары имеш, З. Вәлиди донъя империалистары ялсыһы, ул хан булырға теләй, илде ҡанға батырҙы, сығышы менән типтәр ишле уйҙырмаларҙан торған өндәмәләр баҫтырып, халыҡтың башын бутаны. Шуға күрә Бабич, ике яҡҡа ла яуап биреп, былай тип белдерҙе:

*Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ әйтәм,*
*Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң:*
*Зәки беҙҙе һатҡан тигән һүҙгә*
*Ышанмаҫһың, ахмаҡ булмаһаң, —*
*Башҡорттағы иман, намыҫ менән*
*Ярһып тибә Зәки йөрәге.*
*Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона,*
*Зәки — башҡорттарҙың терәге.*

Ошо уҡ көйлө хитабында Ш. Бабич шиғри юлдар менән башҡорт ғәскәрҙәренең аҡтар лагерында булыу сәбәптәренә лә иғтибар итте:

*Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн:*
*Большевиктар талап килгәнгә.*
*Красная гвардия, сиктән сығып,*
*Аҫҡан, киҫкән, ватҡан, ҡырғанға.*

Ләкин шул уҡ ваҡытта, шағир аңлатҡанса:

*Дутов, Колчак әйтә: «Ваҡ милләттәр*
*Мөхтәриәт ала күрмәһен!*
*Батша ҡул аҫтында ғүмер һөрөп,*
*Буржуаздар йырын йырлаһын...»*

Ә инде большевиктар, Колчактан айырмалы рәүештә, Башҡортостан мөхтәриәтен танырға әҙер булыуҙарын белдерәләр. 1919 йылдың башында Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре, Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдарға күсмәҫ элек, урындағы Совет власы органдары менән һөйләшеүҙәр

алып бара. Улар Үҙәктең ризалығы һәм фатихаһын алып, башҡорттарҙың автономияһын таныясаҡтарын белдерәләр. Шуға күрә Бабич был бороломто ла халыҡ-ҡа аңлата:

*Большевиктар әйтә: «Һәр бер илгә*
*Камил мөхтәриәт бирелһен,*
*Һәр бер ярлы, мазлум, иҙелгән ил*
*Мөхтәриәт алһын, терелһен!»*

Бабичтың ялҡынлы шиғри мөрәжәғәте, шул ваҡиғалар шаһиттары яҙғанса, халыҡ араһында нык тарала. Был турала Бабич менән бергә эш алып барған башҡорт зыялыһы Сәхи Рәхмәти бына нисек яҙа: «Был шиғырҙың шул ваҡыттағы тәьҫире атом бомбаһының тәьҫиренә тиң ине. Ул шиғыр ваҡытында Саранскиҙа ун мең нөсхә менән баҫылып, башҡорт ауылдарына таратылғайны». (Шәйехзада Бабич хаҡында иҫтәлектәр. Өфө, 1994, 221-се бит.)

Әлбиттә, Ш. Бабичты тик үҙ ваҡытындағы хәл-ваҡиғаларҙы ғына сағылдырыусы шағир итеп күҙ алдына баҫтырһаҡ, был һис тә дөрөҫ булмаҫ ине.

Бөйөк шағирыбыҙ Ш. Бабич ижадын иғтибар менән байҡау шуны күрһәтә: ул туған халыҡтың үткән тарихын ифрат яҡшы белгән һәм уны башҡорт халҡының быуаттар буйы алып барған милли-азатлыҡ көрәш юҫығында ҡараған:

*Башҡорт халҡы тарихта*
*Ғәйрәт менән фаш булған;*
*Киң ирекккә ашҡынған*
*Күңелендәге ташҡындан;*
*Һәр ваҡытта намыҫын*
*Үҙ башына баш ҡылған;*
*Туған илен һаҡлауға*
*Үҙе булған таш ҡурған.*

Уның милли батырыбыҙ Салауатҡа, милли музыка ҡоралыбыҙ ҡурайға арналған шиғырҙары ла шул турала һөйләй:

*Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан*
*Һуғарылды ҡара ҡан менән!*

Шуға күрә:

*Яугир ирҙәребеҙ нисә заман*
*Аҡ тирмәлә ҡылыс ҡайраны;*
*Шалтыр-шолтор сыңлап һауыт-һайман,*
*Өҫтөбөҙгә һөңгө яйнаны.*

Был осраҡта уның 1735—1740 йылғы башҡорт ихтилалының етәкселәренең береһе — Аҡай батырға арналған шиғырын да иҫкә төшөрөү урынлы булыр ине. Башҡорт батыры Аҡайҙың ҡәбере өҫтөндә яҙылған шиғырҙа шундай юлдар бар:

*Ант эсеп, ҡындан һурып, мин ҡәбереңә орҙом ҡылыс,*
*Бел, ҡаһарман! Саф ғәһед был! Йоҡла рәхәт, бул тыныс!*
*Аҡ — тарих — пак ғәнғәнә алдымда тотҡан идеалым,*
*И Аҡай! Башҡортҡа ҡорбан бер түгел, миллион йәнем.*

Милли батырҙарыбыҙға дан йырлау менән бер рәттән, Ш. Бабич халҡыбыҙ дошмандарына ҡарата үҙенең нәфрәтен белдерҙе:

*Тәфкилев беҙҙең тарихта сирҡаныс, мәлғүн нәсәп,*
*Шул тарихтан әйтегеҙ, кемдәр булыр мәмнүн вә шат?*

Туған халҡының тарихын яҡшы белгән шағир үҙ ижадында иң башта башҡорт милли үҙаңын сағылдырҙы, халыҡты уяулыҡҡа, азатлыҡ, мөхтәриәт өсөн көрәшкә өндәне. Шуның өсөн Ш. Бабичты татар шағиры итергә тырышыуҙың бер ниндәй ҙә ерлеге юҡ. Үҙ ваҡытында яҙыусы Имай Насыри «Бабич ҡайһы милләт шағиры?» тигән һорау ҡуйып, уға нигеҙле яуап биргәйне: «Бабич ҡайһы милләт шағиры? тигәндә, уның татар телендә яҙыуын алалар ҙа шуға ҡарап, уның милләтен билдәләйҙәр. Был, әлбиттә, бөтөнләй үк дөрөҫ булып бөтмәйәсәк. Башҡортостанда торған башҡорттарҙың яртыһы татарса һөйләшә лә бит, уның менән уларҙы башҡортлоҡтан һыҙып ташлап булмай. Улар бөтә тормошонда башҡорт халҡы менән бәйләнгәндәр. Территория, хужалыҡ формалары бер. Бабичтың да туған ғаиләһе, йырлаған халҡы башҡорт, йәшәгән ере — Урал — Иҙел булыуы, яҙғандарының күбеһе шул халыҡ тормошон сағылдырыуы, уның теленә ҡарап, татар тиергә бер ҙә урын ҡалдырмай. Унан һуң, уның һуңғы яҙғандары бөтөнләй башҡорт телендә һәм башҡорт милләтенең көрәш көндәренән алып яҙылған.

Бабич, башҡорт ғаиләһенән сығып, башҡорттар араһында үҫеп, башҡорт халҡының моң-зарын йырлаған һәм шул милләттең хәрәкәтенә ҡатнашып, шул илдә үлгән башҡорт шағиры ине тибеҙ».

Бабич ижадында татар халҡына ишара яһаған, ғөмумән татар милләте телгә алынған шиғырҙар ҙа бар һәм булмауы мөмкин дә түгел. («Хөрриәт бүләге», «Һатиф вә татар», «Бәғзе студенттарыбыҙ» һ. б.) Ни өсөн тигәндә XIX быуат аҙағы XX быуат башында башҡорт зыялылары араһында төркиселек идеологияһы, төрки халыҡтарҙың берҙәмлеген нығытыу тырышлығы киң таралыш ала, хатта дөйөм төрки хәрәкәте барлыҡҡа килә. Ошо осорҙа берҙәм төрки-татар халҡы, хатта милләте тигән ҡараш та киң таралыш ала. Төрки-татарсылыҡ концепцияһы башҡорт зыялыларына ла тәьҫир итмәй ҡалмай. Юҡҡа ғына остазыбыҙ З. Вәлиди үҙенең ғилми хеҙмәттәренең береһен «Төрки-татар тарихы» тип атамаған. Һис шикһеҙ Ш. Бабичҡа ла «төрки-татарсылыҡ» «ауырыуы» ҡағылмай ҡалмағандыр. Ә был инде Ғ. Ибраһимовҡа Бабич тураһында «Ул башта татарсы, мазлум татар өсөн яҙыусы, татарҙың дошмандары менән һуғышыусы ине. Унан һуң татарға арҡаһын борҙо, башҡортҡа ҡул һуҙҙы. Салауат балаларын күккә күтәреп, татарға үпкә менән ҡарай башланы», — тип яҙырға сәбәпсе булды. Ләкин Бабичҡа «башта татарсы, унан башҡортсо» тип ҡарау ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тап килмәй. Һүҙ Бабичтың тәүҙә дөйөм төрки-татарсылыҡ ҡарашына тартылыуы, ә инде яйлап айырым башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте ойошҡас, тулыһынса үҙ халҡы мәнфәғәттәрен, милли үҙаңын сағылдырыуға күсеүе тураһында барырға тейеш. Быңдай һығымта Билал Юлдашбаевтың XX быуат башында башҡорт милли хәрәкәтенең «үҙ йөҙө» булмауы һәм дөйөм мосолман һәм төркиселек хәрәкәте эсендә булыуы тураһындағы фекере менән тап килә. Ләкин татар зыялыларының башҡортто айырым милләт итеп танырға теләмәүе, башҡорт мөхтәриәте идеяһына ҡаршы сығыуы үҙаллы башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен тыуҙыра һәм Ш. Бабич тәбиғи рәүештә ошо хәрәкәткә ҡушыла.

Бабич ижадында «татар» исеменең байтаҡ ҡабатланыуының тағы ла бер сәбәбе бар. XX быуат башында күпселек милли баҫмалар нәшриәтендә баш мөхәррир булып татар зыялылары ултырған. (Ш. Бабичтың «Көтәм» шиғырын баҫтырыуҙан баш тартҡан Закир Ҡади-

ризы миҫал итеп алырға була — М. Ҡ.) Улар, әлбиттә, әҙиптәрҙән үҙ әҫәрҙәрендә күберәк «татар» төшөнсәһен ҡулланыуҙы талап иткәндәр, шул уҡ төрки-татар идеяһын алға һөргәндәр. Шуға күрә күп башҡорт шағирҙары башҡорт халҡы хәлдәрен һүрәтләһәләр ҙә, йышыраҡ «төрки-татар» йә «татар» һүҙҙәрен күберәк файҙаланғандар. Был турала Ш. Бабич «Ҡитабеннас» циклында башҡорт зыялыһы Таңғатаровҡа бағышланған шиғырында үҙе яҙып ҡалдырған: «Таңғатаровтың башҡорт икәне мәғлүм булһа ла, наҙым (шиғыр) үҙгәртелмәне, сөнки, берҙән, вәзен шиғыр (шиғыр ритмы), икенсенән, мөшәр иләйһенең (юғарыла әйтелгән кешенең — ред.) яҙыуҙарында «татарҙар» лифзының (һүҙенең — ред.) хисабынан күп булыуы шуны теләй». Бының дөрөҫ булыуын татар яҙыусыһы Зариф Бәшириҙең Ш. Бабич тураһындағы яҙмалары ла ҡеүәтләй. Был осраҡта Бабичтың мәшһүр шиғыры «Ҡөтәм» тураһында һүҙ бара. Үҙ ваҡытында «Тормош» газетаһының редакторы Закир Ҡадири Бабичтың был башҡорт телендә яҙылған шиғырын башҡортса баҫыуҙан баш тарта. «Тормош» газетаһы редакторына Бабич биргән яуап та бик фәһемле: «Беҙҙең халыҡҡа ирекле көндәр килмәйенсә, был шиғыр донъя күрмәҫ, ахырыһы. Ә мин ул көндө көтәм», — тип белдерә ул. Ошо ғына эпизод та Бабичтың кем булыуы һәм кем мәнфәғәте өсөн көрәшеүен тулы кәүҙәләндерә һәм шағирҙың сығышы, булмышы тураһында бәхәс алып барыуҙың төптө урынһыҙ булыуын иҫбатлай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шағирыбыҙҙың ғүмере оҙон булманы, тиҙ өҙөлдө. Бөйөк шағирҙың фажиғәле һәләк булыуы тураһында күп яҙылды һәм уны ҡабатлап тороу кәрәкмәй. Тик шуны әйтеп китмәй булмай: Ш. Бабич яу ҡырында, туған халҡына азатлыҡ, үҙаллылыҡ яулау ҡырында үтә йәшләй һәләк булды. Әммә шул ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә ул үлемһеҙ әҫәрҙәр яҙып, халыҡ йөрәгендә, күңелендә мәңге онотмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы.

*«Башҡортостан йәшәһен!*
*Башҡорт күрһен сафаһын»,* —
тип халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылды бөйөк шағирыбыҙ.

*Зиннур Уракҫин,*
Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы

## ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ — ҺҮҘ ОҪТАҺЫ

Тел яҙыусыға әҫәр туҡымаһын төҙөү өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанаҡ булып тора. Телдәге меңдәрсә һүҙҙәр, тотороҡло һүҙбәйләнештәр, формалар уларҙы бер-береһе менән бәйләргә, яраштырырға, төрләндерергә мөмкинлек бирә. Телмәр, бигерәк тә яҙыусының телмәре, ниндәйҙер кимәлдә ирекле була. Уй-фекерен, хыялын, хистәрен иң теүәл, иң тәңгәл итеп сағылдырырлыҡ һүҙҙәрҙе ҡулланыу шағирҙың оҫталығына, һүҙ маһирлығына, тел тойғоһона туранан-тура бәйләнгән.

Ошо йәһәттән баһа биреп ҡарағанда, Шәйехзада Бабичты, һис икеләнмәй, ысын һүҙ оҫтаһы тип атарға мөмкин. Был яҡтан уның ижадына әлегәсә тулы баһа бирелгәне юҡ, сөнки мәшһүр шағирҙың ҡулъяҙмалары баҫылғандары менән сағыштырып өйрәнелмәгән, уның ижад лабораторияһы, һүҙ өҫтөндә эшләүе, йәғни шиғыр яҙыу процесы асылмаған. Беҙҙең күҙәтеүҙәр ҙә баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәре буйынса алып барыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уның тел йәһәтенән үтә лә оҫта, әсә теленең нескәлектәрен бик белеп, төшөнөп яҙған әҙип булыуын һис икеләнмәй әйтә алабыҙ.

Шәйехзада Бабич беҙҙең быуаттың унынсы-егерменсе йылдары араһында ижад иткән. Был осор башҡорт әҙәбиәте өсөн элекке, йәки иҫке төрки әҙәби теленән халыҡтың һөйләү теленә нигеҙләнгән яңы башҡорт милли әҙәби теленә күсеү дәүере ине. Шуға күрә лә уның шиғырҙарында, фельетондарында иҫке әҙәби телгә хас ғәрәп, фарсы һүҙҙәре, уның ҡанундарына ярашлы һүҙбәйләнештәр, *ошбу, ки, вә ләкин, бағлар* (баҡсалар), *тағлар* (тауҙар) кеүек һүҙҙәр, синтаксик конструкциялар,

формалар менән бергә ябай һөйләү теленән алынған *әйттереү, типтереү, һиптереү, һуҡ* тиәһе урынға *ман* тигән һүҙҙәр, фразеологик берәмектәр бик күп. Унын теле әҙәби телдәге ике традицияның (иҫке төрки һәм яңы әҙәби тел күренештәренең) синтезы булып тора. Заманының һөйләү теле өсөн хас рус һүҙҙәре лә бар.

Ҙур булмаған сығышта мәшһүр әҙиптең бөтә ижадын тел йәһетенән тикшереп сығыу мөмкин түгел, был киләсәктә эшләнә торған эш. Бында шағирҙың һүҙ оҫталығына иғтибар итеlә, тел мөмкинлектәрен ни тиклем тойоп эш итеүен күрһәтеү маҡсаты ғына ҡуйыла.

Шағирҙың рухи ғазаптары, ысынбарлыҡты аңларға тырышыуы, икеләнеүҙәре уның ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙарында, икеләнеүҙәрен белдергән антономик һүҙҙәрҙе, формаларҙы шиғыр юлдарында йыш ҡулланыуында сағыла. Был күренеш ҡыҙыл еп булып бөтә ижады буйына үтә.

...Күп һөйөндөм, һөйөнөс менән *туйындым, туйманым.*
(«Айға мендек») *

Бер минутта ташты күңелем, бер минутта
булды ут,
Берсә *янды,* берсә *туңды,* барыһы булды
бер минут. («Бер минут»)
*Утҡа бешер* Зәки, *һыуға төшөр,*
Әммә һатмаҫ намыҫ — күңелен.
...*Үлһә үлер* ғәзиз ере өсөн,
Әммә *тере ҡалыр* намыҫы!

(«Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап».)

Бына *әле илап, әле көлдөм,*
Әле көйҙөм, әле һыҙландым («Үткән көндәр») һ. б.

Шағирҙың ярһыу күңеле, хистәренең ташҡынлығы һәр шиғыр юлында тиерлек урғылып тора. Бына, мәҫәлән, әҙәбиәттә билдәле булған ҡабатлау алымы. Шиғыр юлдарында улар һис тә урынһыҙ тавтология рәүешендә түгел, ә төрләнә-төрләнә оҫәр туҡымаһына үрелеп бара.

---

* Бөтә миҫалдар ҙа Шәйехзада Бабичтың «Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар» исемле йыйынтығынан алынды (Өфө: Китап, 1994). Төҙөүсеһе Рауил Бикбаев.

*Һин сабыр итһәң, сабыр ит, башҡаһы*
*сабыр итмәһен,*
*Юҡ, түҙә алмайым, сабыр итә алмайым,*
*аҡсаһы йәбер итмәһен.*
(«Бай һәм ярлы»)
*Там, минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып*
*тор мәңгегә,*
*Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып*
*тор мәңгегә.*
(«Бер минут»)

Шәйехзада Бабич шиғырҙарында эске рифма ла бик йыш осрай. Был күренеш ниндәйҙер һүҙ уйнатыу маҡсатында ғына эшләнмәй, ә шиғырҙың мәғәнәһе менән ауаздаш була, һис бер яһалмалылыҡ, формализм тойолмай.

Бер үк яңғырашлы өндәрҙең сиратланыуы:

*Мең төрлө уй, ҡатты баш,* (ш)
*Ни эшләргә лә аптыраш.* (ш-ш)
*Яртым яна, яртым туңа,* (я-я-я)
*Йәнем үлде яртылаш.* (ш)
*Ҡаҡты тулҡын, аҡты йәш,* (ҡ-ҡ-ҡ)
*Һүҙҙә ләғнәт, күҙҙә хәсрәт,* (ҙ-ҙ), (т-т)
*Эстә дәһшәт, ҡалтыраш.* (ш-ш)
(«Аптыраған минуттарҙа»)
*Кем генә һуң ҡул осонан ҡыл эсенә*
*моң сәсә?*
(«Скрипка»)

Бер үк формаларҙың, һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы:

*Алма, алма, алмаҡай,*
*Алдала ла ал да тай...*
(«Хәҙрәте Сүнчәләй рухына»)
*Эй, тиле ҡаҙ, һинең аҡылың аҙ...*
(«...Ҡаҙ бәпкәләре»)

*Тын ғына, тып-тымыҡ бер төн ине,*
*Шишмәкәй шылтыр-шылтыр-шылтыр ине...*
*Йыраҡтан гөлдөр-гөлдөр арба килә...*
(«Тын төн») һ. б.

Бына, мәҫәлән, 1915 йылда яҙылған «Шәмсетдин суфый ауыҙынан» исемле шиғырының рифмаһы тулыһынса -ғай/-гәй формаһын уйнатыуға ҡоролған.

*Был донъяла беҙ татарҙай*
*Тоҙһоҙ улғай—улмағай,*
*Булһа булғай, беҙ шикелле*
*Эшһеҙ улғай—улмағай.*

Артабан «килгәй—килмәгәй, торғай—тормағай, бирмәгәй, сыҡһай—сыҡмағай» һүҙҙәре һәр юлда килә.

Ш. Бабичҡа һүҙ яһап ебәреү, һүҙҙәрҙе ғәҙәти булмаған бәйләнешкә индереү ҙә ят түгел. Мәҫәлән, «серле дуҫтар», «шишарат, тишарат», «меҫкенсәктәр» кеүек уның үҙенә генә хас һүҙҙәр, «йән сәсәктәр», нурҙа уйнау, нур ептәре ише һүҙбәйләнештәр бик күп.

Телдәге мәғәнәләш (синоним) һүҙҙәрҙе шиғырҙарында ҡулланыуҙа ла Шәйехзада Бабич ҙур оҫталыҡ күрһәтә. Бер һүҙҙе ҡабатламаҫ өсөн ул синонимик һүҙҙәрҙе бер үк шиғыр юлында ҡуллана. Мәҫәлән, һандуғас — былбыл, моң — зар, ҡайғы — хәсрәт, Ватан — Тыуған ил, тиң — бәрәбәр-бер һәм башҡа ошондай һүҙҙәрҙе уның шиғыр юлдарынан күп табып була.

Синонимдар тавтологиянан ҡотолоу сараһы ғына түгел. Улар телмәрҙә төрлө стилистик сара булараҡ та ҡулланыла. Шағир һәр ваҡыт уйлана, моңлана, шикләнә, шомлана, ғазаплана һәм үҙенең уй-кисерештәрен тулыраҡ, теүәлерәк, тәңгәлерәк сағылдырыу өсөн һүҙҙәр эҙләй. Ошо эҙләнеү уны бер үк шиғыр юлына мәғәнәләре яҡын һүҙҙәрҙе теҙеп, көслө экспрессия тыуҙырырға мөмкинлек бирә.

Миҫалдар:

*Тау башына бер аҙ ҡарап торҙом,*
*Мәхлүккәйҙе аяп, ҡыҙғанып.* («Олаҡтырылған
бесәй»).
*Беҙҙең, иптәш, баҡсабыҙ бар, иллә һәйбәт,*
*шәп тә һуң.* («Беҙҙең баҡса»)
*Эй, арыу булды, арыу булды мәғишәт айҡалып:*
*«Йәшәһен ҡимmәтселек!» тип һикерә, ырғый бай*
*халыҡ.* («Йәшәһен ҡимmәтселек»)

Бер-бер артлы теҙелеп килгән синонимдар бер-берен асыҡлау, конкретлаштырыу, тулыландырыу өсөн ҡулланыла. Бына «2 ғинуар көнө» исемле шиғырында ла шағир үҙенең төп фекерен ошондай һүҙҙәр менән сағылдыра. Ғүмерем заяға үтмәнеме икән тип икеләнә, уйлана. Ошо икеләнеү, уйланыуҙар үҙенә ҡат-ҡат һорау ҡуйыу менән бирелгән дә инде:

*Ғүмерем үтте бикәрерәк,*
*Бүш ел ҡыуҙым да ҡыуҙым;*
*Тыуҙым, үҫтем, ҙур булдым,*
*Ник яралдым, ник тыуҙым?* («2 ғинуар көнө»)

Бабичтың поэзияһы тойғоларға ғәжәп бай икәне билдәле. Шиғырҙың юғары эмоционаллеге, тәьҫирсәнлеге, алда әйтелгәнсә, бигерәк тә экспрессив синонимдар аша көслө бирелә. Бындай һүҙҙәр, ғәҙәттә, бер рәткә теҙеп, мәғәнәләренең көсәйә барыуына ҡарап урынлаштырыла.

*Арыҡланған, кипкән, хәле киткән,*
*Нәжес бысраҡ ҡатҡан моронона.* («Олаҡтырылған бесәй»)

*Остолар моңдар һауаға,*
*Йырлашып ҡыҙҙар менән;*
*Мин тороп ҡалдым көйөп, әрнеп,*
*Күңел һыҙлау менән.* («Остолар»).

*Даръя төҫлө киң, тәрән, төпһөҙ, офоҡһоҙ шәфҡәтем.* («Шәфҡәтем»)

Шағирҙың тормошта үҙ урынын эҙләп үрһәләнеүе, янъяҡҡа ташланыуы, бер минут эсендә ут булып янырға ла, боҙ булып туңырға ла өлгөргән йөрәге, күңел ғазабы күҙгә ташланып тора. Үҙенең рухи хәлен, уй-тойғоһон нисек тә асып һалырға, әйтеп бирергә ынтылған шағир быға яраҡлы һүҙҙәр эҙләй, бер фекергә ҡабатҡабат ҡайта:

*Мең төрлө уй, ҡатты баш,*
*Ни эшләргә лә аптыраш:*
*Яртым яна, яртым туңа,*
*Йәнем үлде яртылаш.* («Аптыраған минуттарҙа»)

*Бер минут бар донъяһын ҡарғап ҡабынды уттарым,*
*Янды, көйҙө, парса-парса булды меҫкен күкерәгем* («Бер минут»).

Халҡының хәсрәтен, үлемен, иңрәүен күреп «аптыраған, башы ҡатҡан» шағир «янып» ҡына ҡалмай, «көйә», уның «бәғере өҙгәләнә»:

*Янып-көйөп, бәғерем өҙгәләнеп,*
*Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,*
*«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип,*
*Уралҡайға ҡарап илайым.* («Көтәм»)

Лəкин Урал тыныс, халыҡтың яҙмышы ла, шағирҙың тулҡынланыуы ла уның олпатлығын юғалтмай:

*Күрəм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап*
*Урал ята əкрен, тын ғына...*

Əҫəрҙең экспрессивлығын арттырыу маҡсатында Ш. Бабич фразеологик берəмектəрҙе лə оҫта файҙалана. Һис шикһеҙ, һүҙҙең мəғəнəһен улар көсəйтеп, арттырып, хатта конкретлаштырып та килəлəр: ер йыртып ҡысҡырыу; «Мин!» — тиеп, күкрəк һуғып, бик күп сүбəктəр сəйнəнең («Мəғрифəт һатыусыға»).

*Унда шəшкелəр ватып, бында урындыҡтар ватып,*
*Тəҙрəне селпəрəмə килтереүҙəр бар ине.*
(«Бер эсеүсенең зары»)
*Ни тиһəң, баш өҫтөнə ул менде тиҙ,*
*Шул ҡəҙəр тиҙ — тик асып йомғансы күҙ.*
(«Ҡандала»)

Бабичтың шиғырҙарында телдəге плеоназм күренешенең сағылышын да күреп була. Бындай осраҡта алда килгəн синоним һүҙ үҙенəн һуң килгəненең мəғəнə йөкмəткеһен тəрəнəйтə, көсəйтə төшə, тик яңы мəғəнə төҫмөрҙəре өҫтəмəй һəм, алда күрһəтелгəн осраҡтарҙағы кеүек, тиң киҫəк булып килмəй.

*Тыңлағыҙсы, ҡоштар, йырҙарымды,*
*Тыңлаһағыҙ, һеҙгə йырлармын.*
*Һеҙ һайрағыҙ, ə мин тыңлармын,*
*Тыңлап, үкһеп-үкһеп иլармын.*
(«Яҙғы йыр»)

Илау менəн үкһеү айырым алғанда тулы мəғəнəле һүҙҙəр, ə бында үҙ аллы синонимдар булып түгел, илау һүҙенең мəғəнəһен көсəйтеп килгəн. Түбəндəге миҫалда ла шундай уҡ хəл күренə:

*Һин бөтə ислам серен, ислам йырын йыйған китап;*
*Моңдарыңдың аҫтына йəшереп, йыйып ҡуйған*
*китап.*
(«Ҡанун тыңлағанда»)

Үрҙə əйтелгəнсə, Ш. Бабич телдəге синонимдарҙың мəғəнə нескəлектəрен тойоп, уларҙы төрлөсə мөнəсəбəттəргə индереп һүрəтлəнгəн картиналарын, уйҙарын тулы, дөрөҫ итеп биргəн. Шиғырҙарын юғары эмоционаллек менəн һуғарған.

Түбәндәге шиғырҙа ла «иблистәр төкөргән донъяға» ҡәһәрләнеп, үҙенең ғазаплы, әрнеүле хәлен бына шундай юлдар менән биргән:

*Валлаһи, һин сәнселеп кит, тонсоғоп ул, бөт, ҡаҙал,*
*Шунда ла һис кем дә китмәҫ, валлаһи, бер эт ҡәҙәр!*
(«Аҡтыҡ зарым»)

Йыйып шуны әйтергә мөмкин: Шәйехзада Бабич — һүҙ оҫтаһы булараҡ та, яңы әҙәби телебеҙҙе тыуҙырыусыларҙың береһе булараҡ та тел йәһәтенән төрлө яҡлап тәрән өйрәнеүгә лайыҡ әҙип.

*Ғайса Хөсәйенов,*
Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы

## БАБИЧ — ШИҒЫР ОҪТАҺЫ

Теория өлкәһендә башҡорт шиғыр төҙөлөшө әле сағыштырмаса аҙыраҡ өйрәнелгән. Милли шиғырҙың ритмик нигеҙҙәрен, рифмалар һәм строфалар системаһын, поэтик фонетикаһын, ритм-интонация үҙенсәлектәрен ентекле тикшереү ҙур ғилми-практик әһәмиәткә эйә. Ә төрлө поэтик формаларға бай башҡорт халыҡ поэзияһы, әйтәйек, Аҡмулла, М. Ғафури, Ш. Бабич, Д. Юлтый, Т. Йәнәби, Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Р. Ғарипов кеүек шағирҙарҙың әҙәби мираҫы был тәңгәлдә ғәжәп ҡыҙыҡлы бай материал бирә. Был эште шулай конкрет шағирҙың шиғыр техникаһын тикшереүҙән дә башларға мөмкин. Ошо йәһәттән Шәйехзада Бабичтың шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү үҙенсә фәһемле.

Билдәле булыуынса, Шәйехзада Бабич, беренсенән, башҡорт поэзияһы донъяһында ҙур шөһрәт ҡаҙанған талант эйәһе; икенсенән, яҙма классик шиғыр өлгөләрен халыҡ шиғыры традициялары менән йәтеш берләштерә алған һәм башҡорт шиғыр культураһын тиңһеҙ бейеклектәргә күтәрешкән шиғыр оҫтаһы. Бабич поэтикаһынан, әйтәйек, башҡорт-татар силлабикаһының бай ритмик-интонацион үҙенсәлектәрен, рифмалар ишлелеген, строфалар төрлөлөгөн күрһәтеүсе ғәйәт күп миҫалдар, бриллианттай ялтырар дәрәжәгә еткереп камил эшләнгән өлгөләрҙе әллә ни хәтле табырға мөмкин. Ошо мәҡәләлә уның ана шул бай поэтикаһының кескәй генә бер өлөшөн — уның рифмалар системаһын, шиғри фонетика күренештәрен бер ҡәҙәр күҙәтергә иҫәп. Сөнки, берҙән, шиғыр туҡымаһында хәл иткес роль уйнаган

рифмалар һәм поэтик яңғыраштар буйынса шиғыр техникаһының мөһим һәм үҙенсәлекле күп яҡтарына ҡағылырға ла яй тыуасаҡ. Икенсенән, Бабич поэзияһында рифмалар һәм поэтик яңғыраштар айырыуса мөһим урын тотҡан һәм үҙенсәлекле сағылған шиғри-техник компоненттарҙың иң характерлылары ул.

Рифма — ул шиғыр туҡымаһында мәғәнә, ритмика, интонацион аһәңлек һәм композицион ойошторолош менән тығыҙ бәйләнешле бер нисә функцияны бер юлы үтәп килеүсе поэтик категория. Әгәр рифманың мәғәнәүи функцияһы строфалағы иң әһәмиәтле һүҙҙе рифмаға тура килтереүгә күберәк ҡағылышлы булһа, ритмик-интонацион һәм композицион функциялары ритмик төркөмдәрҙе һәм шиғыр юлдарын айырыу, яңғыраште көсәйтеү, яңы строфа формалары хасил итеү менән тығыҙ бәйләнешле. Ғәҙәттә һуҙынҡы (ассонанс) һәм тартынҡы (аллитерация) өндәр яңғырашы, һүҙҙәр ҡабатланышы һәм тауыш эйәртеме — инструментовка рәүешендәге поэтик фонетика күренештәре иһә рифмаларҙың, ғөмүмән, шиғырҙың ритмик-интонацион мелодияһын көсәйтеүсе өҫтәмә саралар булып йөрөйҙәр. Уларҙың йәнә эске рифмалар ише яңғыраштар менән ҡеүәтләнеше лә йыш күренеш.

Шәйехзада Бабич поэтикаһында ана шундай төрлө функцияларға эйә булған рифмаларҙың, шиғырҙың музыкаллеген көсәйтеүсе поэтик яңғыраштарҙың бынамын тигән үрнәктәрен һәм ғәжәйеп төрлө комбинацияларын осратырға мөмкин. Бабич бында шиғри саралар менән шундай еңел һәм иркен эш итә ки, әйтәйек, төрлө таштар уйнатыусы виртуоз шикелле, уларҙы теләгәнсә сәсә, йыя һәм гәрәбәләр кеүек теҙеп сыға, кәрәк икән аҫыл таштар төҫлө төрлөсә йылтылдатырға хәленән килә.

Өҫтәүенә Бабич шиғырҙары, төп рифмаларҙан тыш, музыкалағы төп мотивты тултырып, көсәйтеп һәм нәфисләп барыусы өҫтәмә мотивтар, төрлө моң оттенoктары шикелле, өҫтәмә поэтик яңғыраштарға, эске рифмаларға ғәйәт бай. Мәҫәлән, уның иң тәүге поэтик әҫәрҙәренән һаналған «Эй китап» шиғырының түбәндәге строфаларын ғына алайыҡ:

*Эй китап, мин аңғыраны төҙ юлға күндерһәнә,*
*Мине баҫҡан йәһел утын һыу һибеп һүндерһәнә.*
*Һин йыуатҡыс, һин уятҡыс, һин миңә ысын атам,*
*Булмаһаң һин, мин һине һағынып ҡына сирләп ятам.*

*Эй китабым, эй китап, миңә ҡыл һин хитап,*
*Һин генә башымдағы сүп-сарҙы аларһың утап.*

Бында парлы тулы рифмаларҙы тәүге строфала «һ» өнө яңғырашы — аллитерация өҫтәмә яңғыраш менән ҡеүәтләп килһә, икенсе строфала был функцияны үҙ-ара ауаздаш «йыуатҡыс-уятҡыс» һүҙҙәре һәм «һин» һүҙенең өс тапҡыр ҡабатланышы атҡара, ә өсөнсө строфала эске рифма барлыҡҡа килә (китап-хитап). Шиғырҙың ритмик-интонацион музыкаллеген көсәйтеүсе, шиғри яңғыраштарҙың күҙәнәге булған «Аҡты һ ы у ҙ а р, ҡайҙа у й б а р — шунда һ ы у ҙ а р тулдылар...», «Ҡитте ҡ ы ҙ ҙ а р, төрлө һ ү ҙ ҙ ә р һөйләшеп гөл-гөл, тиеп...», «йәмйәшел ҡырҙар й ә ш ә р ҙ е, я р ҙ ы я п р а ҡ бар ағас...» тибындағы һүҙҙәр яңғырашы, ассонанс, аллитерация күренештәре — Бабичтең поэтик фонетикаһына бик характерлы нәмәләр.

*Бер ваҡыт сыҡтым урамға, өҫтә бишмәт елбәгәй,*
*Еләтеп, елберҙәтеп, елт-елт итеп барам, ағай!*

Бында һүҙҙәр тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең ишләнеп яңғырашынан хасил булған инструментовка рифма менән дә ярашып, шиғырҙың музыкаллеген йәнә йәмләй төшә.

Поэтик инструментовканан Бабич тауыш оҡшатымы алымын ҡулланырға бик әүәҫ:

*Ҡыт-ҡыт ҡыҭҡылдай тауыҡтар, ҡаҙҙар ҡаңғылдаша,*
*Ҡискә таба әллә ҡайҙа баҡалар баҡылдаша...*

Бабич, әйтәйек, «Тын төн» тигән шиғырында тауыш оҡшатымы аша шау һәм тынлыҡты тойоп-күреп белерҙәй, ғәжәйеп бер тамаша тыуҙырыу мөмкинлеген таба:

*Тын ғына, тып-тымыҡ бер төн ине...*
*Шишмәкәй сылтыр-сылтыр-сылтыр ине...*
*Йыраҡтан гөлдөр-гөлдөр арба килә,*
*Ул да тынлыҡты ҡуйыртыр өсөн генә;*
*Аръяҡтан бер эт өрә, ул шул тынлыҡты*
*Ҡолағыма ҡыуып кертеү өсөн генә...*

Бабич поэтикаһында инструментовка менән рифмаларҙың тығыҙ берегеп, ғәжәйеп мондар хасил итеүен, аҫыл таштар шикелле баҙлап һәм үтә күренмәле бу-

лып тороуҙарын күрер-ишетер өсөн уның был яҡтан бик үҙенсәлекле «Ямғыр теләге» тигән шиғырына туҡтамай ярамаç.

*Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр,*
*Беҙгә килеп яу, ямғыр,*
*Имсәктәрең һау, ямғыр,*
*Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!*
*Ямғыр, беҙҙе йәнләндер,*
*Һыуһаныҡ, һыуға ҡандыр,*
*Һәр ерҙән тамсы тамдыр,*
*Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!*

Әгәр тәүге строфала рәдифле тоташ рифма рәүешендәге яңғыраштар (яу, ямғыр — ау, ямғыр — һау, ямғыр — яу, ямғыр) беренсе һәм дүртенсе юлдарҙың эске яңғыраштары менән көсәйтелһә, икенсе строфала иһә хәҙер рефрен булып алған «яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!» һымаҡ теҙмәһе «һыуһаныҡ һыуға ҡандыр — һәр ерҙән тамсы тамдыр» инструментовкаһы менән ҡушылып, шиғырҙы бөтөнләй моңға күмә.

Шиғырҙың а-а-а-а схемаһындағы тоташ рифмаһы ун бер строфа буйынса үтеп, ритмик-интонация ағышын бер төрлө, талғын мелодия менән һуғарһа, рефрен уны күтәренкерәк бер тон аша тактлап бара. Рефренде лә шау — «яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!» рәүешендә генә түгел «яуһаңсы, бер, яу, ямғыр», «яу, яу, тимен, яу, ямғыр», «һип һыуыңды, һип, ямғыр», «Бул тиҙерәк, яу, ямғыр» тибында вариациялап та ебәрә. Былар иһә ритмик-интонацион ағышҡа йәнә яңы оттеноктар өҫтәй, үтенес-ялбарыу тонын көсәйтә.

*Хайуандарҙы ризыҡландыр,*
*Ризыҡтары — үләндер,*
*Үләндәрҙе сыландыр;*
*Яу, яу, ямғыр, яу, ямғыр!*

Строфалар эсендә һүҙҙәрҙе шулай үҙенсәлекле ҡабатлау — шиғыр юлы ниндәй һүҙ менән тамамланһа, шул һүҙ менән яңы юлды асыу, йәғни һүҙ теркәлеш (стык) ысулдары ла музыкаль яңғырашты ягымлай алалар.

*Сәлләне салдарса сал,*
*Һалманы һалдарса һал,*
*Алманы алма әле,*
*Алланы алда әле!*

*Алма, алма, алмаҡай,*
*Алда ла ал да тай,*
*Алда, унда — бал да май,*
*Алдалай, янъял ҡамай!*

(«Хәҙрәте Сүнчәләй рухына»)

Ә был ниндәй фонетик күренеш? Инструментовкамы, үтәнән-үтә рифмалашыумы, әллә ябай һүҙ уйнатыу ғынамы? Бында барыһы ла бар, ләкин инструментовканы һүҙ уйнатыуҙан, һүҙ уйнатыуҙы үтәнән-үтә рифмалаштырыуҙан һис айырыр хәл юҡ: улар тығыҙ үрелеп килгәндәр.

Шуҡ тәбиғәтле, йор һүҙле Бабич поэзияһына һүҙ уйнатыу, поэтик каламбур — бик характерлы момент. Ул кәрәк сағында омоним яңғыраштар, омоним рифмалар менән дә килешле шаярта белә:

*Ҡашың ҡара, күҙең ҡара, Сара туташ,*
*Күтәрелеп бисараңа ҡара, туташ!..*

*Ҡуйыныңа, Мәрйәм, ireңде ал да тирбәт, иркәлә,*
*Муйыныңа ҡул һалһа ситтәр, һал да ебәр елкәгә!*

Шағирҙең ҙур күләмле «Исемдәр баҡсаһы» һәм «Ҡитабеннас» әҫәрҙәрендә һүҙ уйнатыу, поэтик каламбур юмор-сатира сараларының иң үткене булып әүерелә. Бындай осраҡта ул кеше исеменә ҡарап оҡшаш һүҙҙәр яңғырашын табырға тырыша, шуның менән ул, бер яҡтан, теге йәки был кешенең бер сифатын хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп теркәй алһа, икенсе яҡтан, шиғырҙың ритмик-интонацион аһәңлеген тағы көсәйтеп ебәрә. Миҫалдар:

*Туҡтаров Мәхмүт түгел ул, туҡтамаҫ Мәхмүттер ул,*
*Туҡтамаҫ, тынмаҫ вә тындырмаҫ мәхлүктер ул...*

*Таһири — Таһир тиҙәр, исеме Һади — Һади, тиҙәр,*
*Мәғлүмәте артҡа ҡалған бер сабый абый, тиҙәр...*

Йәнә ауаздаш һүҙҙәрҙе рәт-рәт йәки парлы-парлы теҙә алыу Бабич поэтикаһының, — башҡорт халыҡ поэтикаһына хас булғанса, — үтәнән-үтә рифмалашыу ысулдарын барлыҡҡа килтерә. Юғарылағы миҫалдарҙағы яңғыраштарҙың күбеһе үтәнән-үтә рифмалашыу тенденцияһын тоталар.

*Дуҫтарым, торған еребеҙ тыуған ауыл, киң ауыл,*
*Барса ҡайғы, моңдарҙы юйған ауыл, тын ауыл.*

Бына бындай строфаларҙа ярым үтәләй рифмалашыу күренһә, түбәндәге типтағы строфаларҙа иһә шиғыр баштан-аяҡ парлы рифмалар менән һырыла:

*Айға мендем, ай нуры менән ҡойондом, уйнаным,*
*Күп һөйөндөм, һөйөнөс менән төйөлдөм, туйманым.*

Ләкин автор бындай үтәнән-үтә рифмалашыуҙы һис ваҡытта үҙмаҡсатҡа әүерелдермәй, бәлки уны, шиғырҙың иң характерлы строфаһында ҡулланып, шиғыр юлындағы һәр бер һүҙҙең мәғәнәһен һыҙыҡ өҫтөнә алырға тырыша. Ә бында ошо «Айға мендем» шиғырының икенсе строфаһында инде автор бөтөнләй икенсе төрлө комбинациялар таба:

*Туйманым, айҙан уҙып, мендем ҡояшҡа ашҡынып,*
*Юҡ, шулай ҙа булманы ташҡын күңелде баҫтырып...*

Автор, бер яҡтан, был строфаны тәүге строфаны тамамлаған рифма һүҙе «туйманым» менән башлаһа, икенсе яҡтан, беренсе юлдағы рифманы (ашҡынып) пары (баҫтырып) менән генә рифмалаштырып хушһынмай, бәлки юл уртаһындағы «ташҡын» һүҙе менән дә ҡушып, ғәжәйеп бер комбинация тыуҙыра. Бындай һирәк осрай торған күренеште шиғыр теорияһында круазе, йәки рифмалы хиазм тип йөрөтәләр.

Бабич, кәрәк тапһа, үтәнән-үтә рифмалашыуҙы дүрт юллы строфаларҙа еңел ҡуллана ала.

*Ярһынмаһа, күкрәк, йәшнәп күкрәп,*
*Телдәреңдә ялҡын яна алмай.*
*Аһ ормаһаң һыҡрап, тетрәп-тетрәп,*
*Ҡулдарыңдан алтын тама алмай.*

Ә «Бер минут» шиғырындағы түбәндәге строфаны үтәнән-үтә рифмалашыуҙың классик үрнәге тип һис шикләнмәйенсә әйтергә мөмкин:

*Там, минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып тор мәңгегә,*
*Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә.*

Бөтә шиғырҙың идея-эстетик квинтэссенцияһы булып торорҙай был строфала үтәнән-үтә рифмалашыу аша

һәр бер һүҙҙең мәғәнәһенә айырым иғтибар йүнәлеү менән бергә, «там, минең күҙ йәштәрем, там, там, тамып тор мәңгегә» һәм «ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә» теҙмәһенең шулай ҡабатланыуында гүйә тыпылдап күҙ йәше тамыуының һәм һулҡылдап йөрәк яныуының тауышы ла ишетелә. Ә шиғырҙың алдағы строфалары ошо һуңғы строфалағы һүҙҙәрҙең айышын һәм моңон тыуҙырыусы ҡабатланмаҫ юлдар улар.

*Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут,*
*Берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.*
*Бер минут бар донъяһын ҡарғап ҡабынды уттарым,*
*Янды, көйҙө, парса-парса булды меҫкен күкрәгем.*

Был юлдарҙа градация, киҫкен контраст алымдарында күңел-күкрәктең берсә янып, берсә туңып дөрләүе күҙ алдына килтерелә.

*Эйе, янды күкрәгем... Тик, юҡ, ләкин меҫкен түгел,*
*Был йөрәк — утлы йөрәк, үткен күңел, киҫкен күңел.*

Шул уҡ градация алымында «күкрәк, йөрәк, күңел» һүҙ-синонимдарын ҡабатлай-ҡабатлай характерлау бөтә диҡҡәтте ялҡын күңелгә йүнәлтә.

*Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән,*
*Ул яна, был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.*
*Ул яна... Сеү, һипмәгеҙ һыу; эйе ул янһын әле!*
*Янған уттар күҙҙәремдән йәш булып тамһын әле!*

Тимәк, был шиғырҙағы һүҙҙәр ҡабатланышы, һуңғы строфалағы үтәнән-үтә рифмалашыу күренеше йөрәк ялҡыны, хистәр ташымын бик үткен рәүештә еткереүсе йөкмәткеле шиғри-техник саралар тигән һүҙ ул.

Йәки бына «Әйҙә, күңелем» шиғырынан түбәндәге строфаны ҡарайыҡ:

*Әйҙә, күңелем, бында барма, күккә, күккә, күккә ос...*
*Күккә ос: күктә тыныс, бында һуғыш, бында ҡылыс.*

Бында «күккә» һүҙҙәрен бер-нисә тапҡыр ҡабатлау һәм «күккә ос» һүҙҙәрен рифмаға килтереү һәм шулар менән алдағы юлды башлау, «күккә ос — ҡылыс» һүҙҙәрен рифмалау, эске рифманы (тыныс — ҡылыс) контрас рәүешендә килтереү аша шағир империалистик һуғыш-

ҡа ҡаршы булған настроениеларын шиғри-техник саралар менән дә ҡеүәтләр ысулдар таба.

Әгәр бер осраҡта — һәр бер диҡҡәтте туплау кәрәк булғанда, Бабич һүҙҙәрҙе үтәнән-үтә рифмалап, уларҙы мәғәнә яғынан да, форма яғынан да үтә күренмәле итә алһа, икенсе осраҡтарҙа, бигерәк тә бер һүҙгә генә иғтибарҙы йүнәлтергә теләгәндә, уны ситке рифмаға килтереү менән дә ҡәнәғәтләнә. Ғөмүмән, Бабич рифмалар менән, уларҙың ғәжәйеп оригиналь комбинацияларын табып, рәхәтләнеп уйнай алһа ла, ул үҙмаҡсатлы рифмасы һәм рифма ҡоло түгел, әлбиттә.

Рифмаларҙы шундай уйнатҡан шағир ҡай саҡта, киреһенсә, рифмаларға бөтөнләй илтифатһыҙ ҡалған кеүек. Бына «Бер муллаға» шиғырынан бер миҫал:

*«Эстениһәң бөттөң!..» имеш, һуң үҙең ник эсәһең?*
*Әй кеше ҡайрап йөрөй торған ҡара ҡайраҡ ташы!*

Был строфала ысын мәғәнәһендәге рифма юҡ. Ләкин бында тышҡы рифма юҡлығы әллә ни һиҙелмәй ҙә, сөнки ул эске рифмалар (кеше — ташы, ҡайрап ҡара ҡайраҡ), аллитерация яңғыраштары менән ҡаплатылған. Шуға муллаға ләҡәп урынында килгән «ҡара ҡайраҡ ташы» уҡыусының ҡолағын ҡарпайтырға мәжбүр итә.

Йәки бына Бабичтың «Аңланым» тигән шиғыры бөтөнләй рифмаһыҙ. Бында һәр строфала «Белмәнем» тигән һүҙҙең ҡабатланыуы ғына бар. Тимәк, автор теләгән сағында шиғырҙың ритмик-интонацион аһәңлеген рифмалар, ассонанс, аллитерация, инструментовка кеүек поэтик фонетика күренештәре менән генә түгел, бәлки айырым һүҙҙәрҙе ҡабатлау, анафора, эпифора кеүек стилистик алымдар аша ла көсәйтә ала. Был хаҡта шағирҙың «Бер минут», «Ҡүңел», «Халҡым өсөн», «Салауат батыр», «Ҡурайҡайға», «Башҡорт халҡына көйлө хитап» кеүек шиғырҙары күп нәмә һөйләй.

Рифмалар тураһында һүҙҙе дауам итеп, Бабич шиғырҙарындағы уларҙың типтары бай һәм ярлы, тулы һәм кәм, рәдифле һәм ҡушма рифмалар хаҡында ла күп нәмәләр һөйләргә мөмкин булыр ине. Ләкин мәҡәләне һуҙмау өсөн был хаҡта дөйөм ҡараштар менән генә сикләнергә мәжбүрбеҙ. Юғарыла күрелгәнсә, бай яңғырашлы рифмалар, үтәнән-үтә рифмалашыу күренештәре, үҙҙәренән-үҙҙәре Бабичтың рифма типтарының нигеҙҙә бай

рифмаларҙан, күберәк ҡушма һәм рәдифле төрҙәренән торғанлығын раҫлай. Бабич шиғырҙарында ритм бик төҙөк булған шикелле, унда ярты-йорто рифмалар ҙа юҡ. Бабич рифмалары таснап, шаңғырҙап торалар. Ул хатта ҡылым рифмаларын да йырлатырға мәжбүр итә.

Бабичтың рифмалар менән виртуоздарса оҫта эш итеүенең йәнә бер ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле яғы — уларҙы төрлө шиғри ҡалыптарға һала алыуында. Әгәр ул шиғри юлдар эсендә үк рифманы эске рифмалар һәм төрлө яңғыраштар менән ҡеүәтләй алған икән, ул шиғыр юлдары араһында рифмаларҙың бай яңғырашының һәм төрлө комбинацияларының әллә ни хәтле формаларын һәм системаларын еңел таба ала.

Бабичтың иң һөйөп һәм иң киң ҡулланған рифма системаһының характерлыһы — парлы рифма. Көнсығыш классик поэзияһында, шулай уҡ революцияға тиклем татар һәм башҡорт поэзияларында ла киң урын алған был форманы — пар рифмалы ике юллыҡ строфаны ғәҙәттә мәснәүи тип атайҙар. Шәйехзада Бабичтың, мәҫәлән, Ә. Харисов тарафынан төҙөлгән «Һайланма әҫәрҙәр» китабына ингән йөҙ иллегә яҡын поэтик әҫәренең яртыһы ана шул пар юллы строфаларҙан — мәснәүиҙән (схемаһы а-а-б-б-в-в...) тора. Шағирҙың ҙур күләмле эпик әҫәрҙәре «Ҡитабеннас» менән «Ғазазил» шул уҡ пар юллылыҡҡа ҡоролған.

Ул саҡтарҙа ғына түгел, хәҙерге көндәрҙә лә башҡорт һәм татар поэзияларында һирәгерәк ҡулланылған сатраш (перекрестная) рифмалашыуҙы заманында Бабич активлаштырып ебәреүселәрҙең береһе булды. Шағирлыҡ таланты сәскә атҡан йылдарҙа яҙылған «Көтәм», «Гөл сәскәләре», «Ҡурайҡайға», «Ғәскәр маршы», «Күҙеңде ас» тибындағы шиғырҙары ана шул аралаш рифмалар менән һырылған. Айырыуса башҡорт халыҡ поэзияһында киң ҡулланылған синтаксик параллелизм алымын файҙаланғанда Бабич аралаш рифманы үтәнәнүтә рифмалашыу менән дә оҫта ҡушарлап ебәргеләй:

*Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,*
*Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;*
*Ныҡлы беләк беҙҙең уғын атһа,*
*Тейер төҫлө сулпан йондоҙға!*

Бындай форманы шағир теләй икән рефрендарға ла ялғап алып китә.

Йәки ул «Йәшәһен эшселәр!» шиғырында тоташ рифмалашыу ысулын шундай матур ҡороп, шуны рефренгә лә оҫта күсерә.

Дүрт юллы строфаларҙа шағир йәнә ҡаймалау (обрамление), беренсе, икенсе, дүртенсе юлдарҙы, икенсе — дүртенсе юлдарҙы рифмалаштырыу ише ысулдарҙы ла эшкә егә. Мәҫәлән:

*Тыш яҡтан йылмаңлап, дошмандар* а
*Төшкәндәр беҙ төшкән юл менән;* б
*Яҙыҡлы, ләғнәтле ҡул менән* б
*Беҙ ҡосҡан баланы ҡосҡандар.* а

(«Дошмандар»)

*Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар,* а
*Күп ырыуға баш йорттар;* а
*Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,* б
*Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.* а

(«Беҙ»)

Шағирҙың атаҡлы «Исемдәр баҡсаһы» әҫәре лә а-а-б-б схемаһындағы рифмалашыуға нигеҙләнгән.

Айырыуса халыҡ йырҙарында киң ҡулланылған икенсе — дүртенсе юлдарҙың рифмалашыуы Бабич поэтикаһы өсөн дә хас нәмә. («Минең фирештәм», «Әҡлимәгә», «Зөһрәгә», «Шәмсеҡәмәргә», «Икенсе ғинуар көнө», «Ни эшләй», «Башҡорт халҡына көйлө хитап» һ. б. шиғырҙар).

Ә дүрт юлдан ашыу шиғыр строфаларының рифмалашыу тәртиптәренә килгәндә, Бабич поэзияһында уларҙың ғәжәп бай һәм төрлө-төрлө комбинацияларын осратырға мөмкин. Бына ундайҙарҙың ҡайһы бер схемалары ғына: а-а-б-а-в-а («Юҡ», «Атланым эҙһеҙ» шиғырҙары); а-б-а-с-с («Аптыраған минуттарҙа»); а-а-б-б-б («Әсмә» китабындағы шиғырҙарҙы тәхмис»); а-а-б-б-в-б («Мин даһи»); а-а-б-в-а-б-г-г-г-г-г («Хәлебеҙҙән бер күренеш»); а-а-б-а-а-а-в-а («Уйҙар уртаһында») һ. б.

Башҡорт поэзияһына ҡобайыр жанрының бай рифмалар системаһын индереү асылда Бабич ижадынан башлана. Был яҡтан уның «Башҡортостан» һәм «Көтмәҫтән» тигән шиғырҙары бик үҙгә. Бабич ҡобайыр поэтикаһына ныҡ әһәмиәт бирә һәм уны яҙма поэзияла ижади үҫтереү хәстәрлеген күрә. Миҫал:

*Башҡортостан баҡсаһы —*
*Арыҫландар торған ер;*
*Арыҫландар баһаһы —*
*Ҡаһармандар йөрөгән ер;*
*Ҡаһармандар кәүҙәһен*
*Ҡосаҡлаған, күмгән ер;*
*Хәләл ҡандар шәүләһен*
*Күккә тәрсим ҡылған ер.*
*Башҡортостан — гөлбостан*
*Былбылыстан, нуростан,*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт тигән арыҫлан.*

Шағир бында ҡобайыр поэтикаһын тағы төрләндерә биреп, аралаш рифмалар ҡулланыу, ҡабатланған рәдифле юлдарҙы оҫта вариациялау менән генә сикләнмәй, бәлки төп рефренде лә дүрт юллы, бай биҙәкле итеп ҡойоп ҡуя. Ә артабан ошо рефрендең яңы вариацияларын табып, был юлдарға һалынған мәғәнәнең әле бер сифатын, әле икенсе сифатын аса бара («Башҡортостан — гөлбостан, рәйханыстан, нурбостан, «Башҡортостан — йәмбостан, илһамыстан, шиғрыстан» һ. б.).

«Ҡөтмәҫтән» шиғырында иһә автор, ҡобайыр формаһының предметте тәфсилләп характерлау йә иркенләп һанау мөмкинлегенән файҙаланып, рифмалауҙы тоташ— теҙмә рәүешендә типсей. (Схемаһы — а-а-б-б-б-б-б-в-в-в-в-а-а-А-А).

Бабичтың теҙмә рифмалы классик шиғыр формаларынан киң һәм ижади рәүештә таҫыллы ҡулланғаны — ғәзәл формаһы. Ҡлассик ғәрәп һәм фарсы поэзияһынан килеп ингән был форманы Бабич милли ерлектә артабан үҫтереп ебәрә, уны ҡай саҡта шиғырҙың бүтән төрҙәре менән дә йәтеш кенә аралаштырып алып китә.

Бына Бабич поэзияһына характерлы ғәзәлдең типик үрнәге:

*Төн тыныс үтһә, ҡасан да көндөҙөн дә ел сығар,*
*Көн тыныс үтһә, төнөндә суры Исрафил сығар.*
*Ел-дауылдар тыуҙырып, күк күкрәтеп ямғыр яуа,*
*Ҡырға сыҡ ямғыр һуңында — һәр туғайҙан һил сығар.*
*Яуһа ҡарҙар, туңһа боҙҙар, яҙ етер бер, боҙ китер,*
*Ер сығып, ер өҫтөнә үлән сығар һәм гөл сығар.*
*Гөл сығар сәскә атып, ҡырҙар булырҙар сып-сыбар,*
*Гөл йыйырға нурлы йөҙлө наҙлы нескә бил сығар.*

*Наҙлы ҡыҙҙың ҡырға сыҡҡанын күреп, шатлыҡ менән*
*Ҡаршылап ҡалмаҡ өсөн һайрап, матур былбыл сығар.*

(«Яҙғы байрамдар»)

Бында, аа—ба—ва—га—да рәүешендә рифмалашыу схемаһынан күренеүенсә үк, шиғыр гүйә баштан-аяҡ бер рифма менән һырып-типсеп сығыла. Ә «Исрафил — һил — гөл — бил — былбыл» рифмаларынан һуң гелән «сығар» һүҙенең ҡабатланып килеүе рифмалар яңғырашын тағы ла матурыраҡ итә. Бындай ҡабатланыусы һүҙ — рәдиф күренеше ғәзәл формаһына үтә характерлы элемент. Рәдиф шиғри интонацияға өҫтәмә нәфислек бирә, уның поэтик аһәңлегенә үҙенсәлекле бер моң бөркә. Шиғырҙың был рәдифле рифма сылбырынан хасил булған бай мондо, Бабич поэтикаһына бик хас булған эске рифмалар (яҙ етер — боҙ китер, үлән сығар — гөл сығар, гөл сығар — сып-сыбар — нескә бил сығар), һүҙҙәр яңғырашы (яуһа ҡарҙар, туңһа боҙҙар нурлы йөҙлө наҙлы), алрифма (төн тыныс үтһә — көн тыныс үтһә) кеүек поэтик фонетика күренештәре йәнә ҡуйырта.

Ғәзәл формаһында тигеҙ ағышлы рифмалар шауы шундай ҡеүәткә эйә, улар күп ваҡыт яҡынса рифмалар йә иһә юлдар төшөп ҡалыу ише ритмик ҡытыршылыҡтарҙы ла еңел ҡаплатып үтә алалар. Мәҫәлән:

*Белмәйем инде, ниңәлер гел моңланам,*
. . . . . . . . . . . . . . . . . .
*Ҡайғы-хәсрәт моң вә зарлыҡтар менән,*
*Юҡ тыныслыҡ, тулғанам да тулғанам...* һ. б.

Был «Монланам» тигән шиғырҙың икенсе юлы бөтөнләй төшөп ҡалған, ләкин ғәзәлдең берҙәй яңғырашлы рифмалар шауы һәм беренсе — дүртенсе юлдарҙың рифмалары шул бушлыҡты бик шәйләмәй ҡаплатып үтә.

Иң мөһиме: ҡобайыр поэтикаһы шикелле, ғәзәл поэтикаһының көслө яғы — рифмаларға иң әһәмиәтле, төп мәғәнә һалынған һүҙҙәрҙе иркен тура килтереү һәм юлдарҙы рәт-рәт теҙеү мөмкинлегенең киңлегендә. Әйтәйек, юғарыла килтерелгән миҫалдарҙағы рифмалар хәлваҡиғаларҙың һөҙөмтәһен белдергән һүҙҙәрҙе үҙҙәренә алғандар. Ә бына «Ҡөтәләр» шиғырында шағир ғәзәл рифмаларына ниндәй саҡта кемдең нәмә көтөүен — теләгән аңлатыусы һүҙҙәрҙе тура килтерә (ел көтә — ул көтә — сир көтә — тир көтә — мир көтә — Ябраил көтә һ. б. ш.).

Унан, Бабич, ғәзәлдең ҡалыплашҡан ҡанундарын тотҡан хәлдә лә, ул форма ҡоло түгел. Ул, мәғәнә талабына ҡарап, кәрәк мәлендә рифмаларҙы алыштырыуҙан да тартынмай, бер шиғырҙа ике рифма системаһын аралаштырып ебәреү ҙә уға сит күренмәй.

Был яҡтан уның «Йырсыны көткәндә» шиғыры бик ҡыҙыҡлы. Был шиғырҙа асылда ике ғәзәл формаһы — ике рифма системаһы аралаша. (Схемаһы: а-а-б-а-в-а-г-г-д-е-ж-г). Ул шул ваҡытта бер бөтөн шиғыр: уның тәүге строфаһы шуның ихтималы рәүешендә. Тимәк, бында ғәзәл жанрының айырым юлдар араһындағы мәғәнәүи мөнәсәбәте строфалар араһындағы мәғәнәүи мөнәсәбәткәсә үҫтереп ебәрелгән тигән һүҙ. Һөҙөмтәлә ғәзәлдең яңы формаһы — комбинацияһы, яңы мөмкинлектәре барлыҡҡа килтерелгән.

Ә бына «Халҡым өсөн» тигән шиғырында Бабич тағы алғараҡ атлай. Ул нигеҙҙә ғәзәлгә хас берҙәй рифмалашыу принцибын һаҡлаған һүрәттә лә шиғыр үлсәүен һәм строфаларын өр-яңыса ҡора:

*Ап-аҡ алтын йырҙарымды*
*Йырламайым данлыҡ өсөн;*
*Йырлайым алтын илем өсөн,*
*Үҙ туған халҡым өсөн.*
*Саф көмөштәй йырҙарымды*
*Йырламайым алтын өсөн;*
*Йырлайым тик саф көмөштәй*
*Саф йөрәк халҡым өсөн.*
*Сәскә төҫлө йырҙарымды*
*Йырламайым зәүҡым өсөн;*
*Йырлайым тик сәскәләй*
*Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.*
*Дәртле ҡайнар йырҙарымды*
*Йырламайым дәртем өсөн;*
*Йырлайым тик мәңге шат,*
*Дәртле, көләс халҡым өсөн...*

Күренеп тора: шиғыр дүрт юллыҡ 8—7 ижекле үлсәүҙәге йыр формаһында. Ләкин куплеттар берләшеүе, рифмалар сылбыры — ғәзәлдәгесә. Бында шул хосусиәт тә бар: шағир һәр куплетты антитеза алымына ҡора һәм синтаксик параллелизм стилистикаһын һәр куплетта ҡабатлап килә. Әммә был стилистик сара арҡыры төп мәғәнәне — «йырҙарым» һәм «халҡым өсөн» һүҙҙәрен үҙгәрешһеҙ ҡалдыра килгән тәҡдирҙә лә, шағир һәр куп-

летта ул һүҙҙәрҙең яңы сифатын белдереүсе эпитет-сағыштырыуҙар менән биҙәп-нәфисләп бара («Ап-аҡ алтын йырҙарым, саф көмөштәй йырҙарым, сәскә төҫлө йырҙарым, дәртле ҡайнар йырҙарым; үҙ туған халҡым өсөн, саф йөрәк халҡым өсөн, ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн, дәртле көләс халҡым өсөн»... һ. б.).

Ҡушма рәдифле рифма үҙе лә мәғәнә һәм форма яғынан тығыҙ үрелешле ҡабатланыуы менән рефрен төҫөн ала. Ул да ҡалыплашҡан рефрен түгел — вариациялы рефрен.

Ғәзәлдең рифмалар системаһын йәтеш төрләндереү моменттарын шағирҙың «Матур һындар», «Ғәмле көн» кеүек шиғырҙарында ла күрергә мөмкин. Һәр хәлдә Бабич боронғо ғәзәлдең, шулай уҡ ҡасидәнең йомолоп ятҡан мөмкинлектәрен эҙләү, рифмалашыуҙы төрләндерә төшөү, милли поэтик үҙенсәлектәргә яйлаштырыу йүнәлешендә новаторҙарса эш итә.

Бына ул «Бер эсеүсенең зары» тигән шиғырын Дәрдемәндтең «Үткән көндәр» исемле шиғырында ҡулланылған алымдарға оҡшатып башлай ҙа, етенсе строфанан ғәзәл формаһын үҙгәртә биреп, а-а-а-б-а-а-в-г-а тәртибендә ослап ҡуя. «Әсмә» китабындағы шиғырҙарҙы Риза Фәхретдиновтың «Әсмә» тигән хикәйәләр китабына (Ырымбур, 1903) Дәрдемәндтең юғарыла килтерелгән ғәзәл формаһындағы шиғырына һәр пар юл һайын өсәр юл өҫтәп — строфаны тәхмисләп (биш юллы итеп), уға бөтөнләй яңы йөкмәтке һәм форма һала:

*Әй, ҡайҙа ул көн ки — беҙҙә шәп тороуҙар бар ине,*
*Ырҙын артында, яланда әйттереүҙәр бар ине;*
*Әйттерә торғас, ҡыйнауҙар, теш төшөүҙәр бар ине.*
*Өйгә ҡайтҡас, арҡаларҙы ышҡыусылар бар ине;*
*Әммә дошмандарҙа ғәмдәр, эс бошоуҙар бар ине...*

Бабич поэзияһының хатта бер үк үлсәүҙәге шиғырының ритмик-интонацион үҙенсәлектәре, рифмалар системаһы, поэтик фонетикаһы шундай төрлө һәм бай ул, әгәр автор ниәтләнһә, уларҙы йәнә бишкә төрләндерергә ҡулынан килә. Бына бер генә миҫал:

*Күктә алла,*
*Ерҙә иблес,*
*Мин — малай.*

*Береһе «дин» тип,*
*Береһе «мин» тип*
*тарткылай.*
*Белмәйем:*
*Әллә алла,*
*Әллә иблис*
*Алдалай?!!*

Асылда ун бер ижекле үлсәүҙән торған өс юл булырҙай строфаны шағир, юлдар эсендәге ритмик төркөмдәрҙең аныҡлығынан, цезуралар тотороҡлоғонан, эске рифмалар һәм поэтик яңғыраштар байлығынан оҫта файҙаланып, цезураларҙы шиғыр юлы аҙағына килтерә, уларҙы йә рифмалар, йә яңғыраштар менән нығыта, һөҙөмтәлә күп юллы өр-яңы строфа хасил итә. Ул цезуралар араһын шундай иркен тота, хатта, теләй икән, шиғыр ритмын һис боҙмаҫтан үлсәүҙән тыш ижектәр өҫтәп ебәрергә хәленән килә. (Был шиғырҙа «белмәйем» һүҙе тап шундай өҫтәмә).

Шиғыр оҫтаһы Шәйехзада Бабичтың рифмалар системаһы, поэтик фонетикаһы хаҡындағы ҡайһы бер күҙәтеүҙәребеҙ ошонан ғибәрәт. Былар әлбиттә, уның ғәйәт бай һәм төрлө поэтик системаһының бер кескәй генә моменты. Шағирҙың поэтик арсеналын, шиғри техникаһын тулай өйрәнеү — үҙе бер хазина иленә мауыҡтырғыс сәйәхәт. Ул хазинала бер үк поэтик деталдәрҙең, аҫыл таш төҫлө, әле бер, әле икенсе төрлө ялтырап китеүҙәрен күрергә мөмкин. Шуға күрә Бабичтың шиғриәт донъяһына әҙәбиәтселәребеҙҙең генә диҡҡәт итеүе түгел, ә йәш шағирҙәребеҙҙең күҙ һалыуы, поэтик оҫталыҡҡа өйрәнеүе лә ифрат мөһим нәмә.

*Ә. М. Сөләймәнов,*
филология фәндәре докторы, профессор

# БАБИЧ ИЖАДЫНДА ХАЛЫҠ ЙЫРЫ ҺӘМ АФОРИСТИК ФОЛЬКЛОР БАШЛАНҒЫСТАРЫ

Ҡесе йәштән халыҡ ижады стихияһында, фольклорса фекерләүселәр мөхитендә йәшәү, шул мираҫтың гүзәл өлгөләрен йыйыу Ш. Бабичтың ижады өсөн эҙһеҙ үтмәй. Был бүлектә айырым фольклор жанрҙарының ҡулланылышы ҡараласаҡ.

## 1. «ЙЫРҘАР ЯҘАМ, ЕЛКӘЙ, ИҪМӘЙ ТОР...»

Бабичтың шиғырҙары йыр кеүек еңел уҡымлы, йыр кеүек, үҙенән-үҙе көйләнеп, көйгә тартылып тора. Иң әүәл уларҙа халыҡ йырҙарына хас традицион һүрәтләү саралары — эпитет, метафораларҙың ҡулланылышын билдәләп үтмәк кәрәк. Был билдәләр йыш ҡына бер формула төҙөп алып ойошоусандыр. Фольклор ғилемендә (Г. Р. Хөсәйенова) «Матурлыҡ формулаһы» тигән термин ҡулланыла. Ҡыҙ матурлығы хаҡында һүҙ барғанда, Ш. Бабич ана шул алымды ихлас ҡулланыусан. Ҡыҙ матурлығын шағир йыш ҡына халыҡ йырҙарындағыса ҡашының нәҙеклеге, ҡаралығы, күҙенең төҫө, тешен аҫыл ташҡа оҡшатыу менән билдәләй:

*Һыҙылып төшкән нәҙек тылсым ҡашҡа*
*Ай нурҙары яуып һырышҡан.*
*Әллә ынйы, яҡут, әллә башҡа*
*Теҙелеп төшкән тештәр бер иштән.*

(«Минең фәрештәм»)

*Ҡашың ҡара, күҙең ҡара, Сара туташ,*
*Күтәрелеп, бисараңа ҡара, туташ.*

(«Исемдәр баҡсаһы»)

Һөйкөмлөлөк төшөнсәһен, һөйгәнен фәрештәгә, солтанға тиңләү аша биреү алымын да үҙ итә шағир.

*Зәңгәр күҙкәйҙәрен зәңгәрләтеп,*
*Гүзәл ҡарай минең фәрештәм.*

(«Минең фәрештәм»)

*Һылыубикә — һылыу туташ, ҡыҙ солтаны,*
*Бит уртаңда ҡара миң бар — бит сулпаны.*

(«Исемдәр баҡсаһы»)

Матурлыҡ төшөнсәһен биргәндә, шағир йырҙарға хас тағы шундай алымды ҡуллана: миңенең, ауыҙы, ирендәренең килешле булыуын йырлай, битен бешкән алмаға тиңләй.

*Мәрйенбикә, иренең — мәрйен, ауыҙың уймаҡ.*
*Мөмкин түгел ул ауыҙҙы үбеп туймаҡ.*

(«Исемдәр баҡсаһы»)

*Алмагөл, аһ, бешеп еткән алмалы бит,*
*Иманлы бит, илһамлы бит, аллаһы бит.*

(1, 231 б.)

Ш. Бабичтың шиғырҙарына халыҡ йырҙарынан үтескә алынған юлдар, хатта строфалар килеп ингеләүсән. Фольклор ғилемендә бындай саҡта «цитаталау алымы» тигән билдәләмә ҡулланалар. Әммә Бабичта фольклорҙан килгән бындай башланғыс «автор телмәре» менән тәбиғи үрелеп, унан айырылғыһыҙ хәлгә инә һәм шиғыр алға һөргән идея-эстетик бурысты үтәшә.

«Ситлектәге һандуғас янында» (1915) шиғыры һандуғасҡа мөрәжәғәт рәүешендә яҙылған. Ҡошсоҡ — ситлектә, егет — моң-һағыш сорналышында. Һандуғас — өнһөҙ, егет, үткән ғүмерен уйлап, йырлай. Егеттең һағышланыуы яҙ етеү менән дә бәйле, ә ҡошсоҡ һаман өнһөҙ. Шағир уға үткән ғүмере өсөн генә түгел, киләсәк хаҡында ла йырлай:

*Ҡараһана, былбыл, ситлегеңдән:*
*Урал тауы тора күгәреп,*
*Шул тауҙарға ҡарап, мин йырлайым,*
*Үйҙарымды йыраҡ ебәреп, —*

ти, әйтерһең дә, ситлегендә ярма ярыусы өнһөҙ, йәғни туҡ, мәгәр моңһоҙ ҡошсоҡто сәмләндерергә теләй: һағышлы булһаң, һағышлы бул, әммә ирекһеҙ булма. Ошо фекерҙе үткәреүгә, аңлашылыуынса, 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүерендә сыҡҡан «Эскадрон» йырының бер строфаһын алған, тик бер аҙ үҙгәртмә менән. «Эскадрон»дың китапҡа ингән вариантында дуҫҡа мөрәжәғәт ителә («ҡараһана, дуҫҡай, ҡараһана»). Йырҙа өсөнсө юл — яуға китеүсе эскадронаштарға мөрәжәғәттән тора: «Уралтауға ҡарап, бер йырлайыҡ!», — ә Бабичта «мин» исеменән һүҙ алып барыла «мин» «һин»де һандуғасты сәмләндереүҙе көсәйтә. Шулай ҙа төп пөсхәләге «дуҫтар»ҙы, «былбыл» менән алмаштырыуы — тынып ҡалһа ла һайрар ҡошто шағирҙың үҙ күреүенә, дуҫ күреүенә ишара.

«Эскадрон» йыры — ирек даулап Француз яуына китеүселәр йыры. Шағирҙың саф лирик шиғырына ҡаһарманлыҡ, ватансылыҡ идеяһы менән һуғарылған ошо ирек йырынан өҙөк индереүе осраҡлы түгел: ул, моңһоу булһа ла ирекле булыуҙы туҡ, ләкин эсирлектән өҫтөн күреүҙе раҫлау өсөн, кәрәк булғанға оҡшай. Етмәһә, йырҙа ла һандуғас образы бар.

*Урал ғына ҡошо, ай, һандуғас,*
*Ат менгәндә моңло һайраның.*
*Ҡындан алып алмас ҡылысымды*
*Урал ташҡайына ҡайраным.*

(2, 74-се б.)

Шулай итеп, Ш. Бабич туранан тура сағыштырыу, йәнәшә ҡуйыу, алымына мөрәжәғәт итеп тормайынса, патриотизм идеяһын алға һөргән халыҡ йырының бер строфын файҙаланыуы ярҙамында ғына ла, ил азатлығы идеяһы менән рухи азатлыҡ араһындағы айырылғыһыҙ бәйләнеште раҫлай.

Халыҡ йырҙарында, ғәҙәттә, строфаның тәүге ике юлы тәбиғәт күренештәре, уларға мөнәсәбәт хаҡында һүҙ алып барыла, әммә шул фекер икенсе, өсөнсө юлдарға һалынғанына мөнәсәбәтле булмаусан (Мин бында

йәнәшәлек, сағыштырыуы принцибына ҡоролған строфаларҙы иҫәпкә алмай торам). Мәҫәлән:

*Йылға ғына буйы, ай, ҡыҙыл яр,*
*Ҡыҙыл ярҡайҙарға һыуға бар.*
*Онотола, тиеп, әйтһәләр ҙә,*
*Онотолмай икән һөйгән йәр.*

(«Ҡыҙыл яр»)

*Ҡүктә генә болот, ай, йөрөйҙөр,*
*Ерҙә генә ҡырау ирейҙер.*
*Йөрөмәсе, йәнем, күҙ алдымда,*
*Күҙ алмаҡайҙарым ирейҙер.*

(«Ҡүктә генә болот»)

Шуның менән бергә өсөнсө, дүртенсе юлдар тәүге ике юлда әйтелгәндәргә мәғәнәүи яҡтан бәйләнеп килеүен дә үҙ итә халыҡ йыры:

*Ыласындар сөйҙөм, әй, үрҙәккә,*
*(Ы)ласындарым китте һауалап.*
*Ыласындарым кире ҡайтыр, тип,*
*Ҡарап торам, ҡулым болғалап.*

(«Ыласын көйө», 2, 233-сө б.)

Ш. Бабичтың «Ситлектәге һандуғас янында» тигән шиғыры һуңғы миҫалдарҙы хәтерләтә:

*Йөрәгемдә янған һағыштарҙы*
*Һиҙҙең мәллә, моңло һандуғас?*
*Мин йырламай, былбыл, кем йырлаһын,*
*Йөрәк ялҡындарым ҡабынғас.*

(1, 101-се б.)

Шағирҙың «Гөл сәскәләре», «Яҙғы йыр» ише шиғырҙары ла ошо уҡ принципты үҙ итә һәм халыҡ йырҙарын хәтерләтә. Етмәһә, уларҙа ла билдәле халыҡ йырҙарынан ижади үҙләштерелгән строфалар күҙгә ташлана:

*Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә*
*Йырҙар яҙам; елкәй, иҫмәй тор.*
*Шишмәкәй, тын, аҡрын... сеү, шаулама,*
*Үткән ғүмерем, иҫкә төшмәй тор.*

*Сылтырап аҡҡан шишмә буйҙарында,*
*Аһ, мин йөрөнөм былтыр кем менән?*
*Шул саҡтарҙы, шишмә, алып аҡтың,*
*Ҡалдым һыҡрап ауыр моң менән.*

*Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,*
*Зинһар, тимен, елкәй, иҫмәй тор.*
*Йомол, гөлкәй, йомол бер минутҡа,*
*Минең күҙҙәремә төшмәй тор.*

(3, 285-се б.)

Бында өс нәмә иғтибарҙы тарта. Елгә, һуңғы өндәшеү — генетик яҡтан тәбиғәт көстәрен йәнләндереп, илаһилаштырып күҙ алдына килтереү һөҙөмтәһендә тыуып, аҙаҡ эстетик, ихтыяжға ҡулайлашып, халыҡ йырҙарында поэтик биҙәккә, орнаментҡа әүерелгән һағыныуҙарҙы хәтерләтә. Шағир, «елкәй, иҫмәй тор» тигән әҙер калькаңы ҡулланып, һиллек, тынлыҡ теләүен белдерә. Ә ул — иғтибар туплауға, йыр яҙыуға шарт һорау. Шул сәбәптән ул хатта матурлыҡ символы булған гөлдөң дә йомолоуын теләй. Ә был иһә — илһамлы мәлдең, йыр, шиғыр тыуыу мәленең, бөтәһенән мөһим булыуын төшөндөрөү. Быныһы бер. Икенсенән халыҡта:

*Мендем дә генә тауҙың, әй, башына*
*«Аллаһеүә» яҙҙым ташына.*
*Аллаһеүә генә ғәзиз рахман*
*Ниҙәр булыр яңғыҙ башыма? —*

тигән йыр билдәле.

«Илсе Ғайса» йырында был строфа:

*Йүгереп мендем тауҙың, эй, башына*
*Ял иттем дә, ултырып ташына.*
*Һау-сәләмәт ҡайтһам тыуған илгә,*
*Тарих яҙыр инем ташына, —*

тип күскән. Ш. Бабич иһә, тауҙың күкрәгенә күтәрелеү менән, йыр яҙыу тураһында һүҙ алып бара: «Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә, Йырҙар яҙам, елкәй, иҫмәй тор...» Ошо юлдар, ирекһеҙҙән, Абдулла Албиндың хәтирәләрендәге бер мәғлүмәткә яңыса күҙ һалырға мәжбүр итә. 1918 йылдың мартында Ейәнсура төбәгендәге Юлдаш ауылынан Ергәйеш (Әбеләйес) ауылына Бабичты

алып китеп барғанда, уларға Аҡтау аша үтергә тура килә. А. Албин шулай тип яҙа: «Аҡтау башына менеп еттек һәм унда аҙыраҡ ял итергә булдыҡ. Бында Бабич башта оҙаҡ ҡына тирә-яҡҡа һоҡланып ҡарап торҙо. Һоҡланырлыҡ та шул беҙҙең көньяҡ Урал тәбиғәте! Шунан ул ултырып ниҙер яҙа башланы. Яҙып бөткәс уҡып күрһәтте» (4, 277-се б.). Шағир яңы шиғыр яҙған була. Тауға күтәрелеү — офоҡтар киңәйеүе. Киңлек — ireклек — ирек. Был төшөнсәләр Бабич өсөн бер-береһенән айырылғыһыҙ. Айға, унан үтеп ҡояшҡа, артабан «хоҙайҙың ғәршенә» ынтылыуы — шуның образлы әйтелеше генә. Шуға ла тауҙың күкрәгендә йыр яҙыусы — уның түбәһенә етер-етмәҫтән киңлеккә хозурланыуы, шул сәбәптән ижади илаһи мәл — илһам кисереүен әйтеүелер ул.

Өсөнсөнән, ике шиғыр ҙа 10—9 үлсәме менән яҙылған. Был йәһәттән дә улар башҡорт халыҡ йырҙарын хәтерләтә. Беҙгә шул мәғлүм: бөйөк урыҫ шағиры А. С. Пушкин үҙенең шиғырҙарын телдән әйтә-әйтә яҙыр булған. Ш. Бабич иһә көйләп яҙғанға оҡшай: 10—9 үлсәмлеләрен — оҙон көйгә, 8—7 үлсәмлеләрен — ҡыҫҡа көйгә. Һәр хәлдә, хәтирәләрҙә был фараз файҙаһына байтаҡ миҫал табырға була. Әсән ауылында ут күршеһе Ҡәшфелбаян Ғиззәтуллиндың хәтирәләренән шуны беләбеҙ. Бала сағында, уларға уйнарға кергәнендә, Шәйехзада:

*Уҫаҡ, ҡайын ағастары*
*Елгә ҡаршы тирбәлә;*
*Йырлағас та сығып китәм —*
*Биби әбей, тиргәмә, —*

тип, сыҡҡанында:

*Биби әбейҙе яратам,*
*Әсәкәйем шикелле.*
*Биби әбей, һау булығыҙ,*
*Элеп ҡал ишегеңде, —*

тип йырлар булған (4, 54-се б.). Аңлашылыуынса, ҡыҫҡа йыр үлсәменә (8—7) нигеҙләнгән был куплеттарҙы үҙе импровизациялаған. Был ҡылығын ул үҫмер дәүеренә ингәс тә, егет булып еткәс тә ташламаған. Ҡаҙаҡтар араһында йөрөгәнендә, ҡаҙаҡ аҡындары менән әйтешкә сыҡҡанда, «бер ҡаҙаҡ туйында, кейәү менән ҡыҙ алдына сығып, мандолина уйнап, уларҙы маҡтап» йыр-

лағанда (Т. Ченәкәй, 4, 151-се б.), ул, әлбиттә аудиторияның составын, кәйефен, башҡа шарттарҙы иҫәпкә алып, экспромт шиғри куплеттар импорвизациялаған. Әйтештә бушҡа еңгән тиһеңме лә. Шул еңеүе өсөн ҡиммәтле шарф, ҡиммәтле түбәтәй (Т. Ченәкәй, 4, 151-се б.; Шәйхел Вахитов, 7) менән бүләкләнеүе лә, туйҙа ҡыҙҙың ағаһы «тиле кеше әйтмешләй, бер кәпәс аҡса» йыйып биреүе лә бушҡа тиһеңме (Фәтхелҡадир Бабичев, 4, 30-сы б.).

1917 йылдың йәйендә Ырымбурға «Ҡармаҡ» журналына эшкә килеп, Төхфәт Ченәкәй менән осрашып, бер самауырҙы бушатҡас та, мандолина сиртә-сиртә, уға 8—7 үлсәмендәге халыҡ йыры традицияһында «Һандуғас — күгәрсен» көйөнә йырлап ебәрә:

*Самауырың һары икән,*
*Мөрйәләре тар икән.*
*Ченәкәй менән күрешеп,*
*Һөйләшер көн бар икән...*

(Т. Ченәкәй, 4, 141-се б.)

«Халҡым өсөн» тигән шиғырын иһә «Ҡаҙ ҡанаты» көйөнә йырлар булған (Ғ. Дәүләтшин, 14, 297-се б.) Ш. Бабичтың байтаҡ шиғырҙарының исеме аҫтына ниндәй көйгә башҡарылыуы күрһәтелгән. Әле 1910 йылда фажиғәлек пафосы менән һуғарылған бәйет стилендә яҙылған «олаҡтырылған бесәй» тигән өйрәнсек шиғырының «Зиләйлүк» көйөнә башҡарылырға тейешлеге күрһәтелгән. Болалы 1917—1919 йылдарҙа ижад ителгән «Ғәскәр маршы»на — «Эскадрон» көйөнә, «Салауат батыр»-ға, «Үҙ көйөнә» тигән иҫкәрмә бирелгән.

Башҡорт ғәскәрҙәренең Совет яғына сығыуы айҡанлы яҙылған «хитаб»ының да көйләп әйтелергә тейеш икәне хатта, иҫкәрмә рәүешендә генә түгел, әҫәрҙең исеменә үк сығарылған: «Большевиктар менән килешеү туралы башҡорт халҡына көйлө хитап» (1, 287—296-сы б.). «Йәшәһен эшселәр!», «Башҡортостан» көйө хаҡында күрһәтмә лә, иҫкәртмә лә юҡ, әммә заманында уларҙың йырланып йөрөүе мәғлүм. Мәҫәлән, БДУ-ның 1976 йылғы фольклор экспедицияһы ваҡытында Учалы районы Науруз ауылында йәшәгән Солтанова хәтерләүенсә, «Башҡортостан» шиғырын мортазинсылар поход йыры рәүешендә йырлап йөрөр булған. Әбей уны үҙе лә көйләп, йырлап ишеттергәйне.

Борон теҙмә телмәр һәр саҡ назым менән, көйгә һалып әйтелер булған. Мулла йортонда тыуған Шәйехзада, әлбиттә, Аҡмулла, Туҡай шиғырҙарын көйләп уҡығанды, тик көйләп башҡарылыр мөнәжәт, бәйеттәрҙе тыңлап үҫкән. Шуға ла үҙенең тәүге шиғри импровизацияларын да көйләп әйткәндер. Әммә иҫкегә иҫе китеп бармаусан булып үҫә килә, халыҡ ижады менән таныша, йырсылар, ҡурайсылар, башҡа музыканттар менән аралаша торғас, традицион көйләп уҡыуҙан йырлап иштеттереүгә күскеләй башлаған, тип уйларға кәрәк. Ошо йәһәттән уның бер яҙмаһы фәһемле. Яҙырға теләп тә, яҙылмағанды, ҡулға ҡәләм алып, аҡ ҡағыҙға терәп тә, килеп сыҡмаһа, Ш. Бабич йырлап алыр булған. Шондай саҡтарын ул үҙенең «Сәфәр алдынан» (1917) тигән яҙмаһында бик ентекләп тасуирлаған. Шағирҙың кисерештәре, ижад лабораторияһы хаҡында фәһемле мәғлүмәт булғанлыҡтан, яҙмаһындағы шул урынын тулы килеш килтерәм: «Ҡайҙан тотоп башларға? Яҙырға тиһәң (хикмәт кемгә лә шулаймылыр?), ҡайҙан тотоп башларға белмәй, йөҙәп бөтәһең. Башына, берҙән, бинниһая сыуалсыҡ тәьҫорат һәм сыуалсыҡ әфкяр килеп төшә лә, мәжмуғаһынан бик ҙур бер «кәбәк томаны» хасил була. Ул томан йә башыңды ауырттыра, йә эсеңде бошора, йә өмөтһөҙлөк тыуҙыра... Ҡала бер генә нәмә: ҡәләмде ырғытырға, ҡағыҙҙы йыртырға, шунан һуң йә тороп йөрөргә, йә аҡрынлап йырлай башларға!

Шулай бер мәртәбә ҡәләм тотоуҙан ҡағыҙға бер нәмә лә таммағас, башҡа тулған томанды тарҡатыр өсөн, иплән кенә тороп йөрөй башланым. Йөрөй башлағас та, ҡулдар салбар кеҫәһенә инде. Бик тәбиғи нәмәләр ки, салбар кеҫәһенә ҡул керҙеме, дәррәү ирендәр яҡ-яҡлап бөрөлөп йыйыла ла ауыҙ ослайып алға сыға. Керешәһең иплән кенә һыҙғырынырға, унан ыңғырашырға, унан йырларға... Шулай ауаздар өрөлөп, тәдрижи рәүешендә (әкрен генә. — Ә. С.) йырлау хәленә еткәс тә, хәлгә монасиб (тура килә торған. — Ә. С.) йырҙы табып, йырҙы йырлай башлайһың:

*Яҙаһылай һүҙҙе, ай, яҙалмайым,*
*Ни булды икән минең ҡәләмгә?..*

Күҙ алдымда дәртләнеп аҡҡан һыуҙар, күкрәп торған урмандар мине мыҫҡыл итteләр:

*Яҙаһы ла һүҙҙе яҙалмайым, тип,*
*Йырлау оят дәртле әҙәмгә.*

Юҡ, ни булһа ла булһын, яҙам тигәс, яҙам! Ҡурҡып-нитеп торорға, Ҡөрьән тәржемәһе түгел әле ул хәтле!» (1, 506—507-се б.)

Шағирҙың был һүҙҙәренән шул һәйбәт аңлашыла. Яҙа алмай интеккән ваҡытын ирониялап тасуирлап, ул йыр-көй ярҙамында үҙен мәжбүр итә. Быныһы — бер булһа, икенсенән, үҙ «хәленә монасиб» йыр (тимәк, шиғыр) шул йыр үлсәменә, ритмына, ауазына, моңона тура килеп тыуа.

Үҙе яҙған шиғырҙарын «үҙ йырҙарым» тип атауына иғтибар иттерге килә. Былай тип әйтеүенең әрсеһе шул: Бабич үҙенең шиғырҙарының көй ритмына тура килеп тыуыуын таныған. Тимәк, оҫта мандолинасы, йырсы булараҡ, шиғырҙарын көйләп әйтеп яҙыуы бик тә ихтимал ғына түгел, шулай ижад иткеләгән тип раҫлай алабыҙ. Әлеге йырға тышҡы поэтик биҙәк оҡшашлығы, халыҡ ижадынан үҙләштерелгән айырым мотив, куплеттарҙан тыш эске мелодик-ритмик яҡтан яҡынлыҡ шуның менән аңлатыла торғандыр.

## 2. «ҠӨРЬӘН ҺҮҘЕ ҠЕҮЕҠ МӘҠӘЛДӘР БАР»

Ш. Бабич мәҡәлдәр яҙып алып йөрөр, бер мәҡәлгә лә тәтәй тапҡан сабый кеүек ҡыуанып, үҙенең публицистик яҙмаларында, һирәкләп булһа ла әҫәрҙәрендә лә, мәҡәлдәрҙе ижади файҙаланыр булған.

«Мәҙрәсәи Ғәлиә»нең ун йыллыҡ байрамы» («Ҡармаҡ» журналының 1916 йыл 8—9-сы һандарында «Шөпшә» имзаһы менән баҫылған) тигән мәҡәләһендә Өфө байҙарының байкоты арҡаһында, 9-сы йыл эшләгән мәҙрәсәнән ҡайһы бер мөғәллимдәрҙең «Ғосмания»ға барып һыйыныуын дөйөм «30 миллион татар» (йәки төркиҙәр) мәнфәғәте күҙлегенән баһалап: «Бәрәкалла, бик рәхмәт... Арба ватылһа — утын, үгеҙ үлһә — ит, тигәндәй, милләткә файҙа ғына бит ул... Исмаһам, ике ерҙә ике «Ғәлиә» береһенән-береһе уҙҙырырға тырышыр. Бына шулай иттереп, ҡаш төҙәтәм тип күҙен сығарған кабилендан (төркөмдән. — Ә. С.) ике «Ғәлиә» бер-береһен уҙам ти торғас, милләтте тәрәҡҡый иттереп (йыйып. — Ә. С.) ҡуйырҙар әллә ҡайҙа...» (1, 447-се б.). Йәнә бер миҫал. «Әйтеп уҙайым» тигән мәҡәләһендә: «Йырҙарымды үҙем бик яратам», — тип тора ла, «үҙемдеке үҙемә

бик яға», — тип, тәүге тезисын асыҡлай: ярата, сөнки яҡын. Уның менән генә сикләнмәй, артабан бабайҙарыбыҙ. Туҡай әйткән мәҡәлдәргә һылтана (1, 431—432-се б.).

Күреүебеҙсә, Бабич, ҡарамаҡҡа, ҡәҙимге нейтраль мәҡәлде комик пафослыға әүерелдерә. Тәүге миҫалда беренсе мәҡәл («Арба ватылһа — утын, үгеҙ үлһә — ит») Өфө байҙарының «Ғәлиә»гә ҡаршы байкот ойоштороуын файҙаланып, туған мәҙрәсәләренә хыянат итеүсе шәкерт, мөғәллимдәрҙе пародиялау өсөн килтерелә. Пародия туған мәктәбең (альмаматер) яҙмышына битарафлыҡты, тотош төрки маҡсаттарына хыянат тип шелтәләүгә хеҙмәт итә. Икенсеһе иһә («Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарған») шул хыянаттың хәүефле һөҙөмтәле булыу ихтималын иҫкәртә. Шул арҡала милләт тарҡалыуы ихтимал, тимәксе. Икенсе миҫалда иһә шағир бабайҙар һәм Туҡай ҡулланған мәҡәлдәргә һылтанып, «үҙ йырын үҙе ятатҡанын аҡларға тырышҡандай итә. Асылда, үҙ-үҙен иронаялай. Әгәр инде, «мин» тигәндә, был осраҡта «мин-минлек» ауырыуы менән ауырыусан «мөтәшағир» (шағир булырға маташыусы) күҙ уңында тотолоуы ихтимал икәнен иҫәпкә алһаҡ, «мин»де» иронаялауы шундай бәндәләрҙе пародиялау функцияһын үтәй башлағандай булыр.

Ш. Бабич үҙенең яҙмаларында:

*Ишле — ише менән,*
*Ишмөхәмәт бисәһе менән;*

*Дуҫ тигәнең — аҫтан кимереп ятыусы дошман;*

*Тән айырһа ла,*
*Күңел ҡайырылмаһын;*

*Сөйгә — сөй,*
*Һыйға — һый,*
*Аҙыҡҡа — аҙыҡ,*
*Ҡыҙыҡҡа — ҡыҙыҡ;*

*Ҡырҙа талдан тал үҫә,*
*Тайҙан матур байтал үҫә;*

Санаһын төпкә һуҡтырып, тартә бауын өҙҙөргән; Тәнкит — берәүгә лә кәнфит түгел («Сәфәр алдынан», 1, 507—512-се б.) ише мәҡәл;

*Унда барһаң да — Шомбай,*
*Бында килһәң дә — Шомбай*

(Вәли Хангилдинға, 1, 550-се б.);

*Сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер;*
*Ирекҡән кеше ни ҡылмай*
*Ирекҡән һарт* (үзбәк. — Ә. С.) — *удалой*

(«Себер сәхрәһендә ҡаҙаҡта уҙҙырған көндәрем», 1, 559, 566-сы б.) ише мәҡәлдәрҙе лә урынлы файҙалана.

Мәҡәлдәр менән бер рәттән, шулай уҡ күпселектә публицистик яҙмаларында, тапҡыр һүҙҙәрҙе лә ҡуллана. Күп осраҡта уларының ҡайһынығы шағирҙыҡы, ҡайһынығы халыҡтыҡы икәнен айырыу сиген. Шуға күрә ҡайһы бер миҫалдар килтереү менән генә сикләнәм: «Ғәлиә» карабы милләт ҡулына ҡала. Уның ҡойроғон милләт тотасаҡ» («милләт». — 30 мил. татар — бөтә төрки халҡы. — Ә. С.) (1, 447-се б.); «Өфөнөң тәртәнән сыҡҡан йәкәнселәре»; «ҡаты морондоң арт яғынан бешерелгән ҡаҙылыҡ»; «Дөйәнең муйыны шикелле кәкре»; «Был эш Ағиҙел кирегә аҡҡанда, буласаҡ»; «Әлли итә был Өфө, бәлли итә был Өфө» («Төрлө хәбәрҙәр», 1, 425—426-сы б.); «Ысын көлдөргөс — бөйөк бер хатип» («Көлкө ҡапсығы» йыйынтығына һүҙ башы, 1, 454-се б.); «Өйрәктең һурпаһының һурпаһының һурпаһы» («Мөтәшәббиһат», 1, 455-се б.).

«Урманға утынға барған ерҙән ҡалаға ысҡынған башҡортҡа оҡшаған был мәҡәләмде мин бөтөнләй башҡа тарызда, оҙон итеп яҙмаҡсы инем» («Яҙыу», 1916 й., 1, 481-се б.). Тыумышы менән Бабичтыҡы, ҡабул ителеше менән мәҡәлдәгесә булған стилистик формулалар ҙа осраштыра:

*Өфөлә хәҙер — балыҡтан уха;*
*Әҙип булһа, әҙәп юҡ, әхләҡ юҡ,*
*Әхләҡлеләргә аң юҡ, фекер юҡ...*

(«Иҫтә лә юҡ иҫке сәкмән», 1, 483-сө б.)

Бабичтың поэтик әҫәрҙәрендә мәҡәл һәм тапҡыр һүҙҙәр мәҡәләләрендәге һымаҡ уҡ шалтырап тормай, әммә ҡулланылған хәлдә, бик урынлы килә.

Бабич ҡулланған ҡайһы бер тапҡыр һүҙҙәр:

Н ә ф с е  ш а й т а н (Нәфсе шайтан, бик яуыз ул, һәр әҙәмде аҙҙыра. Аҙҙыра торғас, иҙандарҙы юлынан

яҙҙыра) (Ҡитға, 1, 41-се б.). Эскелектең ни тиклем ҙур яуызлыҡ икәнен нигеҙләү өсөн бына шулай ти. «Ғазазил» поэмаһында был һүҙ тура мәғәнәлә ҡулланыла. Иблестең төгөн ҡабул иткәс, кешеләрҙе нәфсе еңә:

*Эскә кергәс, төк ярылды урталай,*
*Килде сыҡты уртанан шайтан малай!*
*Һәр әҙәмдең ҡәлбенә урынлашты ул,*
*Бар иман, выжданды аҫҡа баҫты ул,*
*Тик нәфсе менән икәүһе дуҫ былар,*
*Нәфсе-шайтан, тип шуға ат ҡуштылар,*
*Нәфсе-шайтан кергәс, инсан донъяһы*
*Аҙҙы, туҙҙы, сыҡты сиктән һәммәһе.*

(1, 159-сы б.)

Араҡы мискәһе (Эсмәгеҙ! — тигән булаһың, әй араҡы) («Бер муллаға» 1, 43-сө б.). Баш бөгөү (Ҡурҡыныс эштәр баҫҡас, ирекһеҙ баш бөгәм) («Йәм күрә алмам», 1, 99); (Шул рәүешсә ниғмәткә шөкран итмәгәс, Тәңрегә, мәғрурланып, баш бөкмәгәс) («Ғаззазил», 1, 149).

Ҡәкре бармаҡ (Нишләйһең, ҡәлбендә аҡ эҙ булмағас, Ҡәкре бармаҡ башта уҡ төҙ булмағас, 1, 148-се б.).

Халыҡ ижады рухында үҙе тапҡан һәм халыҡтыҡынан айырыуы ҡыйын булған тапҡыр һүҙ һәм мәҡәлдәр ҙә осрай Ш. Бабич әҫәрҙәрендә: Ап-аҡ алтын йырҙар (Ап-аҡ алтын йырҙарымды йырламайым данлыҡ өсөн) («Халыҡ өсөн», 1, 34с-е б.); Аҡ күкрәк (Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян, янып тор мәңгегә) («Бер минут», 1, 38-се б.).

Ваҡытында белемгә эйә булыуҙын, һуңламауҙың әһәмиәте хаҡында һүҙ барғанында, шағир шулай ти:

*Бөтә тиҙ донъя малы, мәңге тормай,*
*Белем бөтмәй, юйылмай һәм серемәй.*

(Исемһеҙ шиғыр, 1, 42-се б.)

*Эй, туған, минең хәлемде ярғанатҡа ҡыл ҡыяс!*
(«Оҡшат». — Ә. С.),
*Ҡалҡа аҡылым, башым, тик үткәс эш, батҡас ҡояш.*

(«Ярғанат», 1, 45-се б.)

һуңлап килгән аҡыл, билдәле, яу бөткәс, батыр кү-бәйеүгә тиң.

Был ҡыҫҡа ғүмерҙә бар дарманды файҙалы эшкә егергә саҡырып:

*Ысын ирекле алғы көн өсөн*
*Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!*

тигәндә, («Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде» 1, 52-се б.) Ш. Бабич «Ни өсөн?» тигән һорау бирерҙәреп көн элек тойғандай, яуабын да бирә. Сөнки шунһыҙ һөйөү, выждан, иман, хаҡлыҡ кеүек төшөнсәләр бойомға ашмаясағын, буш һүҙ булып ҡаласағын иҫкәрткәндә, мәҡәл алымына эйәреп, былай ти:

Һөйөү, выждан, иман, хаҡлыҡ кеүек
Матур һүҙҙәр — иҫкән ел генә;
Улар — Сәмауи * һүҙ, күктә улар,
Уларҙы тик һөйләй тел генә.

1915 йылда яҙған «Үткән көндәр» тигән шиғырын Ш. Бабич йән асыуы менән: «Пәйғәмбәрҙәр нәҫеле булыу менән, Иблестән дә уҙған әҙәмдәр!» — тип тамамлай. Әле һүҙ барған «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде» тигәнендә буталсыҡ ваҡиғаларға бай был гонаһлы ерҙә ана шундай «иблестән дә уҙған әҙәмдәр»ҙән абай булырға саҡыра. Һәм, әйтерһең, «Пәйғәмбәр затлы», әммә Иблестән дә арттырып ебәреүселәр кемдәр икәнен асығыраҡ әйтергә теләгәндәй:

*Ерҙең ире — йыртҡыс, тура килһәң,*
*Йыртыр, нисек йырта айыуҙар.*
*Ҡатын — зәһәр йылан, тейә ҡалһаң,*
*Мәңгелеккә һине ағыулар, —*

ти (1, 53-сө б) мәҡәл алымы менән. Бер йылдан һуң яҙылған «Хәлебеҙҙән бер күренеш» тигән шиғырында иһә ошо әйткәненә кире әйләнеп ҡайтҡандай.

*Ҡыҙҙар — ирҡә,*
*Ирҙәр — ҡурҡә,*
*Ҡатындар — ҡурсаҡ, —*

тигән (1, 121-се б.) һығымта яһай. Бының менән, әҙәм затының барыһы ла яман, тип әйтергә йыйынмай шағир.

---

* Сәмауи — күк һүҙе, изге һүҙ.

Юкһа «Халкым өсөн» тигән шиғырында үҙенең халкын «үҙ туған халкым», «саф йөрәк халкым», «дәртле көләс халкым», «кыҙғаныс халкым» тип нарыкламаç, бар йырын уға бағышларға ант итмәç ине һәм «йәш сағын — алтын сағын, ялкын сағын» уның хакында фиҙа кылырға ла әҙер булыуын әйтмәç ине. Ә 1917—1919 йылдарҙа мөстәкил Башкортостан һәм ирекле башкорт халкы өсөн көрәштең кан үҙәгендә кайнауы — «һөйөү», «выждан», «иман», «хаклык» кеүек төшөнсәләрҙе яклап һүҙ әйтеп кенә түгел, яклап, кыçка ғүмерен шулар хакына көрәшеп үткәрергә биргән антына тоғро калыуы уның. Шуға ла ғүмеренең ана шул осоронда яҙған «Ғәскәр доғаһы» тигән шиғырында:

*Башкортостан иçән кала тиһәң,*
*Бер йәнемә миллион үлем бир! —*

тип аллаға ялбарыуын һис тә патриот позаһы алыу, кыланыу тип түгел, һүҙендә тора торған саф күңелле, каһарман ватансының йөрәктән әйтелгән теләге, «икенең — бере» тигән проблеманы әхләки яктан хәл иткәндә икеләнмәç кешенең поэзияһы кеүек кабул итәбеҙ. Ш. Бабич өсөн йәнә шундай хәкикәт асык: бәхет еңел генә бирелмәй. Шуға күрә лә башкорт егеттәренә мөрәжәғәт итеп:

*Күҙеңде ас, егет, бул каһарман,*
*Зәһәр сәсеп ажғыр, кәһәрлән!*
*Күр, илеңде ялмап, һәр яғынан*
*Дөрләп янып килә йәһәннәм —*

тип башланған «Күҙеңде ас» шиғырында дини легенда, дин эстетикаһы тыуҙырған бәхет идеалына ирешеүҙе уның максаты, бурысы тип иçәпләй. Шағир кемгә мөрәжәғәт иткәнен якшы белә. Дини фекер йөрөтөүсегә шуныһы якшы мәғлүм: бәхет идеалы — йәннәт. Ә йәһәннәм уның антиподы. Шағир шуны ла иçәпкә ала: шундай оло төшөнсәләрҙе мәкәл формаһына еткереү уны үтемле итәсәк. Шуға ла ул:

*Йәһәннәмдәр аша уҙмайынса,*
*Ожмах табырбыҙ, тип ышанма! —*

тигән үҙ афоризмы менән тамамлай шиғырын (1, 274-се б.).

Бабич — Бабич булмаç ине, әгәр халыҡ мәҡәлдәрен пародия алымы итеп файҙаланып та, үҙенең афоризмдарын комик маҡсатҡа яраҡлаштырмаһа. Бына 1916 йылда яҙылған «Ғәйет уҙғас» тигән шиғыры. Ғәйет — изге байрам. Шуға ла уны бар мөьмин — мосолман көтөп ала. Шул тойғоно шағир «Нур балҡытып, йырлап килгән изге ғәйет» тип нарыҡлай. Әммә уның ғүмере ҡыçҡа — өс кенә көн. Ҡунаҡҡа йөрөгәндә, ҡунаҡ йыйғанда һәр кем яҡшы кейем кейә, яҡшы ризыҡ ейә. Дүртенсе көн донъя әүәлге, ғәҙәти йырҙарына ҡайта. Шул хаҡта фекер йөрөткәндә, шағир «Дүртенсе көн — иçке хаммам (мунса. — Ә. С.), иçке ҡомған...» тигән афоризмын әйтә һәм шундай афористик һығымта яһай: «Байрамһыҙ көн — ҡараңғы төн» (1, 126-сы б.).

Бабич был афоризмдарында комиҡ башланғыс сатнап торған сатиранан йыраҡ, әлбиттә. Шағир әҙәм балаһының бер ҡанатланып ҡалырға форсат табырға һәләтле икәнен билдәләп, уның яһалма ҡыуанысының ҡыçҡа ваҡытлы булыуын, тормоштоң иçке ҡалыбын ташламауын еңелсә иронияләғандай итә генә. Сөнки уның төп маҡсаты был түгел. «Өс көн күтәренке күңел менән йәшәй алғас, ниңә ғүмер буйына ғәфләт белмәй йәшәмәçкә?» — тип һорау ҡуя төçлө. Юҡҡа шиғырын ул:

*Ғаҙи көн дә байрам төçлө балҡып үтһен,*
*Фәрештәләр өçтөбөҙгә бәхет һипһен! —*

тип инеме ни?!

1915 йылда ижад иткән «Ҡәңәштәр» тигән шиғырында ла мәҡәлсә әйтеү алымын үҙ итә шағир. Был шиғырға ла ирония эффекты хас. Әммә уның еңелсә юмористик иронияләу менән уртаҡлығы юҡ. Шағир мулланың «Ғәүам халҡын» алдауын, хәлфәнең шәкерт алдында сер бирмәçкә тырышыуын, байҙың байлығын һәм «милләт сирен йырлай-йырлай сирләмәгән» (йәғни халҡына хеҙмәт итмәгән) шағирҙан урлашыусы биш артыҡ тип хуплағандай була, әммә тап шуның киреһен раçлай.

*Мулла булһаң, ғәүам халҡын майлау яҡшы,*
*(Мужик булһаң, яҡшы мулла һайлау яҡшы),*
*Ҡаты бәрелеп, ғәүам халҡын өркөткәнсе,*
*Һылап-һыйпап, барын бергә бәйләү яҡшы.*

. . . . . . . . . . . .

*Хәлфә булһаң шәкерткә сер бирмәү яҡшы*
*(Шәкерт булһаң, этем кеүек өрмәү яҡшы).*

. . . . . . . . . . . .

*Бай булһаң, бик рәхәт: байлыҡ яҡшы*
*(Булмаһаң, өмөт өҙмә, һаулыҡ яҡшы).*

. . . . . . . . . . . .

*Шағир булһаң, ялындырмай, йырлау яҡшы,*
*Милләт сирен, йырлай-йырлай, сирләү яҡшы.*
*Булмаһаң килештереп, урлау яҡшы,*
*Вәлхәсил* (ҡыҫҡаһы. — Ә. С.), *тиккә ҡарап тормау*
*яҡшы* (1, 75-се б.).

Һуңғы афоризмдарҙың үҙенсәлеге хаҡында тағы бер нисә һүҙ. Беренсенән, шағир һәр сатирик иронияләу эргәһендә объектив раҫлау стилендә альтернатив фекерен дә әйтә бара. Шул рәүешсә эске диалог — бәхәс эффекты хасил була. Шул иһә шиғырҙа хупланғандай тойолған күренеште шағирҙың, асылда, инҡар итеүен, ек күреүен, граждандлыҡ позицияһын аныҡ билдәләүгә булыша.

Икенсенән, «Ҡәңәштәр» шиғыры йола фольклорына хас теләк, кәңәш стилендәге нәсихәти пафосҡа ҡоролған. Әммә халыҡ ижадында хас теләк, нәсихәттәрҙән айырмалы рәүештә, шағирҙың ниҙелер хуплауы, теләүе — асылда, хупламауы, теләмәүе генә. Ә фольклорға хас теләк, нәсихәттәрҙә юмор ҙа, сатира ла булмай. Улар етди тонда өгөт-нәсихәт йә ялбарыу пафосы менән объектив стилдә әйтелә, шуға ла халыҡта «ҡара доға» тип аталыусан.

Бына шулай Ш. Бабич ижадында халыҡтың афористик әйтемдәре лә, шул мираҫҡа тартым итеп индивидуаль фразеологик берәмектәр ҙә осрай. Дөйөм алғанда, улар шағирҙың әйтер һүҙен биҙәп килеү менән бергә, иң мөһиме, әҫәрҙәренең кинәйәлелегенә, йөкмәтке тослоғона булыша.

*Зәйтүнә Шәрипова,*
филология фәндәре кандидаты

## БАБИЧ ПОЭЗИЯҺЫНДА ДИНИ СИМВОЛИКА

Һуңғы осорға тиклем әҙәбиәт тарихында «аллаһыҙ» сифаты маҡтау һүҙе булып, «алланан» көлөү, унан мәҙәк яһау, сәнғәт кешеһенең рухи азатлығын, ижади бәйһеҙлеген кәүҙәләндереп килде. «Ғазазил», «Ҡуктә — алла» ише айырым әҫәрҙәре буйынса Бабич тураһында ла ошондайыраҡ фекерҙәр әйтелә торҙо. Ҡайһы бер дин әһелдәренә ҡарата аяуһыҙ эпиграммалар яңғыратҡан кисәләрҙәге ғауғаларҙы иҫендә ҡалдырған замандаштарының хәтирәләре лә шағирҙың дәһрилек дәүмәлен уға та ҡеүәтләй һымаҡ. Шағирҙы диндән айырып ҡарау, хатта дингә ҡапма-ҡаршы ҡуйып баһалауҙар нигеҙендә яһалған һығымталарҙың ныҡныуы илебеҙҙәге мәҙәниәт үҫешен билдәләгән объектив тарихи сәбәптәргә бәйле ине. Марксизм-ленинизм тәғлимәтендә дин социаль иҙеүгә хеҙмәт итеүсе көстәрҙең береһе итеп ҡаралғанға күрә, совет власының тәүге көндәренән үк массаларҙы дин йоғонтоһонан ҡотҡарыу маҡсатында төрлә йүнәлештә эш башлана. 1923 йылда РКП(б)-ның XII съезында ҡабул ителгән «Дингә ҡаршы агитация һәм пропаганданың ҡуйылышы хаҡында» тигән резолюцияны ғәмәлгә ашырыу Башҡортостан шарттарында ла үтә ҡыҙыу темптарҙа бара; руханиҙарҙы эҙәрлекләү, мәсет-мәҙрәсәләрҙе емереү-талауҙар, дини китаптарҙы юҡ итеү һылтауы менән бөтә ғәрәп шрифтындағы мираҫты туҙҙырыу ғәҙәти күренешкә әүерелә. Артабан махсус директива-күрһәтмәләр ҡабул ителмәһә лә, дингә ҡаршы көрәш кампанияһының шауҡымы шул тиклем тәрән һәм оҙайлы булды, хатта беҙҙең көндәргә тиклем, яҙылмаған булһа ла, фәнни тикшеренеүҙәргә методологик күрһәтмә

рәүешендә йүнәлеш биреп торҙо. Шулар һөҙөмтәһендә халыҡтың рухи культураһының оҙайлы йылдар буйы йәшәп килгән бай ҡатламы игтибарға алынманы. Дини әҙәбиәт кенә түгел, халыҡ ижадының ниндәйҙер кимәлдә генә дини ҡараштарҙы сағылдырған өлгөләре лә баҫмаларға индерелмәне һәм фән күҙлегенән бөтөнләй баһаланманы, яҙма ҡомартҡыларҙың байтағы ҡыҫҡартыуҙар, редакторлау менән донъя күрҙе.

Урта быуаттар һуҙымында әҙәбиәт һәм дин бер-береһенә үрелеп үҫкән, айырылғыһыҙ бер бөтөн күренешкә әйләнә. XIII быуат емеше — Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» гәүһәренән алып, Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем ижад ителгән бөтә әҫәрҙәр ҙә күпмелер дәрәжәлә дини аң менән һуғарылғайны. «Ҡиҫекбаш», «Жөмжөмә солтан», «Ғәли батыр», «Сәйетбаттал ғази» ише күп кенә поэтик ҡомартҡыларҙа туранан-тура дини мотивтар художестволы үҫтерелеп ебәрелә. Мәҙрәсә — мәктәптәрҙә хатта дин нигеҙҙәренә, дини фәлсәфәгә өйрәтеү ҙә «Баҡырған», «Ахырызаман китабы», «Мөхәмәҙиә» кеүек поэзия өлгөләре нигеҙендә алып барыла.

Бабич та мәҙрәсә мөхитендә тәрбиә-белем алған һәм, ижадсы булараҡ, заманы өсөн нисек кенә алдынғы булмаһын, мәҙрәсә һауаһында өлгөрөп еткән шәхес, шуға күрә уның әҫәрҙәрендә дин йоғонтоһо, шуның материаль кәүҙәләнеше — дини лексиканың муллығы бик тәбиғи.

Автор иң йыш мөрәжәғәт иткән образдар — «алла һәм иблес». Донъя әҙәбиәтендә улар изгелек һәм яуызлыҡ символы рәүешендә кәүҙәләнеш алған. Ҡапма-ҡаршы торған был үҙәк образдар тирәһенә мифик заттар тупланған. «Фәрештә, мәләк, хур, Хызыр бабай, Ябраил» кеүектәре, ожмах-йәннәттә көн күреп, изгелеккә хеҙмәт итһә, «шайтан, ен, пәрей, ғифрит, аждаһа, Ғазраил, зобани» ишеләре тамуҡ-йәһәннәмдә яуызлыҡ тыуҙыра. Дини легендаларҙа «ожмах» — күктә, ә «тамуҡ» ер аҫтында һымағыраҡ төҫмөрләнә. Бабич иһә был ике донъя көстәрен дә бергә уҡмаштырып, ер кешеһе тормошона яҡынлата.

Көнсығыштан ингән урта быуат әҫәрҙәрендә, бигерәк тә суфыйсылыҡ рухындағы поэзияла, изгелек һәм яуызлыҡтың тәүбашланғыстары (первоначала) — орлоҡтары кешенең үҙенең эске булмышында яратылған. Шуға күрә донъялыҡта кеше өсөн иң ҡурҡыныс дошман — яманлыҡҡа этәреүсе, аҙҙырыусы боҙоҡ көс — нәфсе һанала һәм ул һәр ваҡыт выжданға һөжүм ойоштора.

Шәйехзаданың да тәүге осор шиғырҙарында «иблес, шайтан» «нәфсе ялсылары» мәғәнәһендә ҡулланыла.

*«Вау» — төҙөк ул. «Нон» — боҙоҡ, һуң, тиҫкәре...*
*Һаҡсыһы «Вау»ҙың — фәрештә ғәскәре,*
*Тиҫкәре «Нон» ғәскәре — иблестәре.*

(«Выждан һәм нәфсе», 1912)

Йәки

*Нәфсе — шайтан, бик яуыз ул, һәр әҙәмде аҙҙыра,*
*Аҙҙыра торғас, наҙандарҙы юлдан яҙҙыра.*

(«Ҡитға», 1914)

Артабан Бабич традицион символ ҡыҫаһынан сығып, «аҙҙырыусы иблес» төшөнсәһен өр-яңы биҙәк менән байытып ебәрә. Ул — ерҙәге йәшәү сығанағы, һәр ваҡыт ниндәйҙер хәрәкәткә, үҙгәрешкә, төрлөлөккә әйҙәп торған, тормоштоң әсе-сөсөһөн татырға мөмкинлек биргән илаһи бер көс сифатында кәүҙәләндерелә, һәм, көтөлмәгәнсә, тап Бабичса, өр-яңы образ — «ыңғай иблес» образы күҙ алдына килә: иблес — ул хыял:

*...Кем минең зиһенемде күктәргә осорҙо көл итеп?*
*Кем минең кеүек ҡарғаны һайратты былбыл итеп?*
*Кем эсерҙе, кем миңә ҡаптырҙы илһам һурпаһын?*
*Кем миңә мәсет яһап, тотторҙо инсан иркәһен?..*
*Кем йәһәннәм төптәренән мендереп ҡуйҙы йәнем?*
*Кем йыһанды тетрәтә, шатырлатып сынйырҙарын?..*
*Ул — минең әфләс хыялым, күркәм әхрас иблесем,*
*Ғүмеремә күңелемде тырнап торған әкбах иблесем.*

(«Кем?», 1916)

Шағирҙың, донъяны танып белеү ҡеүәһе үҫеп, көндәлек тормош, йәмғиәт менән бәйләнештәре нығыу менән үрҙәге образдар ҙа асыҡ һынлана, конкрет төҫ ала. 1916 йылда баҫылып сыҡҡан «Ғазазил» поэмаһында Бабич ожмахта тыныс ҡына йәшәп ятҡан Ғазазилдың мәләктәр имамынан иблескә әүерелеү моментына туҡтала һәм кешеләр араһына ҡыуылған иблестең тере һынын тыуҙыра:

*Муйынына утлы ләғнәттән ҡамыт*
*Һалды ҡарсыҡ, ҡуйҙы ут ҡойроҡ тағып.*

*Күкрәгенә тыҡты ул әнуағ йылан,*
*Майланы ауыҙын зәһәрле яғ менән;*
*Ҡул-аяғын сатлы-ботло һуҙғылап,*
*Ҡуйҙы һәр бер тырнағына еҙ ҡаҙап;*
*Маңлайына баҫты ҡарсыҡ утлы мөһөр,*
*Ҡап-ҡара булды йөҙө — миҫле күмер.*
*Һәм дә шунда кәкре мөгөҙ таҡтылар,*
*Ҡот осор, күрһәң — осонда сатҡы бар.*

Әҙәм балаларын аҙҙырыуҙы маҡсат итеп алған иблес образы әҫәр аҙағында бөтөнләй икенсе трансформация кисерә: ул, имеш, батша, реаль кеше ҡиәфәтле. Әммә күңелендә, шағир билдәләүенсә, иблеслек зәһәре ята. Ә кеше булмышындағы иблеслелек күктән ҡот осмалы рәүешкә индереп ҡыуылған Иблестән күпкә ҡурҡыныраҡ һәм хәтәрерәк, сөнки берәүҙәрҙең иблеслеге икенселәр йәшәйешендәге, ерҙәге дөйөм халыҡ тормошондағы бәхетһеҙлектәргә сәбәпсе була. Шуғалыр ҙа, Бабичтың һуңғараҡ донъя һуғышы утын тоҡандырыусыларҙы, Башҡортостанда граждандар һуғышы башланғас, башҡорт халҡына золомлоҡ ҡылған Дутов, Колчак ғәскәрҙәрен, ҡайһы мәлдә яуызлыҡта уларҙан да уҙҙырып ебәргән ҡыҙыл яуҙы ла ошо образ аша кәүҙәләндерҙе.

Иң ахырҙа, «Иблес, иблесләнеү» төшөнсәләре шағир тарафынан Башҡортостандың азатлығына, автономия төҙөү эшенә ҡаршы сыҡҡан көстәргә — татар буржуазияһының айырым вәкилдәренә ҡарата ҡулланыла:

*Кәрәк түгел һиңә, нәфләк һатып,*
*Иблесләнеү, янау, тарланыу.*
*Бер ҡурҡытҡан булып, бер алдатып,*
*«Харап булдың» тиеп зарланыу.*

(«Башҡортостан мөхтәриәтенә
ҡарщы татарға»)

Күренеүенсә, автор, «аҙҙырыусы көс» тигән традицион мәғәнәһенән ситләштереп, «иблеслек» төшөнсәһен кеше натураһындағы иң ҡурҡыныс сифаттарҙан — әүермәнлеккә, тыштан — бер төрлө, эстән икенсене ҡылып йөрөүселәр символына, алып барып тоташтыра.

Шулай итеп, иблес һәм уның эргәһенә ойошҡан башҡа мифик образдар аша реаль социаль төркөмдәр: хеҙмәтсән халыҡ дошмандары, халыҡ бәхетен урлаусы, азатлығын емереүсе яуыз көстәр һынландырыла. Улар

арауыҡта (пространствола) даими ғына бер урын biлмәй. Шағир фантазияһы уларҙы шәхсән бер кешенең күңел төпкөлдәренә лә, үҙе йәшәгән Башҡортостан тупрағына ла, бөтә ил масштабына ла еңел күсереп йөрөтә, Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Бабич осоронда Башҡортостан ожмахты түгел, бәлки йәһәннәмде хәтерләткән, шуға ла шағирҙың күпселек шиғырҙарында «иблес—ерҙә, алла — күктә» икәнлеге тәкрарлана.

«Алла» һәм уға бәрәбәр ҡулланылған хоҙай, раббы, тәңре, хаҡ төшөнсәләренә лә Бабич йыш мөрәжәғәт итә. Шағир уйланмышы (замысел) буйынса алла образы төрлөсә кәүҙәләнеш ала: әҙәми зат сүрәтенә индерелеп, ер кешеһенә хас сифаттар менән билдәләнә, йәғни материаллаштырыла, күпселек әҫәрҙәрендә — илаһилаштырыла. Авторҙың аллаға ҡарата мөнәсәбәте ерҙәге ябай халыҡ тормошондағы, кешелек донъяһындағы реаль хәл-ваҡиғалар менән билдәләнә. Беренсе бөтә донъя һуғышы осорондағы ҡанлы ҡыйралыш, илдәге бөлгөнлөк мәлдәрендә ул аллаға ғәйеп ташлай, асыулана, уға ышанысын юғалта, уның мәрхәмәтенә икеләнеүҙәр кисерә:

*Белмәйем,*
*әллә алла,*
*әллә иблес*
*Алдалай?!*

Киреһенсә, 1917 йылда азатлыҡ елдәре иҫә башлағас, шатлығы менән уртаҡлашып, алланың шәфҡәтенә рәхмәттәр уҡый:

*Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын*
*Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.*
*Шатландырҙың, тәңрем, һибеп нурың*
*Башҡортостан халыҡ донъяһын.*

(«Олуғ шатлыҡ»)

Шағир ихласлығы, күңел ҡылдарының саф яңғырашы мөхәббәт лирикаһында асыҡ төҫмөрләнә.

*Ҡәләмемә күңел ене ҡағылдырған,*
*Тиле күңелде үҙ юлына абындырған —*
*Ике нәмә — әүүәл алла, икенсе ҡыҙ —*
*Бәндәләрҙе ҡөҙрәтенә табындырған, —*

тип яҙғайны Бабич 1917 йылда «Исемдәр баҡсаһында». «Алла һәм ҡыҙ» образдары «матурлыҡ, сафлыҡ» төшөнсәләре аша бергә береккән, шуға ла ҡыҙҙарға мөнәсәбәт тә йыш ҡына «алла» күҙлегенән күрһәтелә:

*Сажидә бер кәрамат саз шикелле,*
*Сазында миллион сәждә аҙ шикелле,*
*Ҡәғбә итеп әйләнәһен әйләнәһең,*
*Барыбер ул — алла ҡушҡан хаж шикелле...*
*Ике яҡта ике миңе Миңлекәйҙең —*
*Күктән ингән һаҡсы улар бер хоҙайҙың...*
*Асияның күңел бәхете көҙгөнән дә,*
*Һин дә шулай булам тиһәң изге бәндә,*
*99 мәртәбә алла тигәс,*
*Асия, тип ҡысҡырып ҡуй йөҙ тигәндә.*

Яҙмышының үтә лә ҡырҡыу, шаярыуға һис урын ҡалмаған фажиғәле мәлдәрендә ул, ярҙам һорап, аллаға мөрәжәғәт итә:

*Раббым, һиңә һығына Башҡортостан,*
*Ишет мәзлүм башҡорт аһтарын.*
*Ҡан болото китһен инде өҫтән,*
*Һалсы рәхмәтеңде, ғаффарым!*

(«Ғәскәр доғаһы»)

1919 йылдың 18 феврале. Саф-саф булып теҙелгән башҡорт ғәскәре алдында Бабич штаб исеменән, фронт һыҙығын ташлап, ҡыҙылдарға ҡушылыу тураһындағы фарманды еткерергә тейеш. Телмәр урынына атаҡлы хитап яңғырай. Һүҙҙәренең дөрөҫлөгөнә инаныуҙы шағир алла исеме менән талап итә: *«Ышан, ышанғандай бер аллаңа».*

Зәки Вәлидиҙең Ҡөрьән үбеүе — халыҡҡа биргән антныҡлығының билдәһе, иң ышандырырлыҡ дәлил сифатында раҫлана:

*Ҡөрьән үбеп Зәки ғәһед иткән,*
*Уйлай күрмә антын боҙор тип.*

Мәгәр тап фанатик шәриғәт ҡолдарынан, алдаҡсы муллаларҙан, ике йөҙлө тәҡүә булып ҡыланыусыларҙан шағир әсе көлә, уларҙың ҡайһыларына мыҫҡыллы пародиялар, эпиграммалар сығара. Бабич

өсөн аллаға ышаныу — иң тәүҙә рухи таҙалыҡ, фиҙәкәрлек, йән һәм тән берлеге. 1915 йылда уҡ «Ҡөрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде» шиғырында:

*Һөйөү, выждан, иман, хаҡлыҡ кеүек*
*Матур һүҙҙәре — иҫкән ел генә;*
*Улар — сәмауи (изге) һүҙ, күктә улар...* —

тип яҙғайны. Шуға ла ғазаплы минуттарында ла, илһамлы саҡтарында ла шағир күңеленең күккә ынтылыуы бер ҙә ғәжәп түгел:

*Зәңгәр күк — тажым...* («Бәхетем»)
*Яҡты эҙләп, күккә баҡтым.* («Ҡараңғылыҡта»)
*Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос!*
(«Әйҙә Күккә»)

Күк — шағир өсөн сафлыҡ донъяһы, илаһи урын. «Алла» төшөнсәһе лә ғәҙеллек, хаҡлыҡ, изгелек символы булып ҡабул ителә һәм шағир аңында бөтәһен бергә берләштергән һәм күпкә тәрәнерәк һәм киңерәк «иман» һүҙенә барып тоташа. Халҡыбыҙҙың бәхетле киләсәгенә өмөт, тарихи дөрөҫлөктөң тантана итәсәгенә тәрән ышаныс та тупланған Бабичтың иманында. Шуғалыр ҙа, Бабич үҙен шәриғәт ҡануңдары ҡыҫаһында тоймай, рухы уның иректә оса.

«Иманым — үҙем, Ҡөрьәндер — һүҙем» тип раҫлауы менән ул үҙен ортодоксаль дин рамкаларынан айырыбыраҡ ҡуя.

XX быуат баштарына тиклем хәҙистәр, дини мифтар, легендалар, әнбиәләр тормошо хаҡында хикәйәттәр, шиғри ҡалыпҡа һалынып, халыҡ араһында киң таралһа, Бабич уларҙы образ тыуҙырыу сараһына, йәғни поэтика арсеналына, әүерелдерә. Иң оригиналь, ҡабатланмаҫ үҙенсәлекле образдар ҙа шағир ҡәләме менән дин нурынан яралған. Әйтәйек, күкрәк михрабы, үлем ғифриты, тән зинданы, ен шымсыһы, шиғри ут кәфене, күңел ене, мәләктәй саф ҡатын, исемдәр теҙмәһе — тиҫбе, ҡан туфаны, һаҡлыҡ — баш бетеүе һ. б.

Айырым төшөнсәләр генә түгел, тотош дини легендалар, мифтар нигеҙендә киңәйтелгән сағыштырыуҙар аша параллель ер донъяһы — шул осор тарихи ысынбарлыҡ итеп һүрәтләнә. «Күҙеңде ас» шиғырында Башҡортостандағы граждандар һуғышы, тап йәһәннәм күсермәһе:

*Ҡур: иленде ялмап һәр яғынан*
*Дөрләп янып килә йәһәннәм...*
*Ялҡын һибеп, ҡыҙыл күмер сәсеп,*
*Ут ямғыры яуа, бөркөлә.*
*Йәһәннәмдән сыҡҡан убыр ҡарсыҡ,*
*Ерҙе йотам, тиеп елкенә.*
*Болот ситтәрендә йылан, саян...*
*Зобаниҙар һелтәй гөрзөй — суҡмар...*
*Өйөрмәләр яһап ҡыҙыл уттан,*
*Әжәл шайтандары өйөрөлә...*

«Ҡорбан байрамы мөнәсәбәте илә» шиғыры әнбиәләр ҡиссаһынан киң билдәле Ибраһим пәйғәмбәр шәхсиәтен тасуирлауҙан башлана. Хоҙай хаҡы өсөн хатта ғәзиз улын ҡорбан итеү дәрәжәһенә етеү фиҙәкәрлек символы рәүешендә ил азатлығы өсөн көрәшкә сыҡҡан башҡорт халҡына күсерелә:

*Иле өсөн башҡорт, Ибраһимдай,*
*Ҡорбан итә үҙен, балаһын...*

Дини мифология буйынса, ожмахҡа инеү өсөн күпер аша үтергә кәрәк, имеш. Тап ошо деталь Бабич шиғырҙарында төрлө мәғәнәлә образ тыуҙырыу сараһы булараҡ файҙаланыла. «Ҡыл күпер», бер ҡараһаң, алғы синыфҡа күсереү имтиханы икән дә:

*Ҡыл күперҙәрҙе үтеп, ожмахҡа кергән төҫлөһөң,*
*Юлға төштөң, ҙур манығтарҙың үтеп иң көслөһөн.*

(«Ҡотлау, теләк»)

Икенсе осраҡта, «нур күпере» — Башҡортостандың автономияһы иғлан ителеү:

*Һалынды нурҙан күпер утлы ярға,*
*Әйҙәгеҙ шул күперҙән алға-алға.*
*Ҡапуғын 8 ожмах асып ҡуйып,*
*Керергә фарман бирҙе рәхим алла.*

(«Истиҡбал»)

Бабич хатта осороноң ижтимағи-сәйәси күренештәрен һүрәтләгәндә лә дини легендаларҙан параллелдәр таба. Учредительный собраниеға вәкилдәр һайлау кампанияһын ул «ҡылдан нәҙек сират күперен» үтеүгә тиңләй,

Рәхәт тормошҡа күсеү, бәхетле киләсәкте тәьмин итеү өсөн ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер күпер аша сығыу ғәжәйеп мифик хайуан — пыраҡҡа бәйле, имеш. Өфө губернаһы башҡорттары өсөн «пыраҡ» — 9-сы, Пермь губернаһыныҡылар өсөн — 11-се һанлы исемлек. Ошо исемлеккә ингәндәр генә — башҡорт хәлен ҡайғыртырлыҡ, таланған байлыҡтарҙы, баҫып алынған ерҙәрҙе кире ҡайтарыуҙы хәстәрләрлек заттар, шуға ла ул «пыраҡ» бер үк ваҡытта дөрөҫ юлды күрһәтеүсе сыраҡ та:

*Күпер аҫты тамуҡтыр, аръяғында — фирҙәүес,*
*Кисһәгеҙ, ух... ниндәй ҡыҙыҡ: уңдан аҙыҡ, һулдан аҙыҡ.*
*Кисерһегеҙ ул күперҙән шатланып, рәхәтләнеп,*
*Фәҡәт башҡорт өсөн булған пыраҡҡа атланып...*
*Нәрҫә ул һеҙҙе тамуҡтан ҡотҡара торған пыраҡ?*
*Ул пыраҡтыр — 9, номерлы спискаң — сыраҡ.*
*Шул 9-ға бир тауыш, алмаҡсы булһаң тупраҡ,*
*Юҡһа, тауышың ситкә китһә, йәмле ерҙәр әлфираҡ.*

(«Список 9»)

Ҡыҫҡаһы, Бабичтың фекерләү ҡеүәһе, аң даирәһе диндән айырылғыһыҙ, һәм уны күрмәмешкә һалышыу йә булмаһа инҡар итеү дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине.

«Динле — динһеҙ» маҡтай ҙа, хурлай ҙа торған билдәләмәләр рәтенә инмәй. Ул — шағир ижадының органикаһы, шиғри рухиәтенең айырып алғыһыҙ бер өлөшө. Бабичтың иманы барлығын таныу аҫыл ҡәләменең бәҫен һис кенә лә төшөрмәй, асылда донъяға ҡарашының тәбиғилеген тулыраҡ күҙ алдына баҫтыра, шағир булмышының бөтөнлөгөн раҫлай.

*Газим Шафиков,*
писатель, лауреат премии
им. С. Юлаева

## ПОСЛЕДНИЕ ДНИ БАБИЧА

В своих «Воспоминаниях» («Хятиряляр») Ахметзаки Валиди пишет, что перед переходом Башкирского войска на сторону красных у Шайхзады Бабича было весьма угнетенное состояние. Более того, в его бумагах якобы была даже обнаружена запись, будто все башкирские воины, без исключения, скорее покончили бы с собой, чем перешли на сторону вчерашних врагов.

Проверить это утверждение Валиди трудно. В рукописях поэта она не обнаружена, что и не удивительно: огромное количество собранного Т. Ченекеем материала (целый сундук произведений Бабича после его гибели) утеряно, точнее сказать, нашло свое погребение в неведомых архивах Казани.

Между тем, как раз перед трагическим переходом в конце февраля 1919 года, Бабич пишет свое знаменитое «Поэтическое обращение к башкирскому народу», всесторонне мотивируя причины такого перехода и оправдывая ход руководителя Движения Заки Валиди. Но и не верить словам последнего трудно. Уже в первые дни подписания Соглашения с командованием Красной Армии о переходе солдаты этой армии стали вершить всевозможные бесчинства и глумления над мирным башкирским населением и обезоруженными башкирскими воинами, что не могло не действовать угнетающе на впечатлительную душу поэта.

Как бы то ни было, 23 марта 1919 года Бабич вместе с другом своим Абдулхаем Иркабаевым, тоже молодым поэтом и, как говорит о нем Валиди, «философом», на двух телегах, нагруженных редакционным и типограф-

ским имуществом, в сопровождении конвоя из нескольких человек, отправились из села Темясова (временная столица Валиди) в долгий путь, который вел в новый штаб Башкирского правительства Мраково (Кызыл Мечеть). Дорога делала огромную петлю и пролегала через село Зилаир, где тогда сосредоточивались красные части.

Товарищ Бабича, один из редких ветеранов, доживших до 1983 года, Муким Рахматуллин вспоминает: «Мы разъехались с Бабичем возле деревни Юлык (нынешний Баймакский район), а он с товарищами поехал дальше. Настроение у него было невеселое, потому и я расстался с ним с тяжелым чувством».

Муким-агай словно предчувствовал беду. Шайхзада Бабич вместе со спутниками был арестован после того, как уже покинул Юлыково. Долгое время было неизвестно, как и кто арестовал поэта. Лишь в последнее время обнаружены документы, проливающие свет на эти обстоятельства.

Тогдашний активный красный боец (а может, какой командир), житель Зилаира Александр Константинович Колбинцев дал такие показания спустя три десятка лет после гибели поэта: «В 1919 году я служил при народной охране реввоенсовета села Преображенское. Я был командирован в село Темясово для получения боеприпасов. Вместе со мной были Перехватов Иван Никандрович, старший, Батанин Парфен Степанович, Севастьянов Константин Николаевич, Чекалов Василий Семенович и другие. Все они, кроме Перехватова, умерли. По приезде в Темясово меняли подводы в деревне Юлук. Председатель дал нам подводы и попросил догнать ушедших из отряда Муртазина трех человек, которые взяли у Кожуховых дочь. Мы их догнали между деревнями Кушак и Новоникольск, обезоружили и привезли в Преображенское вместе с Кожуховой. Со слов председателя Юлукского совета, Кожухову увезли редакторы Муртазинского отряда. Эти редакторы ехали на двух подводах и везли с собой небольшие чемоданы. У них мы взяли четыре винтовки, четыре шашки и один или два ящика патронов. Одеты они были в хорошую одежду, по-зимнему. По требованию народа, они впоследствии (на следующий день) были расстреляны на 5-й улице на горе. В этот день было много расстрелянных башкир...»

Я привел этот документ полностью, ибо в нем, как в капле воды, отражена атмосфера того времени. К то-

му же дана версия о некой увезенной русской девушке по имени Варвара Кожухова.

Однако отвлечемся пока от нее и рассмотрим главную тему — непосредственного пленения Бабича и Иркабаева.

Во-перрых, становится ясно, что в аресте участвовали исключительно зилаирские люди, у которых с давних пор были крайне враждебные отношения с коренными жителями. Сколько их было в отряде Перехватова, определить трудно, ибо существует пресловутое «и другие». Неясны также обстоятельства ареста. Что значит «мы взяли у них четыре винтовки»? Взяли так просто? Без боя? В так называемом «Деле № 35» Ахметзаки Валиди по этому поводу пишет: «Во время эвакуации (Башкирского правительства из Темясово в Мраково) и случилась гибель поэтов Ш. Бабича и А. Иркабаева, с ними — 4000 рублей денег, 3 лошади, 30 солдат. В Кананикольске вещи и вывозимое с Бабичем и Иркабаевым имущество были ограблены, сопровождавшие имущество солдаты были расстреляны...»

Здесь сохранена орфография З. Валиди.

Ошибка Валиди очевидна. Все эти деньги и имущество никак не могли быть при Бабиче и Иркабаеве. Видимо, 30 башкирских солдат-охранников ехали раньше поэтов (или позже их). Однако и в этих записках передается вакханалия вседозволенности и бесчинства, которая была устроена красными с первых дней перехода.

С другой стороны, никак не верится, что Бабич со спутниками, имея оружие, могли даться в руки отряда карателей без всякого сопротивления. Остается думать, что отряд этот был многочислен и захватил «редакторов» после боя. Но куда правдивее звучит другая версия. Теперь, по Соглашению, красные и башкирские солдаты как бы стали союзниками. Бойцы Валиди были приучены к строгой дисциплине, и нет ничего удивительного в том, что при оклике «перехватовых» они действительно дали им приблизиться без всякой боязни насилия с их стороны и затем оказались обезоруженными и плененными.

Обратимся к такой фразе Колбинцева: «Председатель... попросил догнать ушедших из отряда Муртазина трех человек...» Если даже их «автор» ввиду своей малограмотности выразил свою мысль коряво, но вполне

достаточно для понимания: он причисляет Бабича и его спутников к Первому кавалерийскому полку мятежного Мусы Муртазина, который после столкновения со Смоленским полком вновь ушел в стан белых. Во-первых, произошло это значительно позже, нежели когда Бабич и Иркабаев выехали из Темясово, а до этого муртазинцы сражались на стороне красных. Во-вторых, Бабич к полку Муртазина не имел никакого отношения, ибо, как редактор газеты «Башкорт» и личный секретарь Валиди, постоянно состоял при его штабе. В-третьих, уместить все имущество редакции, подшивки, шрифт и пр. в «небольших чемоданчиках» никак невозможно. Эвакуация Башкирского войска из Темясово проходила в исключительно тяжелых условиях. Поэтому нетрудно понять: Бабичу и его товарищам в пути приходилось чрезвычайно тяжело. Они ждали налета красных в любую минуту, не сомневаясь в том, что им в пути предстоят самые неожиданные испытания. Нет сомнения в том, что их держали в поле зрения, ибо еще в Темясово орудовала красная банда Андроцкого, установившая пулеметы не только на крышах домов, но и даже на мечети! И чтобы при этом они не знали о том, что из Темясово выехали два видных человека — Бабич и Иркабаев вместе со спутниками?!

Но вот другое показание того же Колбинцева. В нем он уже сообщает, что Бабич и его друзья были «взяты после перестрелки». О том же сообщает рьяный преследователь Бабича (до конца жизни писал на него доносы в Башкирский обком, правительство, КГБ Москвы и Уфы) Николай Иванович Кулешов. Этот человек еще в декабре 1917 года, вернувшись в свое родное село Зилаир, познакомился с Бабичем, и «тот встретил его хорошо». Именно он последовательно проводил версию о том, что Бабич был в форме белогвардейского офицера, вел себя при аресте дерзко и потому, дескать, возмущенные красные солдаты изрубили его на куски.

Наконец, один из членов отряда карателей Павел Иванович Латышев утверждает: «Один из башкирцев был убит... Взятая ими насильственно в деревне Юлук женщина была отпущена домой». И дальше: «...когда их арестовали, то с ними грузов никаких не было, их привезли (в Зилаир — Г. Ш.) на одной подводе. Позднее стало известно, что вместе с Бабичем был расстрелян офицер белой армии Иркабаев».

Сколько показаний, столько и ложных версий. Хотя все они отражают примерно одну жестокую картину ареста и зверской расправы над башкирскими поэтами.

А сколько инсинуаций с этой пресловутой «белоофицерской формой». В сущности, в доносах Н. Кулешова наряду с версией о «насильственно увезенной русской девушке» постоянно фигурирует эта «форма». Видимо, она тоже должна изобличать Бабича как отъявленного врага большевиков: даже перейдя на сторону красных, он, видите ли, продолжал облачаться в «белую» форму, подчеркивая тем самым свою приверженность к Колчаку и Дутову! Между тем, вместе с вышеупомянутым Колбинцевым («они были в хороших зимних одеждах», а отнюдь не в белоофицерских шинелях) про обычную зимнюю одежду свидетельствуют целый ряд людей. В том числе, лично виденные мной: житель аула Ишкильдино (в трех км. от Юлдыбаево) Сабирьян Актаев, кавалер многих орденов, фронтовик, прошедший многие страны Европы, впоследствии мулла, доживший до 1992 года Ишкильди Рыскильдин, ныне живущая в г. Сибае Кюнхылу-апай Рахматуллина (со слов мужа Мукима Рахматуллина). Все они оставили свои свидетельства, подписанные собственноручно. Это было необходимо, ибо зилаирские «ветераны» оспаривали и место захоронения поэта. Даже после гибели он был им ненавистен.

Что касается «умыкнутой» русской девушки Варвары Кожуховой, которая являлась главным козырем доносчика Николая Кулешова, то по этому поводу в 60-е годы проводилось специальное расследование. Это очень обширная тема и потому я не буду касаться ее подробно. Одним словом, шли поиски якобы похищенной Бабичем и его спутниками девушки. Выяснилось, что в ту пору в Юлыке вообще не проживали люди по фамилии Кожуховы. Более того, такие люди вообще не были прописаны на территории Башкирии. В результате долгих расследований обнаружилась некая Варвара Николаевна Кожикова, которая действительно проживала в Юлыке, но в 1919 году ей было... шесть лет! У нее действительно был брат Михаил Николаевич Кожиков, но... 1922 года рождения, и сестра Анна, которая умерла так давно, что она ее толком и не помнит.

Зачем же нужно было придумывать похищенную Варвару Кожухову и «белоофицерскую форму»? Это ясно как день: чтобы хоть как-то прикрыть свое злодея-

ние, совершенное в Зилаире 28 марта 1919 года. Ведь личность Бабича стала ясна для этих «ветеранов» лишь после того, как в 1958 году вышла его книга на башкирском языке, а затем — и на русском, в переводах московского поэта-переводчика С. Липкина. О Бабиче стали писать в газетах. Как было утерпеть бывшим его палачам? Следы не смоешь, а вот облить грязью — можно. И пошли письма кляузы во все мыслимые и немыслимые инстанции. И кляузникам удалось своего добиться: имя поэта вновь было «закрыто» на долгие годы.

Тут следует отметить откровенно трусливую позицию официальной идеологии, точнее сказать, ее секретаря Т. И. Ахунзянова. Прекрасно понимая значение Бабича для башкирской (и не только для башкирской!) литературы, он, тем не менее, не нашел в себе силы противостоять напору воинствующих невежд из Зилаира, которые, по сути, спасали свою шкуру; держал имя и творчество Бабича «в черном теле». А может, это была его осознанная позиция, что тоже вполне закономерно. Время его идеологического всевластия было ознаменовано гонением и травлей истинно башкирских патриотов, лучших творческих сил и дарований. В Бабиче он видел не просто революционного поэта, но поэта его родного башкирского народа, поэта, который воспел его стремление к свободе. Но острие обвинения он направлял на пребывание Бабича в стане Валидова, т. е. клеил ему политическое клеймо.

А что же происходило после того, как Бабич и его друг Иркабаев были схвачены карательным отрядом Перехватова? Их везли в подводе, связанными, до самого Зилаира. Там они были помещены в нижний этаж бывшего дома купца Подрядова. На верхнем этаже помещался штаб Красной армии. Ишкильде Рыскильдин вспоминает, что находившиеся уже там башкиры сразу узнали своего любимого поэта, заволновались, стали расспрашивать. Бабич был немногословен. Он только пытался успокоить собратьев по несчастью, говорил, что смутное время должно пройти, ибо красные теперь — их союзники, во всем разберутся. Увы, «красные союзники» вместо того, чтобы разобраться во всем, стали пачками расстреливать башкир, выводя их из подвального помещения или привозя со стороны. Помните у Колбинцева: «В тот день было расстреляно много башкир». Если быть более точным, то их было расстреляно около тыся-

чи. Это были обезоруженные башкирские солдаты и офицеры, перешедшие на сторону красных, и мирные жители, приводившиеся сюда из близлежащих аулов.

Ну а что касается Шайхзады Бабича и Абдулхая Иркабаева, то их и расстреливать не стали. Их просто-напросто раскрошили на куски клинками, едва выведя на каменное крыльцо их последнего пристанища. По воспоминаниям того же Кулешова, куски их тел затем вилами сложили на рогожу и выбросили в близлежащий ров. Правда, он пытается сочинить красивую легенду о том, якобы, как он попросил отца свезти этот страшный груз куда-нибудь за село и «по-божески» там похоронить. Однако по многим свидетельствам, в частности, заведующего Баймакским роно 40—50 годов Чанышева, обезображенные останки Бабича и Иркабаева были сброшены в мусорную кучу вместе с телами многих сотен убиенных тогда башкир. Позднее они были схоронены в так называемой «братской могиле», что находится на краю Зилаира, возле дороги. Сейчас на том месте стоит бюст Бабича. Но сколько нужно было воевать для того, чтобы эта могила была признана «бабичевской» и затем осенена памятником!

Но почему же так долго и упорно ходили слухи, будто Бабича возили по зилаирским мостовым, привязав к конскому хвосту? Эту версию приходилось (и приходится до сих пор!) слышать в самых разных уголках Башкортостана и даже за его пределами. Видел ли кто-нибудь это, что говорится, собственными глазами? Сколько ни пытался я встретить такого человека, услышать из собственных уст, найти хотя бы побочно подтверждающий этот факт документ, мне не удалось это сделать. И лишь потом меня осенило: да такого свидетеля просто-напросто не может быть на белом свете! Почему? Да потому что там не мог присутствовать ни один башкир, который мог бы лицезреть столь «красивую» казнь. Любое появление «инородца» вызывало у зилаирцев дикую злобу, и он тут же был бы растерзан или в лучшем случае расстрелян. И это меня несколько успокоило. Да и к чему такая легенда, такая романтическая смерть, когда Поэт нашел куда более жестокую погибель от рук разъяренных красных бандитов?

Такова печальная, но величественная история последних дней великого поэта башкирского народа Шайхзады Бабича.

*Рауил Бикбаев,*
Башҡортостандың халыҡ шағиры

## ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ — ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘ

Шәйехзада Бабич — башҡорт тарихында иң ҡатмарлы, иң фажиғәле яҙмышлы шағирҙарҙың береһе. Уның ут-ялҡын эсендә туған милләтенең күңел иңрәүе булып моңло ҡыл кеүек өҙөлгән, йыртҡыс ҡулдар тарафынан өҙөлгән ҡыҫҡа ғына — боронғолар иҫәбе буйынса, ни бары ике мөсәл — егерме дүрт йәшлек ғүмере тураһында уйланғанда, йыш ҡына халҡынан шулай уҡ көсләп айырылған, уның тере тәненән йәп-йәш көйө ите-ҡаны менән йолҡоп алынған Салауаттың һыны күҙ алдына килә. Яҙмыштары имгәтелһә лә, ил хәтерендә уларҙың йөҙҙәре яҡты булып ҡалды, икеһе лә йәш, дәртле, ҡыйыу шағир һәм яугир булып заман һынауҙары аша киләсәккә үтә.

Ғәҙәттә йылдар уҙған һайын шағирҙар, әҙиптәр ижады тулыраҡ асыла бара, йыш ҡына элекке баһалар иҫкерә, ҡайһы саҡта замандаштарҙың урынһыҙ күккә сөйөүе йәки нахаҡҡа хөкөм итеүҙәре йылдар тарафынан үҙенсә фашлана, дөрөҫлөк өҫкә сыға. Ваҡыт бер ҡасан да ысын таланттарға (даһиҙарҙы, әйтеп тә тормайым) ҡаршы эшләмәй, киреһенсә, һәр быуын улар хаҡында элеккеләргә ҡарағанда күберәк белә, уларҙы нығыраҡ аңлай. Заманында ғәҙелһеҙ язаларға дусар булған изге ҡорбандарҙы ла, хаҡһыҙ шөһрәт ҡаҙанған «даһиҙарҙы» ла ваҡыт барыбер үҙ урынына ултырта. Эйе, киң ижтимағи үҫеш офоҡтарынан, милләттең тарихи яҙмышы перспективаларынан, дөйөм кешелек юғарылығынан байҡағанда, ваҡыт бер нисек тә ысын художникка ҡаршы эшләмәй.

Ләкин ваҡыт ижадсы өсөн иң оло һынау булһа ла,

уның зиһене тыуҙырған гәүһәрҙәрҙе үҙенсә һырлаусы һәм элекке быуындар күрмәгән яҡтарын балҡытыусы бер тылсым булһа ла, шағир йәки яҙыусы йәшәгән осор һәм уның менән аралашҡан замандаштарының раҫлауҙары йәки кире ҡағыуҙары, уны күргән-белгән кешеләрҙең иҫтәлектәре әҙиптең тормошон һәм ижадын дөйөм күҙлектән дә, айырым әҫәрҙәренең, ғүмере юлындағы айырым ваҡиғаларҙың үҙенсәлектәрен асыҡлау яғынан да иң ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе ул.

Шәйехзада Бабичтың таланты иртә асылды, ун туғыҙ-егерме йәштәренән үк ул әҙәби мөхиттең үсеш юлдарын билдәләүсе төп көстәрҙең береһенә әйләнде. 1915 йылдарҙан замандаштары алдында ул ҡайнар хисле лирик булып та, тапҡыр телле юморист һәм сатира оҫтаһы булып та килеп баҫты. Оло шағир Бабич бай тәбиғәтле, күп һәләттәрҙе үҙенә туплаған, һирәк була торған сағыу шәхес тә ине.

Был кеше менән осрашыу бер кемде лә тыныс ҡына ҡалдырмаған, хатта бер мәртәбә генә, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә генә күргәндәрҙең хәтерендә лә ул ғүмер буйы онотолмай һаҡланған.

Үҙенең йөкмәткеһе менән дә, яңғырашы буйынса ла Бабич шиғриәте өр-яңы күренеш булған кеүек, уның сәхнә эшмәкәрлеге лә башҡорт һәм татар донъяһында быға тиклем күрелмәгән хәл, кешеләрҙе хайран ҡалдырғыс яңылыҡ ине. Аҡмуллалар, Дәрдмәндтәр, Туҡайҙар, Ғафуриҙар күтәрелгән осорҙарҙа шағирҙың сәхнәгә менеүе һирәк хәл ине. Дөрөҫ, Ғабдулла Туҡайҙың халыҡ ижады хаҡындағы лекцияһы онотолмаҫ ваҡиға, эстетик ҡараштар үҫешендә мөһим аҙым булды. Сәғит Рәмиевтең сәхнәнән шиғыр уҡыуын замандаштары яратып ҡаршы алыр булған. Бабич шиғриәтте уҡыусыға еткереүҙә тамашасы аудиторияһының быға тиклем беҙҙә булмаған мөмкинлектәрен оҫта файҙаланды. Был хәл халыҡтың рухи үҫешендәге мөһим яңылыҡ ине. Сәхнәнең ысын хужаһына әйләнгән бындай шағир менән осрашыуҙар Бабичты халыҡ араһында ғәйәт популяр итте, уның исеме телдән телгә, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа күсте.

Донъялағы күп кенә хәсрәтле хәлдәр тураһында мәрәкә ҡатнаш һөйләүсән, күңеле менән оптимист булған халыҡ иң элек Бабичтың сатира-юморын яҡын күрҙе, матбуғатта ла уға иң элек тәүге баһалар «халыҡ эсе ҡатып көлдө», «йәмғиәтте аяҡтан йыҡҡансы көлдөргән» кеүек һүҙҙәрҙән ғибәрәт ине. Ни хәл итәһең, көлкө әҫәр-

ҙәр уҡыусылар ҡатламына тиҙерәк барып етеүсән, еңелерәк аңлашылыусан. Лирика иһә халыҡ күңеленә ҡатмарлыраҡ юлдар менән барып етә. Нисек кенә булмаһын, Бабич тере сағында уҡ, бигерәк тә вафат булғас, уның холоҡ-ҡылығына, биографияһына бәйле әллә күпме риүәйәттәр тыуҙы. Ләкин дәһшәтле йылдарҙа йәшәгән, көрәшкән һәм ижад иткән был ярһыу шағирҙың асылын аңлау еңел түгел һәм замандаштарының хәтерләүҙәрендә уның төрлө яҡтары асыла. Тыумыштан сәсән булған Шәйехзада Бабич берәүҙәрҙең хәтерендә еңелсә мәҙәк оҫтаһы, сәхнәнән көлдөрөүсе ҡарпыш ҡолаҡлы кәмит образында ҡалған; икенселәр өсөн ул ғәҙелһеҙлекте фашлаусы әсе телле сатирик; өсөнсөләргә ул ләззәт артынан сабыусы бер елғыуар; дүртенселәргә иһә — Ләйләһе алдында баш эйгән Мәжнүн, мөхәббәт утында янып саф күңелле хыялый; бишенселәргә был шағир — туған халҡын яҡтылыҡҡа, азатлыҡҡа әйҙәүсе ил улы, ҡыйыу көрәшсе егет; бәғзеләр өсөн ул — милләтсе, йылдар буйы уларҙың ҡоттарын алған бер яуыз демон һ. б.

Шулай ҙа кем һуң шағир Шәйехзада Бабич? Оҙаҡ йылдар буйы был һорауға байтаҡ кешеләр яуап эҙләгән һәм төрлө яҡлап яуап бирергә тырышҡан. Ошо һорауға яуап эҙләгәндә, шағирҙың замандаштарының иҫтәлектәре һәр кем өсөн ҡәҙерле ҡомартҡы, беҙҙең өсөн, киләсәк быуындар өсөн һаҡланып ҡалған хазина, оло ҡыуаныс ул.

Ләкин Бабичтың үҙенең ижады һымаҡ уның хаҡындағы хәтирәләрҙең дә яҙмышы ҡатмарлы булды. Шағирҙың әҙәби мираҫы беҙгә тулыһынса килеп етмәгән кеүек, байтаҡ иҫтәлектәр юғалған. Мәҫәлән, егерменсе йылдар башында Дауыт Юлтый, Ғөбәй Дәүләтшин, Сәхи Рәхмәти, Ризуан Алушев, Мәхмүт Мәржәни, Рәүеф Ниязбаев, Фәтхелҡадир Бабич һ. б. ярҙамында һәм Бабичтың атаһының, дуҫтарының, таныштарының һөйләгән иҫтәлектәрен файҙаланып, шағирҙың биографияһын бик оҙон итеп яҙырға тура килгәйне, тип хәтерләй Ырымбурҙа шағир менән яҡындан аралашып йәшәгән Төхфәт Ченәкәй. Шундай кешеләрҙең булышлығында һәм шундай иҫтәлектәргә таянып яҙылған ул биографияның әһәмиәтен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның яҙмышы билдәһеҙ.

Ошо юғалып ҡалған үтә мөһим документтан һуң Бабич тураһында замандаштарының иҫтәлектәрен туплауға

оҙаҡ йылдар буйына беҙҙә һис бер форсат булманы. Әҫәрҙәре кеүек туғандары ла, фекерҙәштәре лә, һабаҡташтары ла төрлөһө төрлө яҡҡа таралыуға дусар ителде (Төхфәт Ченәкәй, Сәхи Рәхмәти, Зыя Йәрмәкәй, Мәхмүт Бөдәйли, Зариф Бәшири, Фәсәхәт Бабичева һ. б.) Атаәсәһе 1921 йылғы аслыҡтан донъя ҡуйҙы. Берәүҙәр утыҙынсы йылдарҙағы экзекуциялар ҡорбаны булды (Ғәлимйән Ибраһимов, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Хәбибулла Ғәбитов, Муса Мортазин, Сәғит Мирасов, Мәхмүт Мәрҗәни һ. б.). Икенселәре, һөйөклө Башҡортостанынан айырылып, алыҫ-алыҫ яҡтарҙа ғүмер һөрҙө (Зәки Вәлиди, Абдулҡадир Инан, Ғәлимйән Таған). Бабич хаҡында әйткән һүҙен сит ерҙән туған халҡына еткерә алмай зарыҡты Вәлиди. Ә инде илдә тере ҡалған замандаштары Бабич тураһында ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә хоҡуҡһыҙ булды. Былар барыһы ла шул осорҙарҙа милләттең аяныс яҙмышының, уның эҙмә-эҙлекле тарҡалыуға дусар ителеүенең фажиғәле сағылышы, бер яҡтан, наҙанлыҡ бөтөрөлөп, мәҙәниәт усаҡтары асылып, туған телдә матбуғатты үҫтереп, икенсе яҡтан, быуаттарҙан килгән милли рухи тамырҙарҙы мәкерле ҡырҡыу политикаһының, милләттәрҙе, дәртле музыка менән марш атлатып, рухи фәҡирлек казармаларына ҡыуалауҙың бер һөҙөмтәһе ине.

Шулай итеп, егерменсе, утыҙынсы, ҡырҡынсы йылдарҙа, илленсе йылдарҙың тәүге яртыһында матбуғатта Бабич хаҡында хәтирәләр баҫылманы. Шәйехзада Бабич ижадының ижтимағи-эстетик асылын уҡыусыларға тәү башлап Ғәлимйән Ибраһимов асҡайны, 1922 йылда Ҡазанда сыҡҡан шиғырҙар мәжмуғаһына яҙған «Ваҡытһыҙ һәләк булды» исемле баш һүҙендә шағирҙы «Иң яҡшы әҫәрҙәре башҡорт халҡының революция ваҡытындағы трагедияларына бағланыш, ваҡытһыҙ һәләк булған бөйөк әҙәби талант» тип юғары баһалағайны. Бабич хаҡында бындай төрҙәге мәҡәләләр оҙаҡ йылдар күренмәҫ булды. Дөрөҫ, егерменсе йылдарҙа Бабич исеме башта маҡтап телгә алынды. Уның хөрмәтенә кисәләр ойошторолдо, хәбәрҙәр, мәҡәләләр донъя күрҙе, исеме хатта журналға бирелде. Ләкин был ун йыллыҡтың аҙағына табан Бабичҡа ҡарата вульгар социалогик мөнәсәбәт нығына башланы, ә утыҙынсы йылдар башында шағирға официаль ҡараш ҡырҡа үҙгәрҙе. Хатта уның менән бер осорҙараҡ «Ғәлиә» шәкерте булған, үҙен яҡын ҡәләмдәше тип йөрөгән Сәйфи Ҡудаш та Бабичҡа ҡара яғыу-

ға, уны дини реформаторлыкта һ. б. гонаһтарҙа ғәйепләүгә тиклем барып етте (Сәйфи Ҡудаш. Бабичтың ижад юлы. — «Октябрь», 1930, № 3).

Бабич тураһында иҫтәлектәр ул вафат булғандан һуң ҡырҡ йылға яҡын ғүмер үткәс кенә — ни бары илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан баҫыла башланы. Ә шул арала күпме мөмкинлектәр мәңгегә юғалғайны...

Шәйехзада Бабич исемен яңынан халыҡҡа ҡайтарыуҙа илленсе йылдарҙың икенсе яртыһында — алтмышынсы йылдарҙа Әхнәф Харисов ғәйәт ҙур эш башҡарҙы. Яңы быуын уҡыусыларға шағирҙың тормош һәм ижад юлын аңлатып тәүге төплө фәнни мәҡәлә яҙыу, уның әҫәрҙәрен аңлатмалар менән китап итеп сығарыу әҙәби мираҫыбыҙҙы тулыландырыуҙа ҙур күренеш булды. Ошо уҡ осорҙа Әхнәф Харисов Бабич тураһында иҫтәлектәр китабы туплауға ла ныҡлап тотонғайны. Уның байтаҡ замандаштары менән бәйләнеш булдырып, күбеһенең хәтирәләрен Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына йыйғайны. Уларҙың ҡайһы берҙәре матбуғатта донъя күрҙе, баҫылмағандары Башҡортостан Фәндәр академияһының ғилми архивында һаҡлана. Был эш һуҙылыбыраҡ китмәһә, Бабич хаҡындағы иҫтәлектәр китабы шул ваҡытта уҡ бәлки сығып өлгөргән дә булыр ине. Ә Харисов, күрәһең, хәтирәләрҙе мөмкин тиклем тулыраҡ итеп йыйырға теләгәндер, шуға яңынан-яңы материалдар табырға тырышҡандыр. Ләкин...

Ләкин алтмышынсы йылдар аҙағында — етмешенсе йылдар башында Шәйехзада Бабичҡа ҡаршы Башҡортостанда яңынан яуыз эштәр башланды, 1965 йылда «Библиотечка башкирской поэзии» серияһында танылған оҫта Семен Липкин тәржемәһендә Бабичтың русса бәләкәй генә йыйынтығы донъя күргәйне. Инеш һүҙҙе Әхнәф Харисов яҙғайны. Бабичтың яңынан әйләнеп ҡайтыуынан илленсе йылдарҙа уҡ һырттары ҡабарған рус шовинистарын, бигерәк тә шағир һәләк булған Йылайыр төбәгендәге ҡайһы берәүҙәрҙе ошо кескәй китаптың донъя күреүе тағы ла нығыраҡ ярһытып ебәрҙе: партияның өлкә комитетына улар төрлөсә янауҙар, шағирға яла яғыусы ялыуҙар яҙҙылар. Үҙ күләгәләренән үҙҙәре ҡурҡып йәшәгән түрәләргә етә ҡалды: ул заманда Башҡортостандың башында ултырған хакимдар Бабичты «үлтерер өсөн рәхимһеҙ рәүештә өсөнсө мәртәбә ҡорал күтәрҙеләр. Шағир исеме яңынан матбуғатта күренмәҫ булды, уны уҡытыу тыйылды, уның хаҡында яҙылған

монографияға юл байтаҡ йылдарға бикле булды. Хатта 1980 йылда баҫылып сыҡҡан һәм башҡорт шиғриәте тарихында бығаса күрелмәгән ике томлыҡ «Поэты Башкирии» тигән, нисәмә йылдарға бер була торған һайланма йыйынтыҡҡа ла Бабичты индерергә юғарынан рөхсәт булманы.

Эйе, шағирға өсөнсө тапҡыр ҡорал күтәрҙеләр. Сәләх Ҡулибай алтмышынсы йылдар башында үҙенең иҫтәлектәрендә яҙғанса, Бабичты ике мәртәбә ерләнеләр: 1919 йылда — физик яҡтан, утыҙынсы йылдарҙа — рухи яҡтан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, иҫәп-хисап бының менән генә бөтмәгән икән. Алтмышынсы йылдар аҙағында — етмешенсе йылдар башында Бабич өсөнсөгә үлем язаһына хөкөм ителде һәм ҡарарҙы кисекмәҫтән үтәргә әмер бирелде. Шағир исеме яңынан тыйылды, халҡыбыҙ тарихын мөмкин тиклем боҙоп күрһәтергә тырышыусылар Бабичты нисек тә халыҡ күңеленән юйып ташларға маташтылар.

Өс тапҡыр атылған шағир Шәйехзада Бабич. Өс ҡабат язаланып та, халҡы өсөн һәр саҡ һөйөклө булып, һәр саҡ тере булып ҡалған ҡаһарман шәхес. Ҡешеләрҙең ихлас ихтирамын һәм һөйөүен үҙе тере саҡта уҡ бик йәшләй татыған, төрлө тарафтарҙан ишеткән, вафат булғас исеме ил данына ла, бәғзе бәндәләрҙең ҡәһәренә лә юлыҡҡан шағир. Берәүҙәр уны ғүмере буйы данланы, хәтирәләрендә тоғро замандашы булып ҡалды. Икенселәр уны эстән ҡәһәрләп, уға булған нәфрәтенән шартлай яҙып йәшәне. Әммә иң ытырғандырғаны шул: башта уның дуҫы булып, аҙаҡ уны фашлаусыға әйләнеү, ә инде Бабичҡа яңынан официаль мөнәсәбәт яҡшырыу менән тағы ла уны күккә күтәреп, татлы хәтирәләргә сумыу. Рәми Ғариповтың «Табыныу» поэмаһында әйтелгәнсә, улар «мең туғыҙ йөҙ илле етелә әҙен юйҙы күҙҙән, төлкөләй...»

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: ижади мираҫтың, күренекле шәхестең тарихи үҫештәге урынын һәм әһәмиәтен билдәләү, иҫтәлектәрҙә йәки башҡа уңай менән уларға үҙ мөнәсәбәтемде асыҡлау ниндәйҙер политик ярамһаҡланыуға йәки конъюнктур ҡулайлашыуға ҡоролорға тейеш түгел. Теләһәң-теләмәһәң дә, ундай хәлдәр элек тә булған, һуңғы ваҡытта ла тыуып тора. Мәҫәлән, башҡорт халҡының дәүләт эшмәкәре һәм донъяға танылған ғилем эйәһе Зәки Вәлидиҙе бөгөн татар тарихсыһы, татар ғалимы тип раҫларға тырышыусы-

лар бар. Ә ул ҡәһәрләнгән саҡта ниңәлер былдай ҡараш, ғалимды яҡларға тырышыу юҡ ине. Шәйехзада Бабич менән дә шул уҡ хәл.

Төрлө замандарҙағы төрлө хөкөмдарҙар һәм ҡатилдар Бабичтың үҙенә һәм ижадына ҡарата аяуһыҙ, бәғерһеҙ булһа ла, беҙҙең бәхеткә шағир тураһында байтаҡ замандаштарының иҫтәлектәре һаҡланып ҡалған. шуларҙың иллегә яҡыны ҡағыҙға теркәлгән.

Был хәтирәләр шағирҙың тормошондағы төрлө осорҙарға ҡарай, Шәйехзаданың сабый сағынан алып һәләк булған көнөнә тиклемге яҙмышын төрлө яҡлап күҙ алдына баҫтыра.

Бабичтың ғилем нуры менән нурланған, китап һәр ваҡыт йорттоң түрендә булған ғаиләлә үҫкәнлеген уҡыусылар быға тиклем белә ине. Ә бына туғандарының, ауылдаштарының иҫтәлектәре менән танышыу күп кенә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә. Әйтәйек, хәтирәләрҙән Шәйехзаданың атаһының шаян һүҙле, көр күңелле, әсәһенең оялсан, моңло булыуын, был татыу ғаиләлә ун дүрт бала булғанлығын, ҡайһы берҙәренең хатта холоҡ-ҡылыҡтарын беләбеҙ. Алдынғы ҡарашлы хәлфә Мөхәмәтзакирҙың уҡыу-уҡытыу менән генә түгел, крәҫтиән тормошона хас эштәр менән дә йәшәүен, китап тоторға яратҡан ҡулдарының балта эшенә лә, баҡсасылыҡҡа ла оҫта булыуын беләбеҙ. Шулай уҡ Шәйехзаданың бала саҡтағы шуҡлыҡтары, зирәк зиһене, тапҡыр теле, артислыҡ һәләте унын сатира-юморының да, сәхнә эшмәкәрлегенең дә тамырҙарын асыҡларға ярҙам итә.

Был иҫтәлектәрҙең иң тулыһы, иң ҡәҙерлеһе, әлбиттә, шағирҙың иң кесе һеңлеһе Фәсәхәт Бабичеваныҡы. Ағаһы һәләк булғанда әле бик бәләкәй көйө ҡалһа ла, күп нәмәне хәтеренә һеңдергән, аҙаҡ үҙе бик ауыр яҙмыш кисергән Фәсәхәт апай ғүмеренең күпме йылдарын Шәйехзада Бабичтың изге исемен төрлө нахаҡ ғәйептәрҙән арындырыуға, әҫәрҙәрен туплауға, унын хаҡында иҫтәлектәр йыйыуға арнаны. Ул бик оҙаҡ ваҡыттар Башҡортостандан ситтә көн күрергә мәжбүр булды, ғүмеренең бер-ике йылын ғына тыуған ауылы Әсәндә йәшәп ҡалды. Яҙмыш уны Башҡортостандан айырған замандарҙа Бабич шиғриәтен, Бабичтың яҡты образын һәр саҡ күңелендә һаҡланы. Илленсе йылдарҙың икенсе яртыһында шағир хаҡында яңынан асыҡтан-асыҡ дөрөҫөн һөйләү мөмкинлеге тыуғас, Фәсәхәт апай арыу-талыу белмәй күпме тапҡыр ағаһы йөрөгән урау-урау

юлдар буйлап үтте, Әсән, Дүртөйлө яҡтарына ла, Өфөлә лә, Йылайыр, Баймаҡ тарафтарында ла шағирҙы күргән-белгән кешеләр менән осрашты, күрә алмағандары менән хат аша хәбәрләште, тынғы белмәй эҙләнде, Бабичтың тантанаһына өмөтләнеп, ошо йүнәлештәге һәр яңылыҡҡа ихлас ҡыуанып йәшәне. Уның был эшмәкәрлеген Бабичҡа арналған ҡаһарманлыҡ тиергә мөмкин һәм башҡорт әҙәбиәтендә үҙ туғанының әҙәби мираҫын һаҡлауға ошолай эскерһеҙ һәм тоғро хеҙмәт иткән башҡа шәхесте мин әлегә белмәйем.

1911—1916 йылдарҙа Шәйехзада Бабич Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡыны, барлыҡ илгә танылған ошо уҡыу йортондағы әҙәби-мәҙәни ваҡиғаларҙың үҙәгендә ҡайнаны, шул эштәргә әйҙәүсе танылған шәкерткә әйләнде. Уның ижадындағы күп кенә үҙенсәлектәрҙе ошо мәҙрәсә шарттарынан айырып аңлау ҙа, аңлатыу ҙа мөмкин түгел. Был яҡтан шағирҙың һабаҡташтары беҙгә байтаҡ мәғлүмәттәр бирә ала.

С. Ҡудаш, В. Хангилдин, Ҡ. Ғирфанов, Х. Зәйни, З. Йәрмәкәй, М. Мәһәҙиев, Р. Ғәлләмовтарҙың хәтирәләре шағир менән байтаҡ ваҡыт бергә аралашып йәшәү, уны ярайһы уҡ оҙаҡ ваҡыт, ҡайһы саҡта йылдар буйы күрә-күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә тыуған. Бына ни өсөн уларҙа йыш ҡына Бабичтың рухи донъяһы, уҡыу-уҡытыу барышында, әҙәби музыкаль кисәләрҙә, ижади бәхәстәрҙә, ғәҙәти күренеш хәлдәрендә, ҡалала һәм төрлө ауылдарҙа төрлө яҡлап эҙмә-эҙлекле асыла.

Башҡорт мемуаристикаһы Юлтыйҙарҙың, Ғафуриҙарҙың айырым иҫтәлектәренән алып бөгөнгө көндәргә тиклем тәжрибә туплаһа ла, был жанрҙа эшләүсе әҙиптәрҙе беҙҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Алтмышынсы йылдарҙа Сәләх Ҡулибай был өлкәлә ырамлы эшләне, үҙенең хәтирәләренә нигеҙләнеп байтаҡ замандаштарының онотолмаҫ портреттарын ижад итте. Уның «Төрлө һуҡмаҡтар» (1963) исемле китабы башҡорт мемуаристикаһына яңы бит өҫтәне. Был төр әҙәбиәттең үҫешенә Ғәйнан Әмири ҙә һиҙелерлек өлөш индерҙе. Ҡәләмдәштәре, фекерҙәштәре тураһында күп кенә иҫтәлектәр яҙған Мостай Кәрим һуңғы йылдарҙа был жанрҙы айырыуса яҡын күрә, үҙенсәлекле хәтирәләр китабы тулыланғандан тулылана бара. З. Биишеваның, Н. Нәжмиҙең, Х. Ғиләжевтең иҫтәлектәрендә лә заман ағышы тере шәхестәр яҙмышында сағылыш таба.

Тағы ла шуныһы ҡыуаныслы: һикһәненсе йылдарҙа башҡорт әҙәбиәте донъяһында яңы һәйбәт традиция барлыҡҡа килде. Ошо арала Д. Юлтый, Һ. Дәүләтшина, Б. Бикбай, С. Агиш, Ғ. Сәләм, Ж. Ҡейекбаев тураһында мемуар китаптары донъя күрҙе. Уға тиклем М. Ғафури хаҡында иҫтәлектәр тупланмаһы баҫылғайны. Ошондай йыйынтыҡтар башҡа әҙиптәр, мәҫәлән, Р. Ғарипов тураһында ла әҙерләнә. Был һәйбәт эште һис шикһеҙ артабан дауам итергә, уның офоғон киңәйтергә, тормоштоң төрлө тармаҡтарында яҡты эҙ ҡалдырған, милләтебеҙ өсөн янып йәшәгән күренекле шәхестәребеҙ тураһында иҫтәлектәрҙе үҙ ваҡытында туплап өлгөрөргә, тиҙерәк уҡыусыларға еткерергә кәрәк. Был изге эшкә оҙаҡ йылдар буйы иғтибарҙың етмәүе, яҙырға теләүселәрҙең дә ҡулына һуғып тороу арҡаһында күпме ҡомартҡылар, тере хәтирәләр эҙһеҙ юғалды.

Башҡорт мемуаристикаһында Сәйфи Ҡудаштың хеҙмәттәре, атап әйткәндә уның «Хәтерҙә ҡалған минуттар», «Йәшлек эҙҙәре буйлап» исемле китаптары, төрлө йылдарҙа яҙылған мәҡәләләре үҙәктә тора. Уның иҫтәлектәре башҡорт ерлеге менән генә сикләнмәй, ҡаҙаҡ далаларын да урап үтә, татар, украин әҙәбиәттәренә лә үтеп инә.

1965 йылда «Ағиҙел» журналының өс һанында С. Ҡудаштың Бабич хаҡында «Тәүге танышыуым», «Күккә үрләгән йылдар», «Ике талант» исемле иҫтәлектәре баҫылып сыҡты. С. Ҡудаш Бабичты иң ныҡ белгән әҙиптәрҙең береһе. Шағир хаҡындағы хәтирәләрҙең иң күләмлеһе лә Ҡудаштыҡы. Уларҙа Бабичтың холҡо, тышҡы ҡиәфәте, сәхнәлә үҙ-үҙен тотошо, әҫәрҙәренең яҙылыу тарихы, йәшәгән йорттары һ. б. менән бергә шул осорҙоң, айырыуса 1916—1917 йылдарҙың дөйөм йөҙө лә, «Ғәлиә» мәҙрәсәһенең тарихы, башҡорт һәм татар донъяһының рухи үҫешендәге әһәмиәте лә байҡала. Ғәлимйән Ибраһимов, Ғәзиз Әлмөхәмәтов кеүек шәхестәр менән ижади дуҫлығы ла ситләтеп үтелмәй. Ҡыҫҡаһы, хәтирәләрҙең йөкмәткеһе бай, күп яҡлы. Утыҙынсы йылдарҙа Бабич ижадына хата ҡарашты ҡеүәтләүсе иң күләмле мәҡәлә менән сығыш яһаған Ҡудаш алтмышынсы йылдарҙа һоҡланып яҙылған иҫтәлектәр баҫтырҙы. Яҡын ҡәләмдәше алдындағы ғәйебе шуның менән кәмегәндер моғайын. Нисек кенә булмаһын, был хәтирәләрҙең донъя күреүе яңы быуын уҡыусыларына Бабичты нығыраҡ белергә ярҙам итте, башҡорт мемуаристикаһына яңы

тәжрибә өҫтәне, авторҙың ҡараштарындағы эволюцияны. мөһим үҙгәрештәрҙе күрһәтте.

Бабичтың «Ғәлиә» лә уҡыған йылдарына ҡараған бер ҡиммәтле сығанаҡты шулай уҡ уның замандаштарының иҫтәлектәре менән бер ҡатарҙан ҡарарға кәрәк. Был — Ғ. Толомбайҙың «Яңалиф» журналында (1929, № 16) баҫылған мәҡәләһе. Уның тәүге һөйләме уҡ йөрәкте һыҙлата: «Бабич күп кенә иҫтәлек дәфтәрҙәре яҙған. Быларҙың күбеһе табылған, һаҡланған булһа ла, байтағы юҡ әле. Бына шул дәфтәрҙәрҙең береһе табылды. Был уның иҫтәлек дәфтәрҙәренән ун икенсе киҫәк булып, 1913 йылдың сентябрь баштарында яҙылған. Яҙылған урыны — ҡаҙаҡтар араһы».

Ниндәй ҡыуаныслы табыш һәм ни тиклем үкенесле юғалтыуҙар! Замандаштарының әйтеүенсә, Бабич ун йәшенән алып үлгәнсе көндәлек яҙыуҙы ҡалдырмаған (С. Ҡудаш), атаһы кеүек үк көндәлек алып барған (ауылдашы С. Сабиров). Тимәк, 1913 йылға тиклем ун бер дәфтәр көндәлек тулған булған, унан һуң күпмелер яҙылған... Шуларҙың ни бары берәүһе генә Фәтих Кәрим аша, уға тиклем Мирсәй Әмир ҡулында булып, (икеһе лә Башҡортостанда тыуып үҫкән татар әҙиптәре) Ғ. Толомбай ҡулына килеп юлыҡҡан. Күпме дәфтәрҙәр араһынан береһенең генә йөкмәткеһе менән әлеге мәҡәлә аша танышабыҙ, ә төп нөсхәһе юҡ. Бабичты беҙ әле лә ғәжәп ижад донъяһы тип беләбеҙ. Әгәр уның барлыҡ мираҫы һаҡланһа, был донъя ни тиклем олораҡ булыр, тағы ла ныҒыраҡ хайран итерлек булыр ине.

Әлеге мәҡәләһендә Ғ. Толомбай шағирҙың көндәлегенән уның нимәләр уҡыуын, ҡаҙаҡ араһында халыҡ ижады йыйыуын, үҙенең ғәҙәттәрен, холоҡ-ҡылығын, ҡиәфәтен мәрәкәләп тасуирлауы байтаҡ ҡына өҙөктәр килтерә, улар аша Шәйехзаданың үҙ тауышын ишеткәндәй булабыҙ.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, «Ғәлиә» осоро менән сағыштырғанда, Бабичтың артабанғы тормошо хаҡында замандаштарының иҫтәлектәре күпкә аҙыраҡ. Мәҫәлән, уның 1916—1917 йылдарҙа Троицкиҙа мөғәллим булып эшләгән дәүеренән беҙгә асылда ике кешенең — Сәрүәр Әҙһәмова менән Мәхмүт Бөдәйлиҙең хәтирәләре билдәле. Улар икеһе лә алтмышынсы йылдарҙа яҙылған һәм «Совет әҙәбиәте» журналының 1965 йылғы беренсе һанында шағирҙың тыуыуына етмеш йыл тулыу уңайы менән донъя күргән.

Сәрүәр Әҙһәмованың «Беҙҙең Бабич» мәҡәләһе шағир хаҡында иң ихлас яҙылған иҫтәлектәрҙең береһе. Аҙаҡ тәржемәсе, әҙип булып китәсәк ун алты йәшлек ҡыҙ Бабич менән Троицкиҙа осрашҡан мәлдәрҙә уның төҫөн, фиғелен, хәрәкәттәрен ғүмерлеккә иҫендә ҡалдырған һәм ҙур булмаған яҙмаларында уҡыусыларҙың күҙ алдына шағирҙың тере һынын баҫтыра алған. Хәтирәләрҙәге эпизодтарҙың ысын тормоштан алынғанлығы, уҙғандарҙың автор күңелендә яңынан кисереп терелгәнлеге баштан аҙаҡҡаса тойола. Сәрүәр Әҙһәмованың Бабичта иң ҡайнар төйғолар тыуҙырыуын, шағирҙың уға шиғыр арнауын, иң яҡын серҙәре менән бүлешеүен иҫкә төшөрһәк, был хәтирәләрҙең ҡиммәте тағы ла арта.

Унынсы йылдарҙа уҡ Троицкиҙа полиграфия һәм журналистика эштәре менән шөғөлләнә башлаған татар зыялыйы Мәхмүт Бөдәйлиҙең иҫтәлектәре Бабичты ысын күңелдән яратҡан, бигерәк тә революцион ваҡиғалар уртаһында бергә ҡайнап йәшәгән, шағир менән икеһе Сәрүәр исемле ике ҡыҙға ғашиҡ булып йөрөгән тоғро дуҫ тарафынан яҙылған. Троицкиҙағы ул ваҡыттағы дөйөм атмосфера, «Мандолина» һ. б. шиғырҙарҙың яҙылыу тарихы, поезда барғанда рус ҡыҙына арнап тыуған шиғыр, Бабичтың имза ҡарағын фашлауы, «Шарранйара» псевдонимы — быларҙың һәр береһе шағирҙың портретын, уның ижад донъяһын үҙенсә тулыландыра.

Мәхмүт Бөдәйли тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы ла шуны мотлаҡ әйтеп үтергә кәрәк. Шәйехзада Бабичҡа ғүмере буйы тоғро ҡалыуын Бөдәйли үҙенең иҫтәлектәрендә генә түгел, уның ижадын артабан өйрәнеү буйынса конкрет эштәр менән дә иҫбат итте. Мин бында осороноң рухи көрәшен документаль теүәллек менән сағылдырыу буйынса, ундағы һәр һыҙатты, айырым шәхесте ике юллыҡ ҡанатлы һүҙ менән мәңгеләштереү оҫталығы буйынса тиңдәше булмаған әҫәр, заманының сатирик энциклопедияһы тип баһаланырға хаҡлы «Китабеннас»ты һәм уға аңлатмаларҙы күҙ уңында тотам.

«Ҡитабеннас фи хаҡҡылхауас» йәғни «Күренекле кешеләр хаҡындағы китап» та Бабич шул осорҙа башҡорттар һәм татарҙар араһында, ҡайһы бер осраҡта барлыҡ төрки донъяһында нисек булһа ла «даны сыҡҡан» ике йөҙҙән артыҡ кешенең ижтимағи йөҙөн яҡшы танып, уларҙың һәр береһенә ике юллыҡ эпиграмма менән юйылмаҫ мөһөр баҫҡан. Әлбиттә, улар араһында

М. Ғафури, Ғ. Ибраһимов, Р. Фәхретдинов, З. Вәлиди, Дәрдмәнд, Я. Юмаев, Ә. Таңғатаров, Ф. Туйкин, Х. Ғәбитов кеүек ысынлап та билдәле шәхестәр ҙә бар. Ләкин «Ҡитабеннас»ҡа ингән күпселек кешеләрҙе хәҙерге уҡыусылар ғына түгел, хатта әҙәбиәтселәр ҙә, тикшереүселәр ҙә бөтөнләй белмәй. 1956 йылда баҫылған Бабичтың һайланма әҫәрҙәрен әҙерләгәндә ул кешеләр хаҡында аңлатмалар биреү буйынса Әхнәф Харисов менән шағирҙың замандашы, 1957 йылда иҫтәлектәр баҫтырған Ғариф Ҡитабов ҙур эш башҡарғайны. Аҙаҡ был аңлатмаларҙы тулыландырыуға Мәхмүт Бөдәйли ғәйәт күп көс түкте, Әхнәф Харисов менән бергә улар «Ҡитабеннас» тағы һәр исемгә бик ентекле комментарий яҙҙы. 1985 йылда Өфөлә донъя күргән һайланмаларҙы төҙөгәндә мин нәҡ бына ошо аңлатмаларҙан файҙаландым һәм был сығанаҡ ап-асыҡ атап күрһәтелде. Шулай итеп, Бабич ижадын өйрәнеүселәр Бөдәйли исемен бер ваҡыт та урап үтә алмаясаҡ. Байтаҡ йылдар үткәндән һуң Мәхмүт ағай Бабичтың ижад донъяһына яңынан айырылмаҫлыҡ булып беректе һәм был хеҙмәте өсөн уҡыусыларҙың да, ғалимдарҙың да уға рәхмәттәре сикһеҙ.

Ләкин был хеҙмәттәрҙе һанға һуҡмау, уларҙы нисек тә күрмәмеш-белмәмеш булыу ғилми этикаға, ғөмүмән, бер ниндәй әхләккә һыя торған хәл түгел. 1990 йылда Ҡазанда Шәйехзада Бабичтың «Зәңгәр жырлар» исемле китабы баҫылып сыҡты. Унда шағирҙың быға тиклем сыҡҡан йыйынтыҡтарына инмәгән айырым шиғырҙары, фельетондары, хаттары, көндәлек яҙмалары тупланған. Был яҡтан баҫманың төҙөүсеһе Ғәлимйән Ғилманов ҙур эш эшләгән. Әлбиттә, китаптағы, бигерәк тә аңлатмалар өлөшөндәге айырым хаталар, ҡайһы бер халыҡ йырҙарын шағир йырлаған өсөн генә уның авторлығына бәйләү, 1918 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан «Зәңгәр йырҙар» исемле китапҡа ингән шиғырҙарҙың ниңәлер тик комментарийҙар бүлегендә генә урын алыуы хаҡында махсус һүҙ алып барырға мөмкин булыр ине. Әле һүҙ «Ҡитабеннас» тураһында. Уға бирелгән аңлатмалар йыйынтыҡта ҙур урын алып тора һәм кешеләргә бирген белешмәләрҙең күбеһе 1985 йылда башҡортса сыҡҡан китаптан һүҙмә-һүҙ йәки бер аҙ «редакторлап» күсерелгән. Ләкин Әхнәф Харисовтар, Мәхмүт Бөдәйлиҙәр башҡарған эштәр тураһында Ғ. Ғилманов бер нәмә лә әйтмәй һәм күпселек татар уҡыусылары өсөн «Ҡитабен-

нас» тағы ҡатмарлы төйөндәрҙе сисеүҙә нәҡ ул тәү башлап юл ярыусы тигән ялған тәьҫир ҡала. Бабичҡа ҡарата ғәҙелһеҙлектәр күп ҡылынды, ләкин шағирҙың мираҫы, ошо мираҫҡа мөнәсәбәте булған һәр хәтирә, һәр хеҙмәт бөгөн дә яҡлауға мохтаж икән шул.

Шәйехзада Бабичтың 1917 йылдың йәйендә Ырымбурға килеүе, «Ҡармаҡ» журналында эшләй башлауы, унан һуң башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылыуы, «Тулҡын» ойошмаһының «Башҡорт» газетаһында баҫылған декларацияһын үҙ ҡулы менән яҙып, уның төп көсөнә әйләнеүе, Башҡорт хөкүмәтендә яуаплы вазифалар башҡарыуы, ҡалала шаулап үткән кисәләрҙең үҙәгендә булыуы, милләтте ирек өсөн көрәшкә әйҙәүсе ялҡынлы шиғырҙар ижад итеүе, 1918—1919 йылдарҙа төрлө яҡтан таланған, йолҡҡоланған, ут эсендә ғазаптар сиккән Башҡортостан буйлап ауыр, урау-урау юлдар үтеүе һәм ошо изге юлда ҡорбан булыуы хаҡында З. Вәлиди, Т. Ченәкәй, С. Рәхмәти, М. Рәхмәтуллин, И. Иҫәкәев, М. Ғәлиева, А. Албин һ. б. иҫтәлектәре ҡәҙерле ҡомартҡы булып һаҡланып ҡалған. С. Ҡудаш, Ғ. Ҡитабов, С. Әҙһәмова, Ғ. Сабировтың хәтирәләрендә лә Бабичтың ошо осорҙағы тормошона бәйле төрлө мәғлүмәттәр бар.

Әлбиттә, былар барыһы ла Бабичтың башҡорт азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуына бәйле халыҡ араһында таралған төрлө хәтирәләрҙең, риүәйәттәрҙең кескәй бер өлөшө генә. Аҡмулланан һуң Бабич — үҙе хаҡында башҡорттарҙа иң күп легендаларҙың тыуыуына сәбәпсе булған икенсе шағир. Бигерәк тә Көньяҡ Башҡортостанда шағирҙы хәтерләүсе ил ағалары ауыл һайын тиерлек йәшәгән. Исемдәре тыйылған саҡтарҙа ла Вәлидиҙәр, Бабичтар тураһындағы төрлө хикәйәттәрҙе ололар ауыҙынан беҙгә лә тыңлап үҫергә насип булды. Уларҙы шунда уҡ яҙып алырға кәрәк булған да бит... Барыһын бергә йыйһаң, шағир һәм халыҡ яҙмышы тураһында ниндәй китап тыуыр ине!

Шәйехзада Бабичтың Ырымбурҙағы көндәре тураһында Төхфәт Ченәкәйҙең иҫтәлектәре күп кенә мәғлүмәт бирә. Ченәкәй шағирҙың шиғри хаттарын һаҡлап алып ҡалған, ҡәләмдәше һәләк булғандан һуң уның мираҫын туплауға күп көс һалған кеше. Уның башҡорт кисәләре хаҡында шул ваҡытта баҫылып сыҡҡан рецензиялары, «Бабич ҡыҙыҡтары» тигән яҙмалары уҡыусыны шул осорҙағы мөхиткә алып инеп китә.

Бабич менән бергә «Тулҡын»дың программаһына ҡул ҡуйған, уның менән кисәләр ойоштороп йөрөгән Сәхи Рәхмәти хәтирәләре артыҡ ҙур булмаһа ла, унда шағирҙың тормошо һәм ижады хаҡында мөһим деталдәр бар. Мәҫәлән, «Йә эйәһәл мөьминәт» (ул күберәк «Йә эйәһел мосолман» исеме менән йөрөй) тигән шиғыр 786 юлдан тора ине тиеләр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был күләмдәге вариант һаҡланмаған. Рәхмәтиҙең хәтирәләре Бабичтың был осорҙағы политик ҡараштарын асыҡларға ла мөмкинлек бирә.

Шағирҙың 1918—1919 йылдарҙа һуғыш, дәһшәт эсендә күргән—кисергәндәре, Йылайырҙа язалап үлтерелеүе тураһындағы хәтирәләр күбеһенсә ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына, улар ғәҙәттә берәй эпизод, осраҡлы ғына танышыу, ниндәйҙер ваҡиғаның шаһиты булыу хаҡында һөйләй. Хәтәр юлдарҙа шағирға тап булған, уның менән бик тиҙ айырылған кешеләрҙең хәтерендә шундай өҙөк-өҙөк күреНештәрҙең генә тороп ҡалыуы бер ҙә ғәжәп түгел. Ләкин булған тиклеменең һәр береһе тиерлек Бабичтың яҙмышын асыҡлай торған яңы һыҙат өҫтәй.

Шуныһы айырыуса мөһим: был осорҙа ҡаралған хәтирәләр Бабич ижадының, шағир яҙмышының башҡорт ерлегенә тағы ла нығыраҡ тамырлана барыуын, халыҡсанлығының үҫеүен күрһәтә. Шиғырҙарҙа тормош менән, заман менән мөнәсәбәттәренә һаман да көсәйгәндән көсәйә барған милли рух замандаштарҙың иҫтәлектәрендә шағирҙың төп сифаты итеп раҫлана.

Ысынлап та, заман үҙгәреү менән Бабич сәхнәнән эйәргә һикерҙе, яугир шағирға әйләнде. Башҡорт тарихында шағирҙарҙың яугирға әйләнеүсе Салауатҡа тиклем булған кеүек бәлки унан һуң да булғандыр, ләкин был традиция Бабич яҙмышында халыҡ менән яҡыса бәйләнеш бейеклегенә күтәрелде. Был осор Бабич шиғриәтенең иң халыҡсан осоро булды, әҫәрҙәре башҡорттар араһында бығаса булмаған дәрәжәлә шөһрәт ҡаҙанды. Уның менән бергә яу юлдарын үткән ир-егеттәрҙең араһында аҙаҡ улдарына һөйөклө шағирҙары иҫтәлегенә Бабич тип, Шәйехзада тип исем атауҙар йышайҙы.

1991—1992 йылдарҙа «Ағиҙел» журналында Зәки Вәлидиҙең «Хәтирәләр»енең донъя күреүе халҡыбыҙҙың бөгөнгө рухи тормошонда тарихи ваҡиға булды. Унда ике-өс урында Бабич хаҡында ла һүҙ бара. Ғәйәт киң даирәләрҙе, әллә күпме илдәрҙе иңләгән был иҫтәлек-

тәрҙә шағир тураһында башҡа ваҡиғаларға бәйле юл ыңғайында ғына әйтеп кителһә лә, улар беҙгә бөтөнләй билдәһеҙ факттарҙы хәбәр итә. Мәҫәлән, үзбәк шағиры Сулпандың Башҡорт хөкүмәтендә Вәлиди янында хеҙмәт итеүе, тимәк, башҡорт шағиры менән дә аралашыуы, уларҙың төрлө ҡалаларҙа мәғлүмәт йыйыу буйынса, йәғни разведка эшендә булыуҙары, ошо вазифаны башҡарғанда Шәйехзаданың бер ҡаҙаҡ ҡыҙы менән роман яҙырлыҡ мажаралар кисереүе, 1943 йылда Германияла әсирлектә башҡорт һалдаттарының Вәлидигә Бабичтың Әмир Ҡарамышев үлеүенә арналған шиғырын һөйләүҙәре.

Зәки Вәлиди менән Шәйехзада Бабич араһындағы бәйләнеш тураһында мин айырым мәҡәлә яҙғайным инде. Бында тағы ла бер момент хаҡында өҫтәп әйтергә кәрәк. Бабичты ҡайһы саҡта кемдеңдер политик йоғонтоһона бирелеп, кемдеңдер тәьҫире йәки туранан-тура күрһәтмәһе буйынса ижад иткән тип иҫбатларға тырышыусылар бар.

Бабичтың Троицкиҙан ҡайтҡан сағын иҫләп, С. Ҡудаш былай тип яҙа: «Электән үк Бабичтың тәбиғи талантына һоҡланып һәм ҙур өмөт менән ҡарап килгән тәжрибәле Ғәлимйән Ибраһимов, ул Өфөгә ҡайтып төшөү менән, уның теҙгенен ҡулына эләктереп алды. Шуға күрә ул Ғәлимйән Ибраһимов квартираһында торҙо, уның идея йоғонтоһонда йәшәне һәм ижад итте. Әгәр ҙә һеҙ Ғәлимйән Ибраһимовтың шул айҙарҙағы сығыштарының политик йөкмәткеләре һәм телдәре менән Бабич сатираларының идея йүнәлештәрен һәм телен йәнәшә ҡуйып ҡараһағыҙ, улар араһында ғәжәп бер эске яҡынлыҡ табырһығыҙ. Уларҙың айырмалары тик тышҡы формаларында ғына». «Ҡитабеннас»тың «Яңыртылғандар» өлөшөнә ҡарата ла шундайыраҡ фекер әйтелә: «Ғәлимйән Ибраһимовтың шул съезда (Мәскәүҙәге Бөтә Россия мосолмандарының беренсе съезында. — Р. Б.) һөйләгән һүҙҙәре, был делегаттарға таҡҡан исемдәре һуңынан Бабич ҡәләме менән сатирик ҡалыпҡа һалындылар» (Сәйфи Ҡудаш. Ике талант. — «Ағиҙел», 19—65, № 8).

Ғәлимйән Ғилманов Бабичтың Ырымбурҙа 1918 йылда сыҡҡан «Зәңгәр йырҙар» китабына ингән ҡайһы бер шиғырҙарын, Башҡорт хөкүмәтенең күрһәтмәһе йәки заказы буйынса яҙылған булырға тейеш, тип үтә сәйер фараз итеүҙәргә ҡоролған хата һығымталар яһай.

«Бабич үҙенең «Башҡорт хөкүмәте» тоҙағына эләккәнен һиҙмәй ҙә ҡалды, — тип хәтерләй Ғариф Китабов.. — Мин бер ваҡыт, 1917 йылдың һуңғы көндәрендә Бабичтан:

— Эштәр нисек, яҡташ? — тип һорағайным. Ул миңә ҡулын һуҙҙы ла:

— Ләхәүләләр уҡындым, өс мәртәбә суҡындым, уңын һуңын тикшермәй, ниде эшкә тотондом, — тине. («Әҙәби Башҡортостан», 19—57, № 4.)

Шағирҙың Башҡорт хөкүмәте эшенә ҡатнашып китеүен, уның ижад юлындағы политик эҙләнеүҙәрен, хәҡиҡәткә ынтылыуын былай еңел генә «унды-һулды» ҡарап тормайынса яһалған аҙым итеп аңлатыу үтә ябайлаштырыу йәки күрәләтә боҙоп күрһәтеү булыр ине. Йәнәһе, кисә генә Бабич Ғ. Ибраһимовтың политик лозунгыларын рифмаға һалған, ә бөгөн Вәлидиҙең фармандары буйынса яҙырға тотонған. Хатта Бабич тураһында иң беренсе хаҡ һүҙҙе әйткән. «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уның уҡытыусыһы булған һәм шағирҙың ижади тәбиғәтен бик нескә тойған Ғ. Ибраһимовтың: «Ул башта татарсы, мәълум татар өсөн яныусы, татарҙың дошмандары менән һуғышыусы ине. Унан һуң татарға арҡаһын борҙо, башҡортҡа ҡул һуҙҙы, Салауат балаларын күккә күтәреп, татарға үпкә менән ҡарай башланы», — тигән һүҙәре, «башта татарсы, унан башҡортсо» формулировкаһы шағирҙың ҡатмарлы юлына тап килеп бөтмәй, илдәге азатлыҡ хәрәкәте үҫешендә Бабичта милли үҙаңдың ныгына барыуын бөтә тәрәнлегендә һәм фажиғәһендә сағылдырмай.

Бабич, ысынлап та, февраль революцияһынан һуң «Ҡер, татар, кер, татар, ҡатарға!» тигән орандар һалды һәм был саҡырыу татар халҡы менән бергә башҡа төрки милләттәренә лә төбәлгәйне. Билдәле булыуынса, батша Россияһында иҙелгән төрки халыҡтарының күбеһен татар тигән дөйөм исем менән атау ныҡ таралғайны һәм татар буржуазияһы быны һәр яҡлап ҡеүәтләп тора ине. Бабичтың ҡайһы бер шиғырҙарында ла төрки халыҡтарын татар исеме менән берләштереү осрап ҡуя. Мәҫәлән, «татарҙың донъяһы» «утыҙ миллионға еткән бер халыҡ» итеп һүрәтләнә.

Башҡорт милләтенең ауыр хәле, Башҡортостан яҙмышы хаҡында иһә Бабич әле башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте башланғанға тиклем үк ғорурланып та, һыҙланып та уйланды. 1916 йылда уҡ ул башҡорт халҡы-

ның шул саҡтағы ауыр яҙмышын күҙ алдына баҫтырған һәм шул уҡ ваҡытта милләттең киләсәгенә оло өмөт бағлаған «Ҡөтәм» исемле шиғырын яҙҙы һәм, Зариф Бәширҙең хәтирәләрендә әйтелгәнсә, уны башҡортса баҫтырып сығарыу талабын ҡуйҙы.

«Тупраҡ» исемле шиғырҙа иһә милли азатлыҡ мәсьәләһе конкрет нигеҙҙә — ер мәсьәләһенә бәйле ҡаралды («Тупраҡ башҡорт бәхетелер»), милләттәштәренә шағир «Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ, бүтәнсә юҡ сарабыҙ. Тупраҡ китһә, һау бул, донъя! Өҙөлмәктер самабыҙ», — тип өндәште.

Бабичтың бындай әҫәрҙәре араһында иң күренеклеһе, һис шикһеҙ, уның «Башҡортостан» исемле атаҡлы шиғыры булды. Шағирҙың 1916—1917 йылда Троицкиҙағы тормошон хәтерләп, Сәрүәр Әҙһәмова был шиғырҙы ла телгә ала: «Ул беҙгә бик йыш килеп йөрөй, ҡайһы саҡта үҙенең ҡанатлы мандолинаһын да ҡыҫтырып килеп, уйнап, йырлап ултыра. «Ҡом бураны» көйөн айырыуса яратып уйнай һәм үҙенең «Башҡортостан» тигән шиғырын шул көйгә һалып йырлай». Ошонда уҡ автор иҫкәрмә биреүҙе тейешле һанаған. «Был шиғыр йыйынтыҡта ниңәлер 1918 йылғы әҫәрҙәр рәтендә күрһәтелгән. Хәлбүки, мин уны Бабичтан Троицкиҙа уҡ ишетеп беләинем. Баҫылыу датаһы 1918 йылда булғандыр, бәлки».

Башҡорт милли хәрәкәтенә Бабич ошондай ышаныстары һәм өмөттәре, күңелендә йыйылып килгән ғорурланыу һәм һыҙланыу тойғолары менән ҡушылды. Ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең логикаһы буйынса азатлыҡ өсөн көрәшкә шағир яһалма рәүештә юлыҡҡан, нисектер йәбештереп ҡуйылған һымаҡ килеп сыға. Бындай раҫлауҙар — шағирҙы махсус рәүештә рухи тамырҙарынан йолҡоп алырға, тыуған ерлегенән аҡтарырға, туған милләтенән көсләп ситләштерергә тырышыу ул.

Ә бит тамырҙарҙы барлай башлаһаң, Бабичтарҙың Бәпес олаталарынан килгән нәҫел-нәсәбе быуын-быуын үрелеп, күпме замандарҙан бөгөнгө көнгә килеп тоташа. Бабичевтарҙың шәжәрәһен һис бер кире ҡаҡҡыһыҙ архив материалдарына, төрлө йылдарҙа халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә таянып, тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров бик ентекле яҙып сыҡты («Ағиҙел», 1990, № 10). Уларҙың бынан башҡа Әксән Бабичев төҙөгән шәжәрәһе лә бар. Был документтар, Мөхтәр Бабичев ҡайҙандыр Ҡазан яғынан күсеп килгән дә тамырланып ҡалған, тигән уйҙырмаларға бер ниндәй нигеҙ ҡалдырмай.

Шағир тураһындағы иҫтәлектәр араһында был боронғо ҡомартҡылар үҙ урынын алырға, хатта хәтирәләр китабының тәүге битен асып ебәрергә хаҡлы.

Бабич хаҡындағы иҫтәлектәрҙең айырым китап булып донъя күреүен халҡыбыҙ күптән көтә. Шағирҙың әҫәрҙәрен уның тәүге китаптарынан уҡыған оло быуын кешеләре инде бик аҙ ҡалып бара. Күпселек уҡыусылар өсөн был хәтирәләр менән танышыу уларға бөтөнләй тиерлек билдәһеҙ донъяны асасаҡ, шағирҙы әҫәрҙәре аша ғына түгел, тере кеше итеп күрһәтәсәк, уны уратҡан ваҡиғалар эсендә, ул аралашҡан, дуҫлашҡан, бәхәсләшкән, һөйгән йәки сөн һөймәгән кешеләр менән бергә ҡатмарлы осорға алып инәсәк. Бабичтың тормошондағы һәм ижадындағы бәхәсле урындарҙы асыҡлау, ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең яҙылыу тарихы буйынса мәғлүмәттәр биреү, быға тиклем билдәле булмаған шиғырҙарҙы тергеҙеү, текстологик төҙәтмәләр, тулыландырыуҙар — иҫтәлектәрҙең бына ошондай бай сығанаҡ булыу яғынан да әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ ҙур.

Иң ҡыуаныслыһы шул: иҫтәлектәрҙән уҡыусы Бабич тураһында халыҡ фекерен, халыҡ ҡарашын күрә. Киҫәк-киҫәк хәтирәләрҙән ваҡыт юя алмаҫлыҡ хәҡиҡәт туплана. Йылдар буйы төрлөсә тыйып та халыҡ хәтерен юҡ итеп, уны мицрәүләтеп, шағирҙарын оноттороп булмай. Туған милләте өсөн янып йәшәгән, рәсми дәрәжәләр бирелмәһә лә ике мөсәл ғүмерендә халыҡ шиғырына әйләнеп өлгөргән Шәйехзада Бабич — халыҡ күңелендә, ил йөрәгендә.

## *АБДУЛХАҠ ИГЕБАЕВ*

### ҠАЙТЫП ТӨШҺӘҢ ИНЕ...

*Атаҡлы шағир Шәйехзада Бабичҡа*

Һай, арҙаҡлы шағир Шәйехзада,
Ҡыңғырауҙар тағып пар атҡа,
Юл буйына көмөш моң сыңлатып,
Бер елдереп ҡайтып төшһәң ине
Беҙҙең яҡҡа,
            күркәм Баймаҡҡа!

Күңелкәйең һулҡып һағынғандыр
Ҡоштар йырын,
            Саҡ, Суҡ тауышын,
Был төйәктә тыуып үҫмәһәң дә,
Ошо ергә,
            ошо сал тупраҡҡа
Ереккәндер һинең яҙмышың.

Мосафирҙай аҙмы ҡыҙырҙың һин
Талашты һәм Шырҙы[1] буйҙарын,
Йөрәккәйең янған минуттарҙа
Устарыңа алып уртлап эстең
Темәс шишмәһенең һыуҙарын.

Бәғзе ваҡыт Рапат тигән тауҙың
Ҡыраз ташҡайына ултырып,
Йөрәкһенеп шиғри мәрйен теҙҙең

[1] Талашты һәм Шырҙы — Темәс ауылындағы йылға исемдәре.

Табак та ғына табаҡ аҡ ҡағыҙҙың
Ап-аҡ биткәйҙәрен тултырып.

Көмөш кенә башлы,
алтын ҡашлы,
Аҫыл мандолина ҡылдарын
Сиртә башланыңмы,
барса кеше
Һинең сихри моңдо тыңлар ине
Алмайынса хатта тындарын.

Яғалсаның[1] һомғол ҫауҡалары,
Һополошоп үҫкән артыштар,
Алҡынып та аҡҡан Һаҡмарымдың
Ебәк тулҡындарын серҙәш иткән
Зифа буйлы һылыу ҡамыштар;
Һәр берене, гүйә, өнһөҙ генә
Йәдкәр һөйләй һинең турала,
Мин белмәгән бик күп хәтирәләр,
Әйтерһең дә, серле йомғаҡ булып,
Күңелемә килеп урала.

Һин айҡаған биләндәргә сыҡһам,
Мәтрүшкәләр, төрлө сәскәләр,
Гүйә, зауыҡланып-илһамланып,
Касандыр бер һинән отоп алған
Таҡмаҡтарҙы ҡат-ҡат әйтәләр.

Һине юҡһыныуҙан сағылдарҙа
Һыҡтап иңрәй кеүек йор ҡурай,
Күк Ирәндек ҡаяһына баҫып,
Әле булһа һине көтә төҫлө
Моңдарыңа ғашиҡ ҡоралай.

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,
Ләкин, Бабич, һин бит ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилығын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң.

---

[1] Яғалса — тау исеме.

Ажар бөркөт һымаҡ ғорур булдың,
О, юҡ йөрөмәнең моңайып,
Урттарыңа ҡандар төйөлһә лә,
Хәсрәтеңде йөрәгеңә йотоп,
Йәш аралаш көлдөң йылмайып.

Ҡомһорап та сапҡан арыҫландай,
Көрәш майҙанына атлыҡтың...
Йылдар уҙған һайын, уфтандырып,
Йәнен ҡырҡҡа телгән ҡайғыһы ла,
Ғорурлығы ла һин башҡорттоң!..

Нисә тапҡыр һине үлтерҙеләр,
Күпме яуызлыҡтар ҡылдылар,
Хатта исемеңде, бөтөнләйгә
Халыҡ хәтеренән юйып ташлап,
Мәңге юҡ итмәксе булдылар!

Уҫал хөкөмдарҙар һәм ҡатилдар
Борондан уҡ шулай шашҡандар,
Илдең ут йөрәкле батырҙарын,
Сәсән телле мәшһүр шағирҙарын
Атҡандар,
        йә тотоп аҫҡандар!

Шундай аяуһыҙлыҡ һәм яуызлыҡ
Ҡабатланмаҫ тимә бөгөн дә,
Зәһәр ағыуҙарын сәсмәк булып,
Аждаһалар
        дулап ятмаймы ни
Яһилдарҙың йөрәк төбөндә!
Йыр быуыла һаман,
        сәсәй заман,
Арта бара дошман хәйләһе...
Ә ҡайҙалыр ярһып-ужарланып,
Тағы ҡандар көҫәп йөрөй кеүек
Һине сапҡан ҡылыс шәүләһе!

Әй, самими тәбиғәтле Бабич,
Һине кем һуң,
        кем һуң онотор?
Әгәр онота икән, ул әҙәмдәр
Зиһен сәхрәләрен сафландырған
Рухи инештәрен ҡоротор!

Ғүмер баҡый атайсал тип яндың,
Ҡолаҡ һалдың заман ғәменә,
Ил-йортоңдоң,
ете ырыуыңдың,
Армыт-армыт мәғрүр Уралыңдың
Моң-зарҙары һеңде йәнеңә.

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Мөхәббәтле шағир ҡайҙа бар?
Күңелеңдең аяҙ көмбәҙендә
Етемдәрҙең йәнен йылытырлыҡ
Ҡайнар ҡояш та бар,
Ай ҙа бар!

Шәйехзада, һинең шикелле лә
Кешелекле шәхес ҡайҙа бар?
Саф көмөштәй матур йырҙарыңда
Ғашиҡтарҙың дәртен дөрләтерлек
Ихлас һөйөү ҙә бар,
наҙ ҙа бар!

Мөхәмәтзакир улы Шәйехзада,
Шиғриәттең йәүһәр тажы һин,
Мәңге баш эймәгән милләтемдең
Быуындарҙан быуындарға күскән
Милли моңо,
милли сазы һин!

Аһ... йөрәкте бик йыш тетрәндерә
Фажиғәһе һинең ғүмерҙең,
Ләкин, шағир, һин бит
ҡыҫҡа ғына,
Фәҡәт ике мөсәл ғүмереңдә лә,
Фанилығын тойоп был ерҙең,
Гүзәл мираҫ итеп ҡалдырырлыҡ
Бөйөк эштәр эшләп өлгөрҙөң!

Йөҙәр йылға тик бер тыуа тиҙәр
Таң ҡалырлыҡ йыр-моң маһиры,
Һинең маһирлыҡтың, оҫталыҡтың
Урал илкәйендә тамыры...
Ана шуға, Бабич,
һин үлемһеҙ,
Халҡымдың һин даһи шағиры!

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Мостай Кәрим.* «Ал да нур сәс халҡыңа!» . . . . . . . . 5
*Бикбаев Р.* Ҡанатлы Бабич . . . . . . . . . . . . . 10
*Әсфәндиәров Ә.* Шәйехзада Бабичтың нәҫел-нәсәбе . . . 24
*Ҡолшәрипов М.* Шәйехзада Бабич ижадында Башҡорт тарихының сағылышы . . . . . . . . . . . . . 39
*Ураҡсин З.* Шәйехзада Бабич — һүҙ оҫтаһы . . . . . 52
*Хөсәйенов Ғ.* *Бабич* — шиғыр оҫтаһы . . . . . . . 59
*Сөләймәнов Ә.* Бабич ижадында халыҡ йыры һәм афористик фольклор башланғыстары . . . . . . . . . 74
*Шәрипова З.* Бабич поэзияһында дини символика . . . . 90
*Шафиков Г.* Последние дни Бабича . . . . . . . . 99
*Бикбаев Р.* Халыҡ шағиры — халыҡ хәтерендә . . . . 106
*Абдулхаҡ Игебаев.* Ҡайтып төшһәң ине . . . . . . . 124

Литературно-художественное издание

**НАРОДНЫЙ ПОЭТ В ПАМЯТИ НАРОДНОЙ**

Литературно-критические статьи

*(на башкирском и русском языках)*

Редакция мөдире *С. Н. Шәрипов*
Мөхәррире *Р. Х. Дәүләтколов*
Рәссамы *М. Р. Зәйнуллин*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Ғ. Сыңғыҙова*
Корректоры *Ә. М. Кәримова*

ИБ № 5620

Йыйырға бирелде 26.02.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 13.06.96. Ҡағыҙ форматы 84×108 1/32. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 6,72. Шартлы буяу отт. 6,92. Иҫәп-баҫма таб. 6,19. Тиражы 7000 дана. Заказ № 180. Хаҡы ирекле.
Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001. Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.